ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

5-11 ноябрь (ҡырпағай) 2016

№45 (723)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Баҫма матбуғатҡа...** көрсөк ҡағылырға тейешме ни? 3



**"Төньяҡ амурҙары"ның...** серле байрағы 7



**Ҡобайыр, эпос башҡарыусыларҙы...** "сәсән" тигән оло исем менән атап буламы? 8-9



**Эшләгән эштәрең...** энциклопедияға инерлек булһын 11



**ТВ-программа** 14

*Бер үк ваҡытта әфәнде лә, ҡол да булып булмай. Ҡол булғың килһә, кешеләрҙең һәр береһенә ялағайлан һәм ярарға тырыш, әфәнде булғың килһә инде, үҙеңде ошо ҡылыҡтарҙан азат ит.*

*(Эпиктет).*

БАШ ҠАЛАМ

**Өфө - Башҡортостандың ғына түгел, ул беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙең дә, мәҙәниәтебеҙҙең дә, сәнғәтебеҙҙең дә баш ҡалаһы. Республика яҙыусыларының күпселеге бында йәшәй. Театрҙарыбыҙ, ижади союздарыбыҙ, юғары уҡыу йорттары ошонда урынлашҡан. Баш ҡала республика гәзит-журналдары нәшер ителә, китаптарыбыҙ баҫыла. Тимәк, беҙҙең яҙмышыбыҙ ҙа, хеҙмәтебеҙ ҙә уртаҡ.**

# РЕСПУБЛИКАНЫҢ ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## әҙәбиәтебеҙҙең дә төп ҡалаһы ул




Өфөлә һуңғы йылдарҙа яңы объекттар, ҡала биҙәге булырҙай урындар, ял зоналары барлыҡҡа килә. Быға тиклем Шиғриәт байрамдарын Салауат Юлаев майҙанында үткәреп килһәк, былтыр уны Этноауыл эргәһендә ойоштorҙоҡ. Был ауыл беҙҙең ҡала өсөн бөтөнләй яңы күренеш, асыш булды. Быйыл иһә шағирҙарҙы Ете ҡыҙ фонтаны үҙенә йыйҙы.

Мин үҙем Ырымбур өлкәһенән. Ауылыбыҙ ҙур түгел, 80 самаһы йорт. Ауылдың урта мәктәбендә бөтөн фәндәрҙе тик башҡорт телендә уҡыуға ҡарамаҫтан, юғары белем алыусыларыбыҙҙы һанаһаҡ, 40-50 кеше булыр.

Башҡортостанға барыу, Өфөнө күреү, Урал тауҙарына менеү, Ағиҙелдә һыу инеү бала саҡтан күңел түремдә йәшәгән иң ҙур хыялым ине.

1957 йылда яңы ғына асылған Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инергә документтар һәм имтихандар тапшырырға килдем. Автобус төндә генә килеп етте һәм Ленин урамы менән Пушкин урамы сатындағы магазинға яҙылған "Балыҡ" тигән атаманы уҡып, аптырауымдың сиге булмағайны. Сөнки "рыба" тигәнгә өйрәнгәнбеҙ, баҡтиһәң, балыҡ тип тә яҙырға мөмкин икән! Артабан яҙылған "аҙыҡ-түлек" тигән яҙыу ҙа сәйер тойолдо. Башҡортса уҡыһаҡ та, ҙур ҡалала башҡортса яҙыуҙарҙы күреү минең өсөн аптырарлыҡ, иҫ китерлек яңылыҡ булды.

Ә хәҙер урамдарҙағы башҡорт колориты, башҡортса яҙыуҙар, башҡорт телендәге аралашыуҙар, телерадио тапшырыуҙар, башҡорт матбуғаты минең өсөн ғәҙәти хәл, норма, тормошомдо ошо башҡортса яҙыуҙарһыҙ, башҡорт теленең ҡулланылышынан башҡа күҙ алдына ла килтермәйем.

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Был көндәрҙә Халыҡ-ара Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы көнө билдәләнеп, уның дөйөм кеше хоҡуҡтарын яҡлау буйынса гарант булараҡ әһәмиәте тағы бер тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Ә һеҙ ошо уңайҙан ойошмаға ниндәй мәсьәләләр буйынса мөрәжәғәт итер инегеҙ?***

***Фәтхулла МӨХӘМӘТОВ, хеҙмәт ветераны:*** Яңыраҡ Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тураһында шундай юлдар уҡығайным: "БМО-ның төп бурысы - ағымдағы тормош тәртибе һаҡланыуын күҙәтеү, дипломатик килешеүҙәр юлы менән дәүләттәр араһында килеп тыуған тышҡы конфликттарҙы көйләү, яйға һалыу, Ер йөҙөндә барған тотош ядро ҡоралланыуы шарттарында планетабыҙҙа именлек һәм тыныс тормош өсөн көрәш..." Һуңғы 50 йыл эсендә генә лә БМО-ға 150 дәүләт ағза булып ингән. Быныһы ярай. Шул саҡ күҙгә эләккән бер мәғлүмәттән мин йылан саҡҡандай тертләп киттем. Бына ул: "1990 йылдан алып бөтөн донъяла барған конфликттарҙа һәләк булғандарҙың 90 проценты - тыныс граждандар һәм уларҙың 80 проценты - ҡатын-ҡыҙ һәм балалар..." Ер йөҙөндә шундай ҡырылыш барғанда, БМО көнө билдәләнеп, байрам саралары үткәрелә, был ойошманың Генераль Ассамблеяһы, Хәүефһеҙлек Советы туҡтауһыҙ ултырыштар үткәрә икән, быларҙың һөҙөмтәһе, файҙаһы низә икән һуң? Үҙебеҙҙең элекке туғандаш республика тип йөрөтөлгән Украинаны ғына алып ҡарайыҡсы, йәмәғәт. Күҙ алдыбыҙҙа танығыһыҙ булып ҡурҡыныс әкиәттәге ут сәсеүсе аждаһаға әүерелде лә ҡуйҙы түгелме? Үҙ халҡына ҡаршы яу асып, күпме кешене һәләк итте, күпме ауыл, ҡалаларын, хатта ки мәктәп һәм больницаларҙы утҡа тотоп, емертте, яндырҙы. Күрәләтә фашистик режим баш ҡалҡыта. Ә БМО-ның ултырыш залдарында һаман булһа оҙон-оҙон докладтар уҡыла, фекер алышыуҙар бара. Мин һеҙҙең һорауға яуап итеп, бына ошо хаҡта яҙыр инем БМО-ға. Был ойошмаға үҙенең төп бурысын үтәүгә нимә ҡамасаулай икән, тип һорар инем. Халыҡ-ара кимәлдә сәйәси ыҙғыш-талаш, тыныслыҡ, дәүләт-ара конфликттар, санкциялар, миграция яуы тап ана шул Украина арҡаһында киҫкенләшеп китте түгелме? Ни сәбәпле БМО-ла ағза булып торған 150-нән ашыу ил Украинаны ғына түгел, ә уның менән оҫта идара итеүсе агрессив көстәрҙе лә аҡылға ултырта алмай?

(Дауамы 2-се биттә).

12+

**✓ Һәр дәүләт эсендәге күп милләтле халыҡтар мәнфәғәте лә ошо БМО-ның иғтибар үҙәгендә тотолалыр, моғайын. Һәр бер милләтте, этник төркөмдәрҙе лә ҡурсып, һаҡлап ҡалыу өсөн ниҙәр эшләнә икән БМО-ла?**



ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. 50665 индекслы гәзитебеҙгә - 485 һум 40 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) 515 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

Белеүегеҙсә, гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Ноябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән бер кеше **"Антология поэзии Башкортостана"**, 2 кеше **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**, 1 кеше **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 2 кеше **Әхмәр Үтәбайҙың "Сәхрә"**, 2 кеше **Рәйес Түләктең "Мең дә икенсе кис..."**, 3 кеше **"Бураҡаевтар ижады"**, 10 кеше **2017 йылға "Башҡортса дини календарь"**, 10 кеше **"Шайтан хәйләләре"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.




**Октябрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән:**

Нуриман районы Байгилде ауылынан Анфиса Фазлетдинова - **"Антология поэзии Башкортостана**;

Ҡыйғы районы Абзай ауылынан Р. Ҡадирова, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Маһикамал Иҫәндәүләтова - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**;

Учалы ҡалаһынан Сара Шәрипова - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**;

Федоровка районы Бала Сытырман ауылынан Мөнәүәрә Сәлишева - **"Әхмәтзәки Вәлиди"**;

Баймаҡ районы Түбәнге Таһир ауылынан А. Байраҡаева - **"Башкирские исторические предания и легенды";**

Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Н. Күлбаев - **"Бураҡаевтар ижады"**;

Хәйбулла районы Иҫәнгилде ауылынан Бөртөкбикә Ғәлина, Ҡырмыҫҡалы районы Ибраһим ауылынан Рәмил Ғәлиев, Иҫке Бәпес ауылынан Ғәлиә Абдуллина, Өфө ҡалаһынан Ф. Ишҡыуатова, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан А. Ҡусҡарова, Баймаҡ районы Түбәнге Таһир ауылынан К. Байраҡаева, Билал ауылынан Р. Әбйәлилов, Ярат ауылынан М. Дәүләтбаев, Ейәнсура районы Трушин ауылынан С. Рафиҡова, Әбйәлил районы Әбдрәш ауылынан З. Мәжитова - **2017 йылға "Башҡортса дини календарь";**

Учалы районы Ҡорама ауылынан А. Моратшин, Бөрйән районы Ҡолғана ауылынан Ш. Нуретдинова, Өфө ҡалаһынан Әминә Исмәғилева, Ю. Вәлиев, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Бәпес ауылынан Ф. Ҡолоҡаева, Әбйәлил районы Ишҡол ауылынан Г. Вәлиева, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Р. Сәлимов, Ярат ауылынан Ә. Ҡарамурзин, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Ғ. Шәйәхмәтов - **"Шайтан хәйләләре"** китаптарына лайыҡ булды.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Был көндәрҙә Халык-ара Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы көнө билдәләнеп, уның дөйөм кеше хокуктарын яклау буйынса гарант буларак әһәмиәте тағы бер тапкыр һыҙык өҫтөнә алынды. Ә һеҙ ошо уңайҙан ойошмаға ниндәй мәсьәләләр буйынса мөрәжәғәт итер инегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Илдар ХУССАМОВ, адвокат:*** Рәсми статистика мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн илдә граждандарҙың 80 проценты хоҡуҡ һаҡлау органдарына ышаныс белдерә алмауын раҫлай. Ә бит ҡайҙа закон көскә эйә түгел, унда көс "законға" әйләнә башлай. Бына шундай ваҡыттарҙа ғәҙеллек юллап, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына мөрәжәғәт итергә була ул, тик бының ниндәйҙер һөҙөмтәһе булырына шәхсән үҙемдең ышанысым бик самалы. Беҙгә, рәсәйҙәргә, барып әләгеү һәм аралаша алыу мөмкинлеге бик һирәк тәтей торған Европа суды менән дә хатта сағыштыра алмаҫ инем мин уны. БМО-ның Халыҡ-ара судына ла, Европа судына ла бер үк ваҡытта мөрәжәғәт итеү иһә тыйыла. Ҡулға алыуҙар буйынса БМО-ның эшсе комиссияһы бар барлығын, тик унда билдәле бер хоҡуҡ боҙоу осрағына ялыу яҙыу өсөн аныҡ ҡына нигеҙләмә табырға кәрәк. Минең ундай нигеҙләмәм бар ине. Бер ниндәй суд ҡарары булмайынса тороп, өҫтәүенә, тикшереүҙәр туҡтатылһа ла, улымды СИЗО-ға ултыртып ҡуйҙылар. Бындай һәм башҡа шундай "ваҡ-төйәк" иҫәпләнгән тупаҫ закон боҙоуҙарға ҡарата Рәсәй суды, ғәҙәттә, иғтибар ҙа итмәй, шулай күнеккәндәр. Мин ялыу артынан ялыу һәм һәр төрлө юллауҙар яҙып ҡараһам да, бер ни ҙә эшләй алманым. Әле, шөкөр, улымды аҡланылар, бының өсөн тотош дүрт йыл китте. Ә бит наркополицейскийҙар тарафынан "әүәләнгән" материалдарҙан "аҡҡа ҡара ептәр менән" ҡоршап, енәйәт эше ҡуҙғатырға маташыуҙары тәүҙән үк күренеп тора ине. Улымдың ғәйепһеҙлеген иҫбатлаған факттар ғына ла тиҫтәләгән булды. Уларҙың күбеһе матбуғатта ла баҫылып сыҡты. Ләкин Тикшереү комитетынан мин үҙем яҙған ялыуҙарға бер генә яуап та ала алманым. Улар кемгәлер яуап яҙып ултырыуҙы дәрәжәләрен түбәнһетеү, тип аңлай, күрәһең. Хатта судтан һуң, унда мин улымдың ғәйепһеҙ булыуын һәм "енәйәт" материалдарының юҡтан бар яһалыуын иҫбат иткәндән һуң да, өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙеләр. Тормошобоҙҙа бына шундай осраҡтар бик күп, шуның өсөн бар көсөгөҙҙө дәлилдәр һәм факттар туплауға йүнәлтеп, үҙегеҙҙең хаҡлы икәнегеҙгә ышанған хәлдә ҡыйыу рәүештә БМО-ға мөрәжәғәт итә алаһығыҙ, тип уйлайым, тик мин үҙ көсөмә генә ышандым һәм унда мөрәжәғәт итмәһәм дә еңеп сыҡтым.

***Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА, хеҙмәт ветераны, Мәләүез ҡалаһы:*** Белеүемсә, БМО-ға милли мәсьәләләр буйынса ла мөрәжәғәт итәләр. Шөкөр, минең башҡорттарым республикабыҙ дәүләтселегенә нигеҙ һалыусы төп халыҡ булараҡ, "милли аҙсылыҡ" тип иҫәпләнгән халыҡтар һанына инмәй, шулай ҙа, туған тел яҙмышы ҡыл өҫтөндә, тигән ҡурҡыныс тыуа ҡалһа, тьфү-тьфү, был ойошмаға мөрәжәғәт итер инем. Теле онотторолған халыҡ - ул, үҙегеҙ беләһегеҙ, милләт булыуҙан туҡтай. Милләттәр Ойошмаһы - ул бит дәүләттәр берлеге генә түгел, ә ана шул дәүләттәрҙе бар итеүсе күп һанлы милләттәрҙең ойошмаһы ла, тип аңлайым. Шуға күрә лә унда ағза булып торған һәр дәүләт эсендәге күп милләтле халыҡтар мәнфәғәте лә ошо БМО-ның иғтибар үҙәгендә тотолалыр, моғайын. Һәр бер милләттең генә түгел, ә милли аҙсылыҡты тәшкил иткән этник төркөмдәрҙе лә ҡурсып, һаҡлап ҡалыу өсөн ниҙәр эшләнә икән БМО-ла? Минең уларға ошо мәсьәлә буйынса мөрәжәғәт иткем килә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

"КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫЙБЫҘ...

# БҮЛӘКЛӘП ТӘ ТОРАЛАР...



**"Киске Өфө" гәзитен бик күптән яратып уҡыйбыҙ. Был гәзитте ҡулға алыу менән уның фәһемле, бай йөкмәткеле булыуы күҙгә ташлана. Төрлө һөнәр кешеләре, йәштәр ҙә, ололар ҙа ҡыҙыҡһынып уҡый уны.**

Гәзиттә ҡала кешеһенә кәрәкле бик күп мәғлүмәт бирелә, ауыл кешеһе өсөн дә файҙалы ул. Шәхсән миңә ҡыҫҡаса итеп бирелгән яңылыҡтар, аналитик мәҡәләләр, башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәттәре һәм йолалары нигеҙендә үткәрелгән мәҙәни саралар, конкурстар тураһында мәҡәләләр, милли байрамдарҙың нисек уҙғарылыуы хаҡында уҡыуы оҡшай.

"Киске Өфө"лә рубрикалар күп, улар һәр кемдең күңеленә яҡын темаларға ҡағылышлы мәҡәләләр уҡырға мөмкинлек бирә. Гәзит-журналдар халыҡҡа ил-йорт хәбәрҙәре тураһында мәғлүмәт еткереүҙән тыш, уларҙың айышына төшөнөргә ярҙам итеүсе сығанаҡтар. Бөгөн бөтә киң мәғлүмәт саралары аша төрлө хәбәр ишетеп, аптырашта ҡалабыҙ, үҙебеҙҙең гәзиттә илдәге шул хәл-ваҡиғалар, сәйәсәт, иҡтисад тураһында ах та вах итмәй генә аңлатып яҙылған фекерҙәр баҫылыуын теләр инем. Шуға күрә, был рубриканы уҡымайым, әммә үҙебеҙҙең ерлектән сыҡҡан кәңәштәр баҫылһа, ҡыҙыҡһыныр инем. Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, бүләк тә отҡаныбыҙ бар. Гәзит уҡыусыларын ҡыуандырып, сәмләндереп, шулай төрлө конкурстар үткәреп тороу бик яҡшы күренеш. Ғаиләбеҙ менән яратып уҡыған гәзитебеҙҙең редакция коллективына яңы ижади үрҙәр теләйем.

**Нәфис АҠҠОЛОВ, пенсионер.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2017 йылда Башҡортостанда театр, музыка, хореография, һынлы сәнғәт һәм кинематография өлкәһендә лайыҡлы тип табылған ижади проекттар йәнә республика Башлығының 90 миллион һумлыҡ грантына эйә буласаҡ. 2013 йылдан башлап Башҡортостандың ижади коллективтарына конкурс нигеҙендә 16 грант тапшырыла. Шуларҙың ике гранты - 13,5, бишәүһе - 9, икәүһе - 4,5, өсәүһе - 1,8 миллион һәм дүртәүһе 900 меңешәр һум тәшкил итә. Грантҡа театр, музыка, бейеү, һынлы сәнғәт һәм кинематография өлкәләрендә әүҙем эшмәкәрлек алып барған ижади коллективтар дәғүә итә ала. Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаризаларҙы 1 ноябрҙән 25-нә тиклем Мәҙәниәт министрлығының профессиональ сәнғәт, мәғариф һәм ижади проекттар бүлегенә ебәрергә кәрәк.

✓Ташкентта Башҡорт мәҙәниәте көндәре тамамлана. Тантаналар барышында Башҡортостан делегацияһы "Үзбәкстан - Рәсәй" берекмәһе ағзалары менән аралашты. Осрашыуҙа артабанғы хеҙмәттәшлек мәсьәләләре һәм "Үзбәкстан - Башҡортостан" дуҫлыҡ ойошмаһын булдырыу мөмкинлектәре тикшерелде.Бынан тыш, республика вәкилдәре Үзбәкстандағы Башҡорт ҡоролтайы башҡарма комитетының киңәйтелгән ултырышын үткәрҙе һәм урындағы йәштәр менән осрашты. Тантана сиктәрендә башҡорт мәҙәниәте фестивале уҙҙы. Стәрлетамаҡ театр-концерт берләшмәһе артистарының сығышы концерттың биҙәге булды.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында даими нигеҙҙә эшләгән депутаттар һанын кәметергә тәҡдим ителде. Ошондай депутаттарҙың һанын 19 кешегә тиклем кәметеүҙе күҙ уңында тотҡан үҙгәрештәрҙе "Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай тураһында"ғы Закондың 1-се статьяһына индерергә тәҡдим ителгән. Әлеге ваҡытта Дәүләт Йыйылышы Рәйесе, уның урынбаҫарҙары, комитет етәкселәре һәм уларҙың урынбаҫарҙары даими нигеҙҙә эшләй.

✓Рәсәй Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығы 2020 йылға тиклем әсәлек капиталын индексациялауҙы туҡтатыу тураһында закон проектын әҙерләне. Әлеге ваҡытта әсәлек капиталының күләме 453 026 һум тәшкил итә. Әсәлек капиталы программаһы 2007 йылдан ғәмәлгә инде. Бынан алда Рәсәй Хөкүмәте 2017 йылда икенсе балалары тыуған ғаиләләргә әсәлек капиталы күләмен арттырмау тураһында иғлан итте.

✔ *Ә айыҡ аҡыл менәнерәк уйлап ҡараһаң, милли баҫмалар бер төбәктә лә, бер ниндәй сәбәптәр менән дә ябылырға, бөтөрөлөргә, быуылырға тейеш түгел! Сөнки баҫма матбуғат әсә телебеҙҙе йәшәтеп килеүсе сараларҙың иң мөһиме.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# БАҪМА МАТБУҒАТҠА...

## күрсөк ҡағылырға тейешме ни?

**Гәзиттәрҙең донъяға бар булыуы һәм үҫеше туранан-тура цивилизация менән бәйле икәнен тарихтан яҡшы беләбеҙ. Тәү башлап ташҡа, балауыҙ менән ҡапланған ағас таҡтаға, папирусҡа, туҙға, тирегә, металға һәм, ниһайәт, шулай итеп, ҡағыҙға яҙыла башлаған кешелек тарихын һөйләүсе йылъяҙма ул баҫма нәшриәт.**

XVI быуатта Италияла баҫылып сыҡҡан тәүге ҡағыҙ гәзиттең атамаһы итальяндарҙың ваҡ монетаһы - *gazette* һүҙен аңлата, тиҙәр. Тимәк, тыуған көнөнән алып гәзит аҡсаға бәйле, сөнки нәшриәтселәр өсөн ул иң элек - һатыла торған тауар, ә ҡулланыусы уны һүҙ, мәғлүмәт, яңылыҡ рәүешендә, йәғни рухи ҡиммәттәрҙең береһе булараҡ ҡабул итеп өйрәнгән. Гәзиттең ҡиммәте, айырыуса унын тыуған телдәрҙә рәсми йәшәтеүсе һәм, кемдер әйтмешләй, милләттең йҙ-йҙе менән аралашыу, фекерләшеү сараһы булараҡ әһәмиәте төрлө милләт халыҡтары тормошонда мөһим урын тотоуы барыбыҙға ла мәғлүм ки. Тап бына шуға күрә лә бөгөнгө көндә баҫма матбуғаттың көрсөккә дусар ителеүен аҡыл аңлаһа ла, күңел ҡабул итә алмай. Гәзиттәр яҙмышы цивилизация, йәғни кешелек мәҙәниәте үҫешенә бәйле үҙгәрештәр кисерә, тигәйнек бая ғына. Быуаттар һүҙымындағы тарихҡа эйә яҙма матбуғатты бөгөн килеп әлеге шул уҡ цивилизация юҡҡа сығарыу, йотоу хәүефе менән янай түгелме? Бер яҡтан, уға интернет һәм шуның әҙемтәһе булған медиакоммуникация монополияһы һөжүм итһә, икенсе яҡтан, Рәсәй баҙарындағы оҙайлы көрсөк касафаты боғаҙҙан ала. Рәсәй Баҫма матбуғат, китап нәшриәте һәм полиграфия идараларының быйылғы тармаҡ докладында билдәләнеүенсә, һуңғы ике йылда һумдың икеләтә тип әйтерлек осһоҙланыуы баҫма продукция етештереүен киҫкен ҡиммәтләндереүҙе: ҡағыҙға, типография буяуы һәм башҡа төр полиграфия кәрәк-яраҡтарына хаҡтар артты. Ҡағыҙ матбуғат сараларының бөлөүенә килтереүсе өсөнсө сәбәп тә бар. Ул халыҡтың матди хәлененң насарайыуы. Күптән түгелге әүҙем уҡыусыларыбыҙ алдына нисек итеп тамаҡ аҫырау, балаларҙы аяҡҡа баҫтырыу мәсьәләһе торғанда, уларҙа гәзит уҡыу ҡайғыһы ла китеп торалыр, ахыры. Гәзиттең тиражы төшә, халыҡ гәзит уҡымай, тип уларҙы ла ғәйепләп булмай бит инде...



*Әбйәлил районы Яңауыл ауылында гәзитебеҙҙе олоно ла, кесеһе лә уҡый.*

**Гәзитте тауар, бизнес тип кенә ҡараған, ләкин шунан арыны күрмәгән, уның тәрбиәүи, мәғрифәтселек, фекер алышыу һәм туплау сараһы булған ролен һаңға һуҡмаған дәүләт структураларына шул ғына кәрәк тә инде: баҫма матбуғат сараларын бергә ҡуырға, ҡайһыларын - ябырға, тарарға тигән фарман тормошҡа ашырыла ла башланы.**

Матди көрсөктөң бер мәл рухи көрсөккә килтереп терәйәсәге тураһында әллә ни борсолоусы һиҙелмәй. Ҡайһы бер баҫмалар тулайым онлайн-системаға күсеүҙе хуп күрә. Яңылыҡҡа, прогресҡа ҡаршы килеп булмай - заман шулай ҡуша. Ләкин былдай юлдың милли баҫмалар өсөн ҡулай түгеллеге тураһында әйтеп кителгәйне инде. Өҫтәүенә, интернетта нигеҙҙә балалар, йәштәр һәм урта быуын вәкилдәре (40 йәшкә тиклемгеләр) ултыра. Ә улар унда гәзит уҡып ултыра, тип уйлайһығыҙмы? Бөтөн донъя гәзит ассоциацияһы мәғлүмәттәре буйынса, интернет менән файҙаланыусылар яңылыҡтар менән танышыуға үҙ ваҡыттарының ни бары 1(!) генә процентын сарыф итә икән, ә, белеүегеҙсә, ҡағыҙ гәзит материалдары яңылыҡтарҙан ғына тормай. Шулай булғас, электрон пресса аудиторияһы менән яҙма баҫмалар уҡыусылары араһында ер менән күк араһылай айырма ята икәнен һәр кем аңлайҙыр. Ошо айҡанлы бер тоғро гәзит уҡыусыбыҙҙың:"Гәзитте бит мин уны икмәк ашаған һымаҡ, ике ҡуллап тотоп уҡымаһам, күңелем булмай. Кәрәк икән, кеҫәмә тығып, үҙем менән юлға алам, сират көткәндә лә, поезда йә самолетта ла уҡып барам", - тигәне иҫкә төшә. Ысынлап та, гәзиттең ҡағыҙ форматы йылдар буйы уға өйрәнелгән өсөн генә түгел, бәлки, күреү хәтере һәм уҡыған материалға иғтибарынды туплау йәһәтенән дә уңайлыраҡ һымаҡ, ти күптәр.

Иғтибар туплау, тигәндән, телевидение һәм интернет киңлектәрендә туҡтауһыҙ реклама биреү иғтибарҙы тарҡатып, йәнгә тейһә, хәҙер килеп, гәзиттәрҙең бөлөүендә лә реклама бирмәү төп сәбәптәрҙең береһе итеп ҡуйыла. Юҡ инде, гәзит бизнес эшләү хәстәрҙәренә күмелһә, гәзит уҡыусы менән йөрәктән-йөрәккә бер аралашыр һуң?

**Ошо йәһәттән илдең төп яҙма баҫмалары булған бер нисә гәзиттең баш мөхәррирҙәре РФ Президенты В.В. Путин менән булған осрашыуҙарында киң мәғлүмәт саралары эшмәкәрлеген социаль хеҙмәттәр күрһәтеү тип таныуҙы һәм "Рәсәй почтаһы" предприятиеһына төбәк матбуғат баҫмаларын таратыу һәм уға булышлыҡ итеү маҡсаттарында ҡаралған 4 млрд. һум күләмендәге субсидияны ҡайтарып биреүҙә ярҙам һорап мөрәжәғәт иткәйне.**

Рәсәй баҫма мәғлүмәт сараларына юғары дәүләт кимәлендә ярҙам ҡулы һуҙырға күптән кәрәк ине лә бит... Әйткәндәй, гәзит һәм китаптар нәшер итеү өсөн ҡағыҙға хаҡтарҙы арттырмау хаҡында Президенттың күрһәтмәһе лә бар икән хатта, ләкин, башҡарған эштәре күренмәһә лә, ҡаҙнанан миллиардлап аҡса ҡайырыусы һәр төрлө корпорациялар һәм уғрылыҡҡа "һәләтле" йыл-ғыр чиновниктар бүҫкәртеп торған бюджет ҡытлығын хөкүмәт структуралары ябай халыҡ кеҫәһе һәм уның ихтыяждары иҫәбенә ҡаплауҙан һәм экономиялауҙан ары китә алмай.

Тарих ҡабатланып тора, тиҙәр бит. Заманында, үткән быуаттың 60-сы йылдарында ла шундайыраҡ хәл була матбуғат баҫмалары менән. Юҡ, ул заманда әле ҡағыҙ баҫмаларға цивилизация ҡаҙанышы янамай, ә бына милли телдә сығып килгән гәзиттәр тынғы бирмәй кемгәләр партияның Үҙәк комитетында. Милли гәзиттәрҙе урыҫ теләндәге баҫмаларҙың туранан-тура тәржемәһе (дубляж) итеү хаҡында Мәскәүҙән фарман килеп төшә бер заман. Шул саҡ беҙҙең ил ағалары - ул саҡ улар йәш кенә булһалар ҙа шундай ҡыйыу аҙымға йөрьәт иткәндәр бит - ғәҙел һәм тура һүҙле илһөйәрҙәр, талантлы яҙыусы һәм журналистар Рәшит Шәкүр (ул саҡ студент әле), "Совет Башҡортостаны" гәзитендә эшләп йөрөүсе Рәми Ғарипов, Рамаҙан Ҡотошов, Юныс Әхмәҙиев, Фуат Биишев, Венер Йәнбирҙин һәм башҡалар, шулай уҡ Яҙыусылар союзы идараһынан вәкилдәр, былдай ҡарар менән риза-һыҙлыҡтарын белдереп, өлкә комитет алдында йыйылалар. Өлкә комитеттың беренсе секретары ла аҡыллы һәм абруйлы шәхес булған бит. Башҡорт интеллигенцияһы вәкилдәренең былдай "баш китерлек" аҙымдары өсөн бер кем дә эҙәрлекләнмәй, киреһенсә, беренсе секретарь Зыя Нуриев Мәскәү менән һөйләшкәндән һуң, мәсьәлә ыңғай хәл ителә. Бына шулай итеп, башҡорт теләндәге генә түгел, ә татар телле гәзиттәрҙең дә үҙаллылығын яҡлап алып ҡала аҫыл егеттәр.

Тап шундай уҡ хәл тип әйтеп булмаһа ла, бөгөн дә бит милли гәзиттәргә бөтөү ҡурҡынысы янай. Был "тирмән"гә милләттәштәребеҙ ҙә "һыу ҡоя", сөнки гәзит-журнал тираждары йылдан-йыл кәмей. Ярты йылға ни бары 500 һум торған "Киске Өфө"нө лә хатта, шулай уҡ үҙ теләндәге башҡа баҫмаларҙы ла алдырып уҡырға теләмәй халыҡ. Иң аңлылар, иң тәрбиәләләр - ысын телһөйәрҙәр генә тоғро ҡала килә милләтебеҙ рухына. Ә кемдәргәләр тап ошо ғына кәрәк тә! Тираждар кәмеүен һылтау итеп алып, гәзит-журналдарҙан бөтөнләй ҡотолоу йайын ҡарайҙар бөгөн.

**Ә айыҡ аҡыл менәнерәк уйлап ҡараһаң, милли баҫмалар бер төбәктә лә, бер ниндәй сәбәптәр менән дә ябылырға, бөтөрөлөргә, быуылырға тейеш түгел! Сөнки баҫма матбуғат әсә телебеҙҙе йәшәтеп килеүсе сараларҙың иң мөһиме.**

Иң мөһиме тип, әлбиттә, ғаиләлә балаларың менән үҙ телеңдә аралашыу, мәктәптә әсә телен ҡаҡҡыламай-һыҡҡыламай ғына уҡытыу бурысын әйтергә кәрәк тә бит, ләкин үҙегеҙ шаһит: быларҙың береһе лә һаңға һуғылмай. Ни гәзиттәребеҙҙе күркәктәрен ҡуйып яҡларлыҡ әлегеләй янып торған егеттәребеҙ ҙә күренмәй, исмаһам. Ҡайҙа бара һуң бөгөн был милләт балалары?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Өфөнөң Эшҡыуарҙар берлеге (адресы: СССР-ҙың 50 йыллығы исемендәге урам, 48/1) ноябрҙә кесе һәм урта бизнес вәкилдәре өсөн түләүһеҙ уҡыуҙар ойоштора. Белешмәләр һәм теркәлеү өсөн мөрәжәғәт итергә: (347) 241-47-44 или e-mail: souz@ufamail.ru.

✔Баш ҡалала тағы ла бер күңел асыу комплексы төҙөргә ниәтләйҙәр. Өфөнөң ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре идаралығы ҡунаҡханаһы һәм рестораны булған күп функциялы күңел асыу объектын проектлау һәм төҙөү өсөн участканы ҡуртымға алыу хоҡуғына аукцион иғлан итте. Аукцион 14 ноябрҙә була. Майҙаны 7916 квадрат метрлыҡ ер участкаһы Киров районында, Элеватор урамындағы 7-се йорт янында урынлашҡан. Йыллыҡ ҡуртым түләүенең башланғыс хаҡы - 2 119 500 һум. Ҡуртым ваҡыты 10 йыл тәшкил итә.

✔Махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылы тип иғлан ителгән 2017 йылда Башҡортостандың һәр тәбиғәт паркында күләмле проекттар тормошҡа ашырыласаҡ. Ошо хаҡта төбәктең тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры урынбаҫары Илдус Яхин белдерҙе. Уның әйтеүенсә, киләһе йыл "республиканың тәбиғәт экосистемалары менән идара итеү буйынса яңы алымдарҙы ғәмәлгә ашырыу йылы" булмаҡсы.

✔Росреестрҙың Башҡортостан буйынса идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, "Физик берәмектәрҙең банкротлығы тураһында" федераль закон үҙ көсөнә ингәндән һуң, республиканың арбитраж судына халыҡтан үҙҙәрен банкрот тип таныу тураһында 1109 ғариза килгән, шуларҙың 831-е - ағымдағы йылда. Банкрот хәлендә ҡалған 569 кешегә уларҙың мөлкәтен һатыу процедураһы тәғәйенләнгән, һәм 44 осраҡта ғына бурысты реструктуризациялау тураһында ҡарар сығарылған.

✔Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостанда Яңы йылды байрам итеү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы.Уҡыу алдынғылары, спорт ярыштарында енеүселәр, ижади бәйге лауреаттары, һәләк булған хәрбиҙәрҙең, шулай уҡ күп балалы ғаиләләрҙең балалары өсөн Яңы йыл шыршыһы 22 декабрҙә үткәрелә. Документтан күренеүенсә, байрам ҡунаҡтарына Яңы йыл бүләктәре тапшырыла, улар өсөн "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында өс көнлөк ял ойоштороla.

**"Башинформ"дан.**

✓ *"Йәмғиәт яҡшы эшләүселәрҙе күрергә һәм ошонан сығып һығымта яһарға тейеш. Тырыш хеҙмәт өсөн яҡшы бүләктәр бирергә кәрәк", - тип билдәләне шул саҡта республика Башлығы.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БҮЛӘК - БАСЫУ БАТЫРЫНА

**Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығы уңыш йыйыу осоронда механизаторҙар араһында үткәрелгән конкурсҡа йомғаҡ яһаны. 3 ноябрҙә Өфөлә еңеүселәргә автомобилдәр тапшырылды.**

Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов аграрийҙар араһында конкурс үткәрергә "Басыу көнө-2016" республика семинар-кәңәшмәһендә тәҡдим иткәйне. "Йәмғиәт яҡшы эшләүселәрҙе күрергә һәм ошонан сығып һығымта яһарға тейеш. Тырыш хеҙмәт өсөн яҡшы бүләктәр бирергә кәрәк", - тип билдәләне шул саҡта республика Башлығы. Төрлө номинацияларҙа конкурс еңеүселәре иҫәбендә - 10 кеше. Улар араһында Баймаҡ районынан Зәки Ҡотлоғужин, Хәйбулланан Виктор Попов, Саҡмағоштан Самат Рухылбаянов, Ауырғазынан Ринат Мәғәҙонов, Стәрлетамаҡтан Ирек Ниғмәтуллин, Дүртөйләнән Динар Хамматов, Илештән Булат Миннуллин, Шишмәнән Алик Бикбулатов, Дәүләкәндән Александр Капустин һәм Бәкалынан Николай Хәбиров бар.

## ШАКИРОВ ДӘҮЕРЕН ХӘТЕРЛӘП...

**Өфөлә дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Миҙхәт Шакировтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған тантаналы йыйылыш үтте.**

- Бөгөнгө ҡеүәтле иҡтисад, мәғариф, фән һәм мәҙәниәттең нигеҙе Зыя Нуриев, Зәкәриә Аҡназаров, Миҙхәт Шакиров кеүек дәүләт эшмәкәрҙәре эшләгән йылдарға тура килә, - тине үҙенең сығышында Рөстәм Зәки улы. - Беҙ бөгөн бөтөнләй икенсе заманда - баҙар мөнәсәбәттәренә ҡоролған башҡа иҡтисади ысынбарлыҡта йәшәйбеҙ. Өлкән быуындың күпселек өлөшө бөгөнгө үҙгәрештәрҙе ҡабул итеп тә бөтмәй. Улар көнделәре, генетик хәтере менән үткәндә, үҙҙәре үҫкән илдә ҡала. Бөгөн бөтөн кеше лә уңышлы була алмай. Шуға ла социаль мәсьәләләрҙе хәл итеү, тигеҙһеҙлектәрҙе йәйлап ебәреү өсөн дәүләттең роле үҫә. Шуға ла дәүләт социаль йүнәлештә күберәк эшләргә, халыҡ яҡшы йәшәһен өсөн шарттар тыуҙырырға тейеш.

## БАШҠОРТ БАЛЫ ТАНТАНАҺЫ

**Төркиәнең Мугла провинцияһында V Халыҡ-ара умартасылыҡ һәм ҡарағай балы конгресы булды, уның эшендә Башҡортостан делегацияһы ла ҡатнашты.**

Делегация составында республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Илшат Тажетдинов, Башҡортостан министры Руслан Мирсаяпов, Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге етәксеһе Әмир Ишемғолов бар. Илебеҙ исеменән Рәсәй умартасыларының милли союзы президенты Арнольд Бутов ҡатнашты. Ошо ҙур форум барышында 2021 йылда "Апимондия" халыҡ-ара умартасылыҡ ассоциациялары федерацияһы конгресын үткәреү хоҡуғына кандидат булған Башҡортостан менән таныштыры сараһы уҙҙы. 2021 йылда баш ҡалала "Апимондия" халыҡ-ара конгресын һәм "АпиЭКСПО" халыҡ-ара күргәҙмәһен уҙғарыуға логотип раҫланған да инде.

ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА - ЙӨҘ ОБЪЕКТ

# БАШҠОРТ АТЫН ҺӘМ...

## ҡурайын онотмайыҡ!



Халҡыбыҙ борон-борондан ат йәнле булған, ат уның торғо юлдашы ла, яуҙашы ла, алыштырғыһыҙ дуҫы ла. 1812 йылда башҡорт атлы полктары хатта Парижға ингән, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙары танкыларға ҡаршы һыбай сапҡан. Бөгөн башҡорт ҡымыҙы, ҡаҙыһы донъя кимәлендә бренд булырлыҡ продукттар.

Шулай уҡ донъя сәхнәләрен шаулатҡан, бөгөн хатта рок башҡарыусыларҙың ғына түгел, донъя халҡының иғтибарын яулаған, башҡа музыка ҡоралдарынан айырмалы, Йыһан менән бәйләнештә торған һәм донъяла аналогы булмаған милли музыка ҡоралы - ҡурайыбыҙ бар. Әммә ошо ике брендҡа һаман да мөһәбәт һәйкәл юҡ. Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына 100 объект төҙөү тураһында һүҙ йөрөткәндә, ошо хаҡта ла онотмаһаҡ ине.

Шулай уҡ Ҙур һәм Бәләкәй залдары, кафеһы булған, йәғни тамашасы өсөн уңайлы шарттар тыуҙырылған, кеше ысын мәғәнәһендә ял итеү, сәнғәт менән танышыу мөмкинлеге булған зауыҡлы Кино йорто булыуын теләр инем. Унда Башҡортостан кинематографияһына бағышланған ыҡсым ғына музей ҙа урын алыуы ихтимал. Сөнки Башҡортостан кинематографияһының да, Башҡорт киноһының да халыҡҡа күрһәтерлек тарихы ла, шәхестәре лә бар.

**Вилүрә ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА, "Башҡортостан" киностудияһы режиссеры.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БЫЛ КОНКУРС...

## шәхес тәрбиәләй



**Баш ҡаланың М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында сираттағы "Мостай уҡыуҙары" әҙәби-ижади конкурсына йомғаҡ яһалды. Башҡорт халыҡ шағиры иҫтәлегенә арналған был республика конкурсын гимназия Өфө ҡала округы хакимиәте Мәғариф идаралығы, Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхана, М. Кәрим һәм "Аманат" фондтары менән берлектә ойошторған.**

"Мостай уҡыуҙары" әҙәби-ижади конкурсы 2008 йылдан алып үҙкәрелә. Йылдан-йыл уның йөкмәткеһе байый, ҡатнашыусылар даирәһе киңәйә бара. Быйыл ойоштороусылар бик ҡыҙыҡлы дүрт номинация булдырған: М. Кәримдең тормош юлы һәм ижадына бағышланған видеодәрестәр һәм "Өфө - минең яратҡан ҡалам" видеороликтары, "Әҙәби Рәсәй" фотоконкурсы, М. Кәримдең "Европа-Азия" циклы буйынса ижади конкурстар. Унда 140 уҡыусы, 10 уҡытыусы, юғары һәм һөнәри белем биреү учреждениеларынан 8 студент үҙ эштәрен тәҡдим иткән.

"Мостай уҡыуҙары"на йомғаҡ яһау кисәһендә Өфө ҡала округы хакимиәте Мәғариф идаралығынан Розалия Сафиуллина, Алһыу Йософова, Ш. Бабич исемендәге премия лауреаты Лариса Абдуллина, БР Яҙыусылар Союзы ағзаһы Камил Йыһаншин, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетынан Рәйсә Ҡуҙбәкова еңеүселәрҙе тәбрикләне. Улар бында йыйылған һәр кемден күңелендә Мостай Кәрим ижады аша тыуған иленә, теленә, халҡына ҡарата һөйөү тәрбиәләнеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Гимназия уҡыусылары үҙ һәүбәтендә тос йөкмәткеле, бай рухлы концерт ҡуйҙы.

Әйткәндәй, "Өфө - минең яратҡан ҡалам" видеороликтар конкурсында Өфө ҡалаһы 27-се мәктәп уҡыусыһы Никита Никитин, 86-сы гимназия уҡыусылары Дарья Талипова, Анастасия Чернова, Ирина Шакирова, Бөрйән районы Аҫҡар ауылы урта мәктәбе уҡытыусыһы Гөлнур Әйүпова беренсе урын яуланы. "Европа-Азия" циклы буйынса ижади эштәрҙә Ишембай ҡалаһынан Рәзил Байрамғәлин, Әлиә Шиһапова, Өфө ҡалаһы 29-сы мәктәп уҡыусыһы Станислав Иванов, Өфө автотранспорт колледжынан Юлдаш Хисмәтуллин еңеүсе тип табылды. "Әҙәби Рәсәй" фотолар конкурсында 5-11 синыф уҡыусылары араһында Өфө ҡалаһының "Биктырыш" Балалар техник ижады үҙәге уҡыусыһы Эрика Дусеева беренсе урынға сыҡты. Ә бына М. Кәрим ижады һәм тормош юлына бағышланған видеодәрестәр үткәреүселәрҙең конкурс эштәре буйынса Өфө ҡалаһының 40-сы мәктәбе уҡытыусыһы Фәниә Таһирова иң юғары баһаға лайыҡ булды.

"Мостай уҡыуҙары" конкурсының һөҙөмтәләре менән танышҡан арала уның әһәмиәте тураһында М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы директоры Гөлназ Әхмәҙиева менән һөйләштек.

- Мостай Кәрим беҙҙең гимназиялағы уҡытыу-тәрбиә эшендә символик шәхес, тип ҡарайым мин. Сөнки ул үҙе бик уңышлы кеше, хәҙерге көндә лә ул маяҡ. Бәләкәй генә ауылдан сыҡҡан малай үҙенең тормошон шундай бейеклектәргә күтәрә алған икән, тимәк, һинең дә ҡулыңдан килә, тип өйрәтәбеҙ балаларға. "Мостай уҡыуҙары" сараһы ла ошо тәрбиәүи маҡсаттан булдырылғайны, хәҙер гимназияның тормошон йәмләндергән бер күркәм күренешкә әйләнде, - тине Гөлназ Ғафир ҡыҙы.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Мостай уҡыуҙары" әҙәби-ижади конкурсын йомғаҡлау тантанаһы барышында 158-се гимназия уҡыусылары йыл да тапшырыла торған М. Кәрим исемендәге премия был юлы 11-се синыф уҡыусыһы Элина Вәлмөхәмәтоваға бирелде. Талантлы, тик "бишле" билдәләренә генә өлгәшкән ҡыҙ тиҫтерҙәренә өлгө булырҙай уҡыусы. Ул, М. Кәримдең әҫәрҙәрен нисә йәштә уҡыһаң да, үҙеңә фәһемле фекерҙәр табаһың, ти. Быйылғы "Мостай уҡыуҙары"нда ҡатнашыусыларҙың йәш төрлөләгә лә ошоға бәйле булғандыр. Был конкурстан һәр кем үҙенә илһам, аҡыл, тәжрибә, рухи көс туплап ҡайтты.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Белорет, Нефтекама, Учалы һәм Благовещен Моноҡалаларҙы үҫтереү фонды ҡатнашлығында инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу мөмкин булған ҡалалар исемлегенә индерелгән. Башҡортостандың Күмертау һәм Бәләбәй ҡалаларында тиҙ үҫешеүсе биләмәләр булдырыу буйынса ыңғай тәжрибә бар. Әлеге ҡалаларҙың идара итеү командалары үҙҙәренең проектын уңышлы яҡлаған. Хәҙер уларға тиҙ социаль-иҡтисади үҫешеүсе биләмә статусын биреү тураһында Рәсәй Хөкүмәте ҡарары әҙерләнә.

✓ Республикала нигеҙҙә сифатлы ит һәм ит продукцияһы һатыла. Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, өсөнсө кварталда 1525 ит һәм ит продукцияһы өлгөһө тикшерелгән. Шуларҙың 3,2 проценты гигиена нормаларына яуап бирмәгән. Физик-химик күрһәткестәр буйынса 602 өлгө алынған, 6,5 проценты талаптарға тап килмәгән. Квартал дауамында инспекторҙар 498 килограмлыҡ насар сифатлы продукцияның 153 партияһын һатыуҙан алған.

✓ Фотоһәүәҫкәрҙәр һәм теләге булған һәр кем "Ирәмәл 2016" фотоконкурсында ҡатнаша ала. Ойоштороусылар - "Турист күҙҙәре менән" һәм "Йәнле тәбиғәт" телеканалдары ярҙамында "Роза ветров" турфирмаһы. Фотоһүрәттәр 20 ноябргә тиклем konkurs@rozavetrov.ru электрон почтаһы буйынса ҡабул ителә. Конкурс тураһында тулыраҡ мәғлүмәт - www.konkurs.rozavetrov.ru сайтында.

✓ Ағымдағы йылдың ғинуар-сентябрь айҙары йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда уртаса айлыҡ эш хаҡы 27 мең һумдан артты. Ғинуар-август менән сағыштырғанда үҫеш 6,9 процент тәшкил итте. Шуның менән бергә халыҡтың аҡсалата килеме - 97,2 процент. Республика Хөкүмәтендәге ултырышта Башҡортостандың иҡтисади үҫеш министры Сергей Новиков шундай мәғлүмәттәр килтерҙе. Төбәктә теркәлгән эшһеҙлек кимәле 1,11 процентҡа тиклем кәмене.

✓ Рәсәйҙә Экология йылының рәсми эмблемаһы раҫланды. Эмблеманы Рәсәйҙең Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы заказы буйынса Stellar агентлығы әҙерләгән. Ведомство башлығы Сергей Донской әйтеүенсә, 2017 йыл Экология һәм махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылы тип иғлан ителде. Шуға күрә эмблема тәбиғәт объекттарының байлығын, үҙенсәлеген, шулай уҡ илдә тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса тырышлыҡты сағылдыра.

✓ *Кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға төбәк компонентының әһәмиәтен, уның тәрбиәүи, баланың аң-белемен үҫтереү йәһәтенән ҙур роль уйнауын күрһәтергә тырышты ла инде республика.*



МӘҒАРИФ УСАҒЫ

# ТӘЖРИБӘ УРТАҠЛАШТЫҠ ҺӘМ...

## башҡалар тәжрибәһен дә ҡолаҡҡа элдек булһын



**Ошо көндәрҙә Өфөлә Рәсәйҙең 76 төбәгенән килгән мәғариф өлкәһе вәкилдәре ҡатнашлығында "Дөйөм белем биреүҙең Федераль дәүләт стандарттарын тормошҡа ашырыу: этно-мәҙәни һәм милли үҙенсәлектәрҙе күҙ уңында тотоп идара итеү" темаһына арналған Бөтә Рәсәй кәңәшмәһе уҙғарылды.**

Бөгөн мәктәп балаға белем биреп кенә ҡалмай, уның шәхесен үҫтерергә лә бурыслы. Шуға ла белем усаҡтарында тәрбиә стандарттарына мохтажлыҡ бар. Әлеге көндә был мәсьәлә буйынса 2025 йылға тиклем бойомға ашырылырға тейешле федераль стратегия ҡабул ителгән. Шуға ярашлы, үҙ эсенә рухи, хеҙмәт һәм гражданлыҡ тәрбиәһен алған уҡытыу программалары төҙөргә кәрәк. Был мәсьәләнең республикабыҙ өсөн артыҡ яңылығы ла юҡ кеүек. Ләкин быға тиклем һәр мәктәп үҙе белеп эшләгән эште системаға һалыу, теүәл бер тәртипкә килтереү талап ителә барыбер ҙә. Әлеге кәңәшмәлә ҡатнашыусылар Өфөнөң 39-сы гимназияһында махсус ойошторолған тәжрибә уртаҡлашыу майҙансыҡтарында Башҡортостанда был йүнәлештә өлгө алырлыҡ миҫалдар барлығына инанды. Мәҫәлән, Бөрйән районында алты мәктәптә уҡыусылар умартасылыҡ серҙәренә өйрәнә. Шулай уҡ милли уйын ҡоралдары, бейеү, шәжәрә төҙөү буйынса эшләп килгән түңәрәктәр республика мәғариф системаһында балалар тәрбиәһенә ҡағылышлы ыңғай тәжрибә тупланыуына ишараланы.

39-сы гимназиялағы милли мәғарифҡа бағышланған майҙансыҡта Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән килеүсе мәғариф белгестәренә Башҡортостанда һәр халыҡ вәкиленә үҙ телен тәрәндән өйрәнеү форсаты тыуҙырылыуы, рус һәм башҡорт теле туған тел булараҡ та, дәүләт теле булараҡ та уҡытылыуы, татар, удмурт, мари, сыуаш телдәрен дә туған тел булараҡ уҡыу мөмкинлеге бирелеүе, ҡалған телдәрҙе йәкшәмбе мәктәптәрендә өйрәнеүҙәре тураһында һөйләнеләр.

- Бөтә Рәсәй кәңәшмәһендә туған телдәргә ҡағылышлы айырым секция эшләмәһә лә, һәр майҙансыҡта республиканың төбәк компоненты тураһында һүҙ булды, - тине Өфө ҡала хакимиәте Мәғариф идаралығының әйҙәүсе белгесе Розалия Сафиуллина. - 39-сы гимназияла милли мәғарифҡа арналған майҙансыҡта республикала уҡытылған бөтә телдәр буйынса ҡаҙаныштарҙы сағылдырҙыҡ. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар беҙҙең уҡыусыларҙың кәмендә өс тел белеүенә, хәҙер ике сит телен уҡытыу ҡаралғас, хатта биш-алты тел белгән балалар булыуына һоҡланыуын белдерҙе.

Кәңәшмәлә тағы ла "Рәсәйҙә рус теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу концепцияһын бойомға ашырыу тураһында", "2016-2020 йылдарҙа мәғрифты үҫтереү маҡсатына йүнәлтелгән федераль программа: 2016 йылда белем биреү технологияларын һәм эстәлеген модернизациялау буйынса саралар", "Уҡытыусы үҫешенең өлгөлө комплекслы моделе ярҙамында белем биреүҙең сифатын күтәреү проблемалары һәм перспективалары" темалары буйынса эксперт майҙансыҡтары эшләне. Шулай уҡ 3-сө гимназияла рус һәм немец телдәрен уҡытыу буйынса фекер алышыу ойошторолдо. Айырым предметтар тәрәндән өйрәнелгән 45-се мәктәптә математика буйынса белем биреү концепцияһына ярашлы тәжрибә күрһәтелде. М.С. Пинский исемендәге 83-сө инженерҙар лицейында Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып Башҡортостан Республикаһы физика уҡытыусылары ассоциацияһын ойоштороусы уҡытыусылар йыйылды һәм һәр предмет уҡытыусыһы эшендә ошондай ойошмалар ниндәй ыңғай һөҙөмтә биреүе тураһында һөйләшеү ойошторҙо. Шулай уҡ "Астрономия" фәнен айырым предмет итеп уҡытыу-уҡытмау мәсьәләһе буйынса ла фекер алышынды.

Мәғариф буйынса Бөтә Рәсәй кәңәшмәһенә йомғаҡ БР Мәғарифты үҫтереү институтында яһалды. Кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға институт эше менән яҡындан танышырға, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған темалар буйынса тәжрибә уртаҡлашырға ла форсат бирелде. Бында төрлө методик ҡулланмалар, әсбаптар әҙерләү, педагогтарҙың һөнәри компетентлығын күтәреүгә арналған күргәҙмәләр ойошторолдо.

- Рәсәйҙең башҡа милли төбәктәрендә ошо үҙенсәлектәрҙе күҙ уңында тотоп нисек эшләүҙәре, уларҙа ниндәй проблемалар күтәрелеүе, беҙҙәге проблемаларға ниндәй ҡарашта булыуҙарын белдек. Бик күп мәсьәләләрҙә беренсе булыуыбыҙ ҡәнәғәтләндерҙе. Мәҫәлән, беҙҙең мәктәптәрҙең һөнәри үҫеш баҫҡыстары булдырылған, тарих предметы буйынса этно-төбәк дәреслеген Федераль исемлеккә индерергә торабыҙ, милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы бар һ.б. Шул рәттән, инженерҙар мәктәбендә уҡытыу процесын нисек төҙөү буйынса үҙебеҙгә файҙалы тәжрибә лә алдыҡ, - тине БР мәғариф министры Гөлназ Шафиҡова кәңәшмә эшенә һығымта яһап.

Шулай итеп, Федераль дәүләт белем биреү стандарттарын тормошҡа ашырыу буйынса кәңәшмә юҡҡа ғына Башҡортостанда үткәрелмәгәндер, тип ышанғы килә. Сөнки киләсәктә милли республикаларҙағы хәлторош нәҡ ошо кәңәшмәнән һуң ҡабул ителгән ҡарарҙар буйынса баһаланып, Стандарттарға кәрәкле үҙгәрештәр индереләсәк. Кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға төбәк компонентының әһәмиәтен, уның тәрбиәүи, баланың аң-белемен үҫтереү йәһәтенән ҙур роль уйнауын күрһәтергә тырышты ла инде республика. Кәңәшмә барышында беҙҙең мәғариф өлкәһендә эшләүсе етәкселәргә лә артабан үҙ тәжрибәһендә ҡулланырлыҡ фәһемле фекерҙәр күп яңғыраны. Улар ҙа ҡолаҡҡа эленер, тип ышанайыҡ.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҠЫҪҠАСА

# БАШ ҠАЛАНЫ...

## велосипедсылар яулай

✓Ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Рәсәйҙең Велосипед спорты федерацияһы генераль директоры Юрий Кучерявый менән осрашты. Юрий Андреевич урындағы велоспорт инфраструктураһын үҫтереү буйынса алып барылған эшмәкәрлекте юғары баһалап: "Өфө республиканың ғына түгел, илдең велосипед спортын үҫтереү буйынса терәк нөктәһе булып тора, тип иҫәпләйбеҙ. Башҡортостандың спорт министры менән республиканың яҫы ҡоролмалар төҙөү буйынса федераль программаға инергә тейешлеге тураһында һөйләштек. Был велотрек төҙөү мөмкинлеген бирер ине", - тип белдерҙе. Бөгөн баш ҡалала, урман паркы зоналарын да иҫәпкә алғанда, барлығы 56 км велоюл бар. Киләсәктә уның дөйөм оҙонлоғон 150 километрға еткереү планлаштырыла.

✓Башҡортостанда Халыҡтар берҙәмлеге көнө айҡанлы төрлө ижтимағи-сәйәси, мәҙәни, спорт саралары үтте. В. И. Лениндың йорт-музейында һәм Һуҡырҙарҙың Бөтә Рәсәй йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһендә күргәҙмә-лекциялар, 4 ноябрҙә "Башҡортостан" Дәүләт концерт залы алдындағы майҙанда митинг-концерт ойошторолдо, шулай уҡ кәсепселек һәм биҙәү-ҡулланма сәнғәте буйынса күргәҙмә-йәрминкә эшләне. Китапханаларҙа һәм музейҙарҙа, мәҙәниәт һарайҙарында һәм мәҙәниәт йорттарында, балалар музыка, сәнғәт мәктәптәрендә төрлө тематик саралар үткәрелде.

✓Мәктәп уҡыусыларының туҡланыуын ойоштороу - дөйөм белем биреү учреждениелары эшмәкәрлегенең мөһим өлөшө булып тора. Бөгөн уҡыусылар һәм уларҙың ата-әсәләре араһында сәләмәт туҡланыу мәҙәниәтен булдырыу, балаларҙы туҡланыу гигиенаһы, дөрөҫ туҡланыу тәртибе, сәләмәт тормош нигеҙҙәрен өйрәтеүгә ныҡлы иғтибар бирелә. Ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов етәкселегендә ҡала хакимиәтендә уҙғарылған кәңәшмә тап ошо мәсьәләгә арналды ла инде.

✓Баш ҡалала "Күсемһеҙ милек баҙары: көрсөктән сығыу" тип аталған төбәк-ара конференция үтте. Унда Мәскәү, Екатеринбург, Төмән, Краснодар, Өфө һәм башҡа ҡалаларҙан эксперттар, төҙөлөш компаниялары етәкселәре, кредит ойошмалары, власть органдары, консалтинг етәкселәре һ.б. ҡатнашты. Эксперттар уңышлы проекттар һәм тәжрибәнән сығып, көрсөк ваҡытында нисек итеп күсемһеҙ милекте һөҙөмтәле һатыу серҙәре менән уртаҡлашты.

✓Башҡорт дәүләт аграр университеты студенттары Барнаул ҡалаһында үткән VIII Бөтә Рәсәй ауыл йәштәре слетында һәм X Бөтә Рәсәй юғары уҡыу йорттарының студент отрядтары слетында иң яҡшылар иҫәбенә инде. 35 төбәктән 400-гә яҡын кеше ҡатнашҡан слетта Башҡорт дәүләт аграр университеты исеменән "Башаҡ" студент отряды хәрәкәте ветераны Рим Әбләев, штаб командиры һәм комиссары Азат Шәрәфетдинов һәм Илмир Мөрсәлимов сығыш яһаны. Быйылғы эш йомғаҡтары буйынса аграр университет "Студент отрядтары эшен ойошторған иң яҡшы юғары уҡыу йорттары" номинацияһында өсөнсө булды. Уҡыу йортоноң "Шәфҡәтле йөрәк" ирекмәндәр отряды "Шефлыҡ ярҙамын ойоштороу" номинацияһында беренсе урын алды. Бынан тыш, Азат Шәрәфетдинов Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы вуздары штабтары араһында "Иң яҡшы штаб командиры" номинацияһында еңеүсе тип танылды.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Керән

❖ Керән һутында эфир майы күп, шуға күрә "бутҡа"ға әйләндерелгән керәнгә лимон ҡушып, ас ҡарынға ярты балғалаҡ эсергә кәрәк. Был эске ағзаларҙы лайланан таҙарта, һейҙекте ҡыуҙыра. Бигерәк тә шешенгән, һары һыу (водянка) менән сирләүселәргә бик килешә. Бының өсөн 150 грамм керәнгә 2-3 лимон һутын һығып ҡушаһың.

## Сәй

❖ Компьютер артында оҙаҡ ултырырға йыйынһаң, алдан уҡ лимонлы сәйеңде әҙерләп ҡуй һәм 2-3 сәғәт һайын эс, ул замана техникаһының зарарынан һаҡлар.

## Инә ҡорт һөтө

❖ Инә ҡорт һөтөн бал йәки алкоголь менән ҡатнаштырып ҡулланыу атеросклероз, ҡан тамырҙарындағы тромбоз, инфаркт алды хәүефе йәки инфаркттан һуң, ҡартлыҡтағы хәлһеҙлектән файҙалы.

❖ 20-30 грамм (бысаҡ осонда) инә ҡорт һөтөн ашарҙан 1-2 сәғәт алда көнөнә 3-4 мәртәбә тел аҫтына һалырға һәм иреп бөткәнсе тоторға.

❖ Инә ҡорт һөтөн - бер өлөш, араҡыны - 20 өлөш итеп ҡушып, ашарҙан 1 сәғәт алда 1 ҡалаҡ ҡайнаған йылы һыуға һалып, көнөнә 3-5 мәртәбә 10-ар тамсы эсергә.

## Теш һыҙлауҙан

❖ Бесәй үләне (валериана лекарственная) йәки ат ҡуҙғалағының япрағын сәйнәгеҙ, һыҙлауҙы тиҙ баҫа.

❖ Һыҙлаған теште тишек булһа, шунда бер бөртөк муйыл йәки хуш еҫле ыҫмала киҫәген ҡуйығыҙ, әммә 2-3 минуттан артыҡ тотмағыҙ, теште боҙа.

❖ Ауыҙығыҙҙы шалфей, меңъяпраҡ, сәй содаһы иретмәһе менән сайҡатығыҙ.

## Он кәбәге

❖ Он кәбәге - дарыу ул. Организмдағы зарарлы матдәләрҙе - токсиндарҙы, ауыр металл тоҙҙарын сығара. B1, B2, PP витаминдарына ла бай. Шуға ла кәбәк ҡушып бешерелгән икмәк ашарға тырышығыҙ. Өҫтәүенә, унда магний, тимер, фосфор ҙа күп.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Тик бына үҙеңде йәлләтергә, меҫкенләнергә ярамай. Үҙеңде сараһыҙҙан бер бисара һымаҡ, ярҙамсыһыҙ, белемһеҙ әбей-бабай итеп түгел, ә үҙ-үҙлеге булған, ихтирамға лайыҡлы, грамоталы кеше итеп күрһәтә белеү кәрәк.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Элек башҡорт халҡында никахҡа инеү бик етди мәсьәлә тип иҫәпләнгән, кәләште 100-150 саҡрымдағы алыҫ ауылдан алырға тырышҡандар. Үҙ ауылынан кәләш алыу ҙа булған, әммә ул икенсе аймаҡтан булырға тейеш булған. Егет менән ҡыҙ араһында кәм тигәндә 7 быуын ара ятыу төп шарт булған. Ир кешегә үҙ туғанының ҡыҙына өйләнеү ҡәтғи рәүештә тыйылған. Өйләнешеүҙә ошо талаптарҙы мотлаҡ үтәүҙең төп маҡсаты - ҡан ҡәрҙәшлегенән ҡотолоу. Шунһыҙ киләсәк быуынға зарарлы булыуы ихтимал, тип иҫәпләгәндәр. Хәҙерге медицина фәне халыҡтың бындай ҡарашын тулыһынса хуплай. Сөнки хатта алыҫ туғанлыҡ булғанда ла никахҡа кереү хәүефле. Зәғиф - аҡылға йәки физик яҡтан камил булмаған бала тыуыуы мөмкин.

Өйләнешеү мәсьәләһен хәл иткәндә егет яғынан да, ҡыҙ яғынан да насар ғөрөф-ғәҙәттәрҙең һәм тыумыштан килгән сирҙәрҙең бармы-юҡмы икәнлеге иҫәпкә алынған. Бындай ауырыуҙар рәтенә быума сире, үпкә туберкулезы, эскелек ингән. Уларҙың булыуы беленә ҡалһа, никахҡа инеүҙән баш тартҡандар. Сөнки боронғолар иҫәпләүенсә, уларҙың сире буласаҡ балаларға күсеүе мөмкин.

Берәй кешелә теге йәки был тәрбиә етешһеҙлеге булып, уларҙан ҡотолорға теләмәй икән, "әсә һөтө менән кермәгәнде, тана һөтө менән кермәй" тигән халыҡ мәҡәлен әйткәндәр. Сөнки башҡорт ғаиләһендә төп тәрбиәсе итеп ҡатын кеше һаналған. Шуға күрәлер, кәләш алғанда иң тәүҙә унының уңғанлығы, аҡыллы, тәрбиәле булыуы иҫәпкә алынған. Ошо сифаттарҙы асыҡлау өсөн ҡыҙҙың әсәһенә иғтибар иткәндәр. Әгәр унда һанап сыҡҡан сифаттар бар икән, тимәк, улар ҡыҙына ла күсә.

Йөклөлөк осоронда йәш ҡатынға гигиеник кәңәштәрҙе кендек инәй, үҙ әсәһе йәки башҡа абруйлы ҡатындар биргән. Йөклө ҡатынға сабыр булырға, психик йәберләүҙән һаҡланырға кәңәш иткәндәр. Юғиһә, тыуасаҡ баланың һаулығы нервы-психик йәһәттән ҡаҡшауы бар тип иҫәпләгәндәр. Буласаҡ әсә тулы ҡиммәтле ризыҡ менән туҡланырға, араҡы эсмәҫкә тейеш булған, уға ауыр нәмә күтәрергә, көсәнеп эшләргә рөхсәт ителмәгән.

Буйға ҡалыу токсикозын булдырмау маҡсатында йөклө ҡатынға йәне теләгән бөтә нәмәне ашарға кәңәш ителгән. Был сара ниндәйҙер кимәлдә зәғиф бала тыуыуҙан һаҡлай тигән фекер ҙә булған.

Түбәндәге йола ла иғтибарға лайыҡ. Һыуһынды баҫыу өсөн йөклө ҡатынға ҡайнамаған һыу эсмәҫкә, ә сәй эсергә кәңәш ителгән. Янған мейес эргәһендә оҙаҡ булыу ҙа тыйылған. Был талаптарҙың кәрәклеге ошолай аңлатылған. Йәнәһе, уларҙы үтәмәһәң, тыуасаҡ бала йә һыуҙан, йә уттан һәләк була. Быныһы инде хөрәфәткә ышаныу. Ләкин был йолаларҙың рациональ яғы ла бар. Ҡайнамаған һыу эсәк-ҡарын перистальтикаһын көсәйтә, бынан тыш һыу менән ауырыу тыуҙырыусы микробтарҙың үтеп инеүе һөҙөмтәһендә эс китеүе ихтимал. Бөтә был күренештәр аналыҡҡа ла зарар килтереүе бар. Уның ҡыҫҡарыуы көсәйеп, бала төшөүгә сәбәп булыуы мөмкин. Бөгөнгө медицина фәне иҫбатлауынса, йөклө ҡатын организмына үтә эҫе шарттарҙа булыу ҙа зарарлы - ҡарындағы баланың һаулығы ҡаҡшай.

Башҡорт халыҡ медицинаһында йөклөлөктөң һуңғы айҙарында, бәпесләү мәлендә һәм бала тапҡандан һуң 2-3 аҙна ваҡыт ҡатын кешегә һыуыҡ тейеүҙән ныҡ һаҡланырға кәңәш иткәндәр, сөнки был осорҙа уларға һыуыҡ тиҙ тейеүсән була. Был талап донъяға килгән балаға ла ҡағылған. Ә ул етлекмәй тыуһа, нормаль йөклөлөк осоро тулғансы, уны ҡараңғыла аҫрағандар.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ



**"Киске Өфө" гәзитенең 29-сы һанында "Тереклек мәктәбе" рубрикаһы аҫтында баҫылған мәҡәләлә "Дискавери" каналында оҙаҡ йылдар "Выжить любой ценой" тапшырыуын алып барған Беар Гриллс исемле инглиз һалдатының аҙашҡандарға биргән кәңәштәре тураһында һүҙ барғайны. Уның төп кәңәштәренең береһе - аҙашҡан саҡта юғалып ҡалмай, хәрәкәт итеү. "Дөрөҫ булмаған яҡҡа китеп, тағы ла нығыраҡ аҙашыуҙан ҡурҡып ултырыуға ҡарағанда, уңышһыҙлыҡҡа осрау ҡурҡынысы барлығын белһәң дә, үҙеңде алға барырға мәжбүр итеү кәрәк", - ти ул тапшырыуҙарында. Бөгөнгө яҙмамда мин сараһыҙҙан тәбиғәт ҡосағында сетерекле хәлгә ҡалған тағы ике кеше тураһында бәйән итмәксемен.**

# ҠУЛ ҠӘҘЕРЛЕМЕ, ҒҮМЕРМЕ?

Иҫәнғолда йәшәүсе билдәле йәмәғәт эшмәкәре, топонимик китаптар авторы Марат Түләбаев миңә үҙенең бала сағында томанлы март төнөндә далала аҙашып ҡалыуҙары тураһында һөйләне. Үрнәк ауылынан 15-16 йәшлек бер-нисә үҫмер егет күрше ауылға киноға юллана. Уларҙың араһында Марат Түләбаев та була. Кино тамамланғас, кисләтеп, ауылдарына ҡайтырға сығалар. Әммә ҡуйы томан ятып, аяҡ-юлдан башҡа бер ни күренмәй. Ауылға етер ваҡыт үтеп китә. Өҫтәренә йоҡа ғына кейенгән "кино яратыусылар" өшөй башлай. Март тынлығы хөкөм һөргән тип-тигеҙ далала егеттәргә йә туңып үлеү, йә ҡош-ҡорт тырнағына эләгеү ҡурҡынысы янауын белһәләр ҙә, бер кем дә төшөнкөлөккә бирелмәй. Бер мәл араларында кемдер: "Тсс, тауышланмағыҙ, ҡарҙы шығырҙатмағыҙ. Берәй тауыш ишетелмәҫме?" - ти. Тыңлай башлайҙар. Далала, айырыуса томанда, тауыш бик алыҫҡа таралыуын белә егеттәр. Арт яҡта яңғыҙ эт өргән тауыш ҡолаҡтарына салына. Килгән юлдарынан кире боролалар. Оҙаҡ ҡына атлай торғас, ниһайәт, баҙлап ҡына янған ут күренә. Яҡыная килә, унының үҙҙәренең ауылының уттары икәнен танып ҡалалар. "Үлемдән ҡолаҡҡа һаҡ булыуыбыҙ ҡотҡарҙы", - ти Марат Сәйфулла улы.

Ә хәҙер белгестәр кәңәшенә ҡолаҡ һалайыҡ. Йондоҙҙар күренмәһә, ҡуйы томан ҡаплаған, йә күҙ асҡыһыҙ буран ҡоторған ҡышҡы далала йүнәлеште нисек дөрөҫ билдәләргә? Бындай ваҡытта Беар Гриллстың тағы бер "алтын" кәңәше бар: елдең йүнәлешен билдәләргә. Томан ваҡытында ел булмаһа ла, ҡурҡыныс түгел. Ел өрөүҙән тулҡын һымаҡ булып ҡатып ҡалған ҡар өҫтөнә күҙ һалыу ҙа етә. Башҡортостандың көнбайыш һәм таулы райондарҙа ел, ғәҙәттә, көньяҡтан һәм көньяҡ-көнбайыштан, ә көнсығыш райондарҙа - көнбайыштан һәм төньяҡ-көнбайыштан иҫә. Ҡотоптарҙы самалап алғанда, бара торған ереңә юл тоҫмаллауы ла ауыр түгел, тигән һүҙ.

Артабан ҡурҡыныс һағалағанда тере ҡалыу өсөн кәрәкле сифат - тәүәккәллек тураһында әңгәмәләшәйек. Киләһе герой һымаҡ булдыра алыр инемме икән мин? Әйтеүе ҡыйын. Һеҙ ҙә үҙегеҙгә ошо һорауҙы биреп ҡарағыҙ.



2003 йылда АҠШ-тың ҡаяға үрмәләүсеһе Арон Ли Ралстон япа-яңғыҙы Юта штатындағы бер ҡаяға үрмәләй. Бәлә көтмәгәндә килә: бер ташҡа тотоноуы була, уныһы, урынынан шыуып, альпинистың ҡулын ҡыҫа. Таш шыуып китеп, уң ҡул суғы ҙур таш аҫтында ҡала. 5 көндән ашыу егет таш тотҡононда була. Йәшәү менән үлем араһында ҡалған бисара кеҫәһендә ятҡан тупаҫ бәкеһе менән ҡул суғын ҡырҡырға мәжбүр була...

**Күҙ алдына килтереүе ауыр булһа ла, бындай батырлыҡҡа һәләтле кешеләр беҙҙең арала ла барҙыр. Йәшәү менән үлем араһында ҡалған кеше ниндәй генә хәлдә лә ҡотолоу сараһын табалыр, тип уйланыла. Ғөмүмән, үҙегеҙ менән булған ошондай ваҡиғалар тураһында хаттар көтәбеҙ һеҙҙән, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ.**

**Иҙел РӘХИМОВ.**

ШАҢДАУ

# КЕЙЕМЕҢӘ ЛӘ...

## аҡылыңа ла ҡарап ҡаршылайҙар





**Салауат ҡалаһынан Зәйтүнә Көҫәпованың 39-сы һанда баҫылып сыҡҡан "Ололаһаң олоно - ололарҙар үҙеңде" тигән мәҡәләһен уҡып сыҡҡас, мин дә үҙемдең ҡайһы бер фекерҙәрем менән уртаҡлашҡым килде.**

Автор бында үҙен кәмһетелгән, меҫкен ҡиәфәттә һүрәтләгән. Мин үҙем, мәҫәлән, бер ҙә генә унының хәлендә булырға теләмәҫ инем. Материалды башҡалар ҙа уҡығандыр, моғайын. Хәтерләһәгеҙ, тәүге осраҡта - дауаханала ул күбеһенсә үҙенең берҡатлылығы арҡаһында уңайһыҙ хәлгә ҡала. Ниңә инде табипҡа үҙеңә тип әҙерләгән ризыҡты тәҡдим итергә? Был бит табипты кәмһетеү һымағыраҡ килеп сыҡҡан. Етмәһә, "Дауаханаға ятһам, тип, үҙем өсөн килтергәйнем..." тигән һүҙҙәрен дә өҫтәгән булһа... Һуң, республика кимәлендәге учреждениела эшләп йөрөгән белгес шуға мохтажмы ни инде? Әлбиттә, мин табиптың ҡылығын да өнәмәйем, тыныс ҡына, әҙәпле генә итеп кире ҡағырға ла була ине бит. Тимәк, унының нимәгәлер асыуы килеп тә ултырғандыр. Баяғы авторыбыҙҙың берәй ҡылығы йә булмаһа, үҙ-үҙен тотошо, хатта кейеме лә табиптың "енен" ҡуҙғатыуы бик тә ихтимал ине. Әйткәндәй, кейем тураһында ла үҙе әйтеп китә З.Көҫәпова ханым: "Аяҡтарыбыҙҙы - бийма. Өҫтөбөҙҙә ҡасандыр эшләгән ваҡыттарҙа алынған кейем-һалым. Ошондай ҡиәфәттә беҙ фырт кейенеп, ҡиммәтле хушбуйҙар һөртөп, һөрмәләр тартып йөрөгән йәштәрҙең тыныслығын боҙорға батырсылыҡ итәбеҙ, етмәһә..." Ә бит тел айышына ҡарағанда, автор әләм-һәләмде үҙе лә өнәп бармай, тәнҡитләй хатта. Сирлеме һин, сәләмәтме - башҡа кеше менән аралашҡанда холоҡ-фиғелеңә, кейемеңә, әйткән һүҙҙәреңә, йәғни әңгәмәләшсеңдә тыуҙырған тәүге тәьҫиргә бәйле шул күп нәмә. Оҡшай беләһең икән, ул да һиңә мөләйем, яҡты йөҙлө, йомшаҡ һүҙле булырға, кәйефеңде боҙмаҫҡа тырышасаҡ. Әйтеүемсә, кейемеңә лә ҡарамай булмаҫтар шул. Мәҡәл дә бар бит хатта: "Кейемеңә ҡарап ҡаршыларҙар, аҡылыңа ҡарап оҙатырҙар". Бик дөрөҫ, хаҡ һүҙҙәр! Хәйер, матур кейенеүҙә генә лә түгел, һөйләшә, кеше менән аралаша белеүеңде, аҡыл кимәлеңде баһалаясаҡтарын да иҫтә тотоуҙалыр, тимәксемен.

Йомош-юл менән кабинеттар буйлап, чиновниктар янына ла барғылап сығырға тура килә, дөрөҫ. Тик бында ла әллә ниндәй икенсе ҡағыҙәләр кәрәкмәй. Шул уҡ әлеге әйтелгәндәр бында ла мөһим булып ҡала. Тик бына үҙеңде йәлләтергә, меҫкенләнергә ярамай. Үҙеңде сараһыҙҙан бер бисара һымаҡ, ярҙамсыһыҙ, белемһеҙ әбей-бабай итеп түгел, ә үҙ-үҙлеге булған, ихтирамға лайыҡлы, грамоталы, яңылыҡтар, буласаҡ әңгәмә өлкәһендә хәбәрҙар кеше итеп күрһәтә белеү кәрәк. Дөрөҫөн әйткәндә, күрһәтә белеү ҙә кәрәкмәй, сөнки байтаҡ ғүмер йәшәп, эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан өлкәндәр асылда тап шундайҙар ҙа бит инде! Тимәк, үҙең булып ҡалыу, дәрәжәңде төшөрмәү фарыз һәр ваҡыт, һәр кем менән. Ҙур-ҙур учреждениеларға, эреле-ваҡлы чиновниктар янына бер кем дә усын һоноп хәйер һорарға бармай, шуға күрә, ундай ҡиәфәткә инә күрмәүең хәйерлерәк. Тик зинһар, аҡыл өйрәтә был, тип уйлай күрмәгеҙ, үҙем, башҡа яҡшы таныштарым миҫалынан сығып яҙҙым был хатымды.

**Флүрә БИКТИМЕРОВА,**
**хеҙмәт ветераны.**

*✓ 1-се, 2-се Башҡорт полктары 1811 йылда батша указы менән ойошторола. Ә инде 1812 йылдың июнендә Наполеон армияһы Рәсәйгә баҫып ингәс, башҡорттар батша указын көтөп тормайынса, изге яуға ғәскәр туплай башлай.*

*ФАРАЗДАР*

**Башҡорт халҡының хәтерендә тәрән эҙ ҡалдырған тарихи ваҡиғаларҙың береһе - 1812 йылғы Ватан һуғышы хәтирәләре булып "Любизар", "Ҡаһым түрә" һәм башҡа йырҙар һәм көйҙәр, риүәйәттәр беҙҙең көндәргәсә һаҡланып килеп еткән. Матди ҡомартҡыларҙан да Башҡортостанда "Төньяҡ амурҙары"нан ҡалған бер уникаль әйбер бар. Ул республиканың милли музейында һаҡланған Башҡорт полкының байрағы.**

# "ТӨНЬЯҠ АМУРҘАРЫ"НЫҢ...

## серле байрағы



Был байраҡ 1812 йылғы Ватан һуғышынан ҡалған берҙән-бер матди ҡомартҡы булып тора. Ул һорғолт-һары төҫтәге ебәк туҡыманан эшләнгән. Байраҡты бәләкәй генә һоро төҫтәге алты ҡырлы йондоҙҙар биҙәй. Уртала Рәсәй империяһының гербы - ике башлы бөркөт һүрәтләнгән, ә гербтың аҫтында мосолман символикаһы - ярым ай урын алған. Әләмдең өҫкө яғында һәм аҫтында ғәрәп графикаһы менән яҙылған текст бар. Рәсәй империяһы гербы өҫтөнә ниндәйҙер аббревиатура баҫылған: "О.Вh.б.П.5О".

Был байраҡтағы яҙыуҙар нимә аңлата һуң? Милли музейҙа бындай тәржемә бирелгән: "Тыныслыҡ байрағы. 1813 йылда эшләнгән. 11-се кантон башлығы подполковник Семеновский. 5-се башҡорт полкын бүләкләгән байраҡ". Тарих фәндәре кандидаты Р.Н. Рәхимов был ҡомартҡыға анализ яһай һәм етди дәлилдәр килтереп был байраҡтың 1812 йылғы Ватан һуғышы ҡомартҡыһы булыуына шик белдерә.

Подполковник Семеновскийҙың 11-се башҡорт кантон башлығы булыуы мөмкин түгел, ғәҙәттә, кантон башлыҡтары итеп башҡорттарҙы ҡуйыр булғандар, тип яҙа Р. Рәхимов. Шулай уҡ француз һуғышы осоронда башҡорт полктары менән етәкселек иткән рус офицерҙары араһында подполковник Семеновский фамилияһы осрамай, ти тарихсы. Рәсәй императоры ғына байраҡ бүләк итеү хоҡуғына эйә булған, тип өҫтәй. Ошонан сығып, Р. Рәхимов Милли музейҙа һаҡланған Башҡорт полкы байрағы 1812 йылғы Ватан һуғышы һәм рус армияһының 1813-1814 йылдарҙағы сит ил походтары осорона ҡарамай, тигән һығымта яһай.

Тарихсы ҡуйған һорауға быға тиклем яуап эҙләүселәр булмағанмы ни? Булған, әлбиттә. Мин дә 2007 йылда "Башҡорт халҡының хәрби даны" (ул китап рус телендә "Воинская слава башкирского народа" исеме аҫтында донъя күрҙе) китабын яҙған мәлдә әлеге байраҡ тураһындағы материалдарҙы өйрәндем. Был ҡомартҡы хаҡында совет заманында уҡ тикшереү үткәргәндәре асыҡланды. Билдәле тыуған яҡты өйрәнеүсе, археолог, музейҙар белгесе Рәүеф Барый улы Әхмәров 1969 йылда сыҡҡан "Знамена подвигов" исемле брошюраһында әлеге байраҡ тураһында ҡыҙыҡлы ғына мәғлүмәттәр килтергән. Әйткәндәй, ул 1958-1972 йылдарҙа республиканың тыуған яҡты өйрәнеү (бөгөнгө Милли музей) музейының директоры булып эшләгән. Р. Әхмәров байраҡтағы яҙыуҙарҙың тәржемәһен биргән, бынан тыш "О.Вh.б.П.5О" билдәләренә лә үҙенең фаразын килтергән. Уның яҙыуынса, байраҡтың өҫтөндә (фотоны ҡарағыҙ) ғәрәп телендә кәлимәи шәһәдә, йәғни иман килтереү һүҙҙәре бирелгән: "Лә Иләһә иллә Аллаһ, Мөхәмәдүр-рәсүл Аллаһ!" Әләмдең аҫҡы өлөшөндә иҫке төрки телендә: "Был тыныслыҡ әләме 1813 йылда эшләнелде... поход мәлендә... 11-се кантон начальнигы подполковник Семеновский", - тип яҙылған. "Несколько слов текста полка не смогли расшифровать, но общий смысл надписи для нас понятен. Самым важным является то, что знамя сделано во время боевого похода в 1813 году, этим и объясняется поспешность его создания", - тип яҙа автор.

Иң мөһиме шунда: Р. Әхмәров байраҡтың уртаһында яҙылған бик тә ҡыҙыҡлы аббревиатураның ("О.Вh.б.П. 5О") аңлатмаһын бирә. Уның фаразлауынса, бында "Отдельная башкирская кавалерийская бригада, полк - 5" тигән һүҙҙәр яҙылған. Автор ниндәй сығанаҡтарға таянып ошондай фекергә килгәндер, уныһы билдәһеҙ.

Миңә байраҡтағы яҙыуҙың тәржемә итеп бөтөлмәгән урындары тынғы бирмәне. Ошо мәсьәлә буйынса билдәле ғалим, филология фәндәре докторы Миңлеғәле Нәҙерғоловҡа мөрәжәғәт иттем. Миңлеғәле Хөсәйен улы байраҡтағы тексты ентекле ҡарап сыҡҡас, үҙенең бик тә ҡыҙыҡлы фекерҙәре менән уртаҡлашты. Байраҡтағы ғәрәп хәрефтәре асыҡ бирелмәгән, яҙыуҙарҙы төрлөсә тәржемә итергә мөмкин, тине ғалим. Мәҫәлән, уның фекеренсә, "11-се кантон начальнигы подполковник Семеновский" яҙыуын "бригадный начальник подполковник Семеновский" тип тә уҡырға була.

Минеңсә, М.Х. Нәҙерғоловтың әлеге тәржемәһе серле байраҡтың килеп сығышын асыҡларға мөмкинлек бирә. Әйҙәгеҙ, фаразлап ҡарайыҡ. Беренсенән, подполковник Семеновский кантон башлығы була алмаһа, бригада начальнигы вазифаһын башҡарыуы бик мөмкин. Икенсенән, "бригада начальнигы" тәржемәһе, Р. Әхмәровтың "О.Вh.б.П.5О" аббревиатураһының аңлатмаһы менән тап килә. Ул да "башҡорт бригадаһы" тураһында һүҙ йөрөтә бит.

Ә хәҙер, әйҙәгеҙ, ошо фаразлауҙарҙы тарихи факттар менән бәйләп ҡарайыҡ. Тарихтан билдәле булыуынса, 1-се, 2-се Башҡорт полктары 1811 йылда батша указы менән ойошторола. Ә инде 1812 йылдың июнендә Наполеон армияһы Рәсәйгә баҫып ингәс, башҡорттар батша указын көтөп тормайынса, изге яуға ғәскәр туплай башлай. Полктар Ырымбур губернаторы Волконскийҙың фарманына ярашлы ойошторола. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан шағир Сергей Глинка: "Не только стародавние сыны России, но и народы, отличные языком, нравами, верою и образом жизни, народы кочующие - и те, наравне с природными россиянами, готовы были умереть за землю русскую... башкирцы оренбургские сами собой вызывались и спрашивали у правительства: не нужны ли их полки", - тип яҙа.

1812 йылдың 8 авгусында император Александр I башҡорт полктарын ойоштороу тураһында указы сыҡҡан мәлдә, губернатор һәм башҡорттарҙың инициативаһы менән 3-сө, 4-се, 5-се Башҡорт полктары ойошторолған була. Иң ҡыҙығы шунда: тарихсы С.Е. Калинин "Башкиро-мещерякское войско в 1812-1814 гг." исемле хеҙмәтендә: "...полки уже 14 августа выступили в поход в действующую армию, составив бригаду под командованием подполковника Оренбургского гарнизонного полка П. Тихоновского", - тип яҙа. Билдәле тарихсы-ғалим, "Башкирский народ в Отечественной войне 1812 года" исемле китап авторы Ә.Н. Усманов та уның һүҙен ҡеүәтләй: "23 сентября бригадный начальник башкирских конных полков подполковник оренбургского гарнизонного полка Тихоновский донес М.И. Кутузову: "Следующее из Оренбурга башкирские пятисотенные конные № 3-й, 4-й, 5-й полки по повелению Вашей светлости, объявленному нижегородским гражданским губернатором Рудновским, в корпус генерал-лейтенанта Витгенштейна к Полоцку в местечко Соколица последовали через Нижний Новгород 5-й - 9-го, 4-й - 17-го, 3-й - 18 числа сего месяца".

Тимәк, 3-сө, 4-се, 5-се Башҡорт полктары һуғышҡа китеп барышлай, йәғни поход мәлендә, бригаданы тәшкил иткән булып сыға. Байраҡтағы телгә алынған "бригадный начальник подполковник Семеновский" подполковник П. Тихоновский түгелме икән? Фамилиялары ла бик тә оҡшаған бит. Байраҡты эшләүселәр әҙерәк хата ебәрмәне микән? Бәлки, был байраҡ 1812 йылда губернатор Волконский һәм бригада начальнигы подполковник П. Тихоновский инициативаһы менән эшләнмәне микән? Сөнки был өс полк Ватан һуғышы башланған осорҙа яуға оҙатылған тәүге башҡорт полктары булған бит.

Ошоларҙан сығып, мин ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған был ҡомартҡы 1812 йылғы Ватан һуғышы менән туранан-тура бәйле, тип уйлайым. Киләсәктә телсе-ғалимдар был байраҡтағы яҙыуҙарҙы ентекле өйрәнеп, бәлки, "Төньяҡ амурҙары"нан ҡалған серле ҡомартҡының тарихын асыҡларға ярҙам итер, тип ышанам.

**Азат ЯРМУЛЛИН, тарихсы.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Башҡорт этносының барлыҡҡа килеүе тураһында

Мәғлүмәт диңгеҙе дарьялай ҡайнаған заманда халыҡ тарихының объектив ағышын өйрәнеп, хәҡиҡәткә барып етеүе, үҙендең хаҡлығыңды иҫбат итеүе айырыуса ҡыйын. Әгәр ҙә инде халыҡ тарихы тотошлайы менән, бигерәк тә ул төрлө осорҙа ситтән көсләп тағылған ҡанундар һәм нормалар менән (ҡайһы ваҡыт күп һанлы халыҡтарҙың аҙ һанлы халыҡтарҙан өҫтөн булыуы күҙлегенән сығып) өйрәнелһә, был ҡыйынлыҡ икеләтә-өсләтә арта.

1880 йылда башҡорт ғалимы М. Өмөтбаев түбәндәгеләрҙе яҙа: "Рәсәй халыҡтары тураһында дөрөҫөн яҙа алырҙармы икән? Бының өсөн тарих яҙыусыға тәржемәсе сифатында Азия һәм Европа тарихын төрлө яҡтан тәрән белгән аҫаба башҡортто беркетергә кәрәк булыр ине. Ул кеше тарихты яратырға, риүәйәттәрҙе һәм хикәйәттәрҙе йыя белергә тейешле. Үҙ тарихы өйрәнелһен өсөн һәр халыҡтың үҙ Карамзины булыуы тәүшарт. Ул урта быуаттарҙың йырҙары аша башҡорттар хаҡындағы төшөнсәләргә барып етәсәк. Боронғо башҡорттар хаҡында кәрәкле төшөнсәләрҙе өйрәнер өсөн, уларҙы бөгөнгөләре менән бутарға кәрәкмәй. Уларҙы тәүтарих күҙлегенән өйрәнә башларға кәрәк..." (М.Өмөтбаев, 1984, 194-се бит).

Өмөтбаевтың васыят булыр һүҙҙәре бөгөн дә көнүҙәк булып ҡала. Башҡорт халҡын тәшкил итеүсе ҡәбиләләр күп һанлы булған. Башҡа халыҡтар, ҡәбиләләр менән тығыҙ аралашып йәшәп, башҡорттар үҙенсәлекле холҡон, үҙенә хас сифаттарын, башҡа халыҡтарға ҡарата толерантлығын һаҡлап ҡала алған, бының һөҙөмтәһе булараҡ, үҙҙәре лә ихтирам һәм абруй ҡаҙанған. Борон замандарҙан алып яҙылмаған ҡанун буйынса, һәр башҡорттоң, бигерәк тә йәштәрҙең үҙ ырыуын, ҡәбиләһен, хандары хаҡында риүәйәттәрен белеүе, тәбиғәткә һаҡсыл ҡарауы халыҡтың һаҡланып ҡалыуына һәм үҫешенә булышлыҡ иткән. Башҡорттар күп осраҡта үҙҙәренең ҡәбиләһен ниндәйҙер ханға йә бейгә бәйләгән. Әйтәйек, Үзбәк, Ҡыпсаҡ, Туҡтамыш, Бапсаҡ, Күҫәк, Ҡарағөләмбәт, Иҫкебей һ.б. Был йола ырыу-ҡәбилә башлығын һайлаған саҡта үтәлгән. Шуға күрә ҡәбиләһен һаҡлап ҡалыу өсөн башҡорттар хандарын үҙҙәренең кешеһе араһынан һайларға тырышҡан. Заман тарафынан ҡуйылған тәртип буйынса Азия ҡәбиләләре атамалары хандың исеме менән йөрөгән.

Башҡорт халҡы этнонимының барлыҡҡа килеүе мәсьәләһе тарих офоғонда аҙ өйрәнелгән мәсьәлә булып ҡала килә. Әммә археологик ҡомартҡылар эре ҡәбиләләрҙең VIII быуаттан һуң да һаҡланып ҡалыуы тураһында һөйләй. Яҙма сығанаҡтарҙа IX-XII быуаттарҙа көньяҡ Урал башҡорт халҡының боронғо ата-бабалары көн иткән Башҡорт иле булып аталған. Ә V-VII быуаттарҙа көньяҡ Уралда башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары йәшәгәнлеге теркәлгән. Улар уғыр ҡәбиләләре тип аталған. Был Евразия, Кольский ярымутрауы, көнбайыш Себер территорияларында табылған археологик ҡомартҡылар менән раҫлана. Кургандарҙа һәм ҡәберлектәргә бер үк төрлө керамика әйберҙәре, башҡа ҡомартҡылар табылған. Ошо территорияларҙа әле лә йәшәүсе халыҡтарҙың риүәйәттәрен, легендаларын анализлау ҙа шуны раҫлай.

**(Дауамы бар).**

✓ *Эпос, ҡобайыр башҡарыусылар бик тырыш, һәләтле, аҡыллы, милләтем тип йән атыусы кешеләр. Улар зыялылар, улар мәҙәниәтегеҙҙе, рухи ҡиммәттәрегеҙҙе йәшәтеүселәр. Әммә, үкенескә ҡаршы, улар сәсән түгел...*

# ҠОБАЙЫР, ЭПОС

## "сәсән" тигән оло исем

**Баш ҡалабыҙҙа тәүге тапҡыр Бөтә Рәсәй сәсәндәр фестивале үтте. Фестивалде Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, ЮНЕСКО эштәре буйынса Рәсәй комиссияһы, Республика халыҡ ижады үҙәге ярҙамы менән Башҡортостан Республикаһы Сәсәндәр үҙәге ойошторҙо. Был абруйлы сараны башлап ебәреүселәрҙең хеҙмәтен баһалап, баштан уҡ уларға рәхмәт белдерәйек. Бындай оло эште бары тик халҡыбыҙҙың мәҙәни ҡомартҡыһын баһалай белгән рухлылар ғына башҡарырға мөмкин. Бәхеткә күрә, арабыҙҙа ундайҙар бар һәм беҙ уларҙы зыялы, хөрмәтле шәхестәребеҙ итеп беләбеҙ.**

**Фестивалдә илленән ашыу конкурсант ҡатнашты. Уларҙың иң йәшенә - һигеҙ, иң олоһона һикһән ике йәш ине. Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Алтай, Дағстан, Ҡалмыҡ, Карелия, Тыва, Саха-Яҡут, Хакас республикаларынан, Архангель, Кемерово, Ырымбур, Силәбе өлкәләренән һәм үҙебеҙҙән генә лә утыҙҙан ашыу ауыҙ-тел ижады менән арбалыусылар йыйылғайны унда. Тәүге көндө конкурсанттар баһалама комиссияһы ағзалары алдында үҙ һәләттәрен күрһәтте. Уларҙың сығышын баһалама комиссияһы рәйесе - М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Әхмәт Сөләймәнов, филология фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалы профессоры Иван Карпухин, Ҡырғыҙстандың "Айгине" мәҙәни-тикшеренеү үҙәге директоры, филология фәндәре докторы Гөлнара Айтпаева, Республика халыҡ ижады үҙәге директоры урынбаҫары Нәфисә Тулыбаева һәм БР атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Гөлгөнә Баймырҙина баһаланы.**

### Түңәрәк ҡор тирәләй

Фестивалдең икенсе көнөндә "Урал батыр саҡырыуы буйынса" тип аталған түңәрәк ҡор ойошторолдо. Елена Сапогова, Гөлнара Айтпаева, Әхмәт Сөләймәнов, Нина Куулар, Эмиль Теркишев, Зоя Стрельковская, Розалия Солтангәрәева, Иван Карпухин, Асия Ғәйнуллина кеүек халыҡ ижадын фән нигеҙендә өйрәнеүсе һәм төрлө ғилми хеҙмәттәр ижад итеүселәрҙең фекерҙәрен тыңлау ҡыҙыҡлы булды. Мәҫәлән, Асия Ғәйнуллинаның, инглиз теле белгесе булараҡ, "Урал батыр" эпосының инглиз теленә тәржемә ителгән варианттарындағы хаталарҙы күрһәтеүе иғтибарҙы йәлеп итте. "Был яңылышлыҡтар тәржемәсенең башҡорт вариантын аңлап етмәүенән килеп сыҡҡан, - тине ул. - Шулай уҡ эпосты уҡыған балаларҙың, хатта ололарҙың да, ҡайһы бер һүҙҙәрҙең мәғәнә үҙенсәлеген төшөнмәүен күрәбеҙ. Мәҫәлән, "Ата юлын ҡыумаған" тигәндә ул нимәнелер ҡыуған кеүек хәрәкәттәр яһай. Руссаға "Гоняет путь отца" булып китә һәм инглизсә инде бөтөнләй икенсе мәғәнә ала. Асылда, һүҙ бары тик атаһының эшен, кәсебен дауам итмәүҙе, уның идеяларын уртаҡлашмауҙы ғына аңлата. Тағы, эпосты русса ятлаусы балалар, "Ҡаҙан аҫып" тигәндә, ҡаҙанды арҡаларына артмаҡлап күрһәтә. Һәм ошо аңһыҙлыҡ руссаға ла, инглизсәгә лә яңылыш мәғәнәлә китә. Ә бына инде "суҡмар" менән "һуйыл" һүҙҙәренең икеһенең дә "дубина" тип тәржемә ителеүе бөтә сиктәрҙе лә үтеп китә. Әҫәрҙә Йәнбирҙе балаларын һуйыл менән һуға, йәғни сыбыҡ менән яра. Һәр хәлдә, суҡмар менән түгел. Руссаға тәржемәлә ул тап ана шул суҡмар менән һуға булып сыға ла. Уны башҡа телдәрҙә уҡыған уҡыусы шунда, әлбиттә, шаңҡып ҡала: нисек итеп баланды суҡмар (дубина) менән һуғырға мөмкин? Был бер ниндәй этик нормаларға ла һыймай, хатта боронғо быуат өсөн дә..." Бына ошоноң кеүек ябай уҡыусы иғтибар итмәгән миҫалдарҙы табып, өс телгә лә дөрөҫ тәржемә итеп, тыңлаусылар алдында мауыҡтырғыс фәһемле телмәр тотто Асия Солтан ҡыҙы.

Саха (Яҡутия) Республикаһынан килгән Арктик мәҙәниәт һәм сәнғәт институты халыҡ художество мәҙәниәте кафедраһы уҡытыусыһы Зоя Стрекаловская "Мәҙәни текст яһаусы булараҡ олонхосут" темаһын ҡуҙғатты һәм сығышында халҡы араһында олонхо һөйләүселәрҙең һынаулы ғына ҡалыуы хаҡында әйтте. "Бындай йәндәр (духи) мөһөрө баҫылған кешеләр, йәғни сәсәндәр, олонхосуттар, беҙҙә элек тә бик һирәк булған, әлбиттә, әммә бөгөн улар юҡ иҫәбендә. Беҙ был талантҡа эйә булғандарҙы яһалма үҫтереп булмағанын аңлайбыҙ һәм ошо нигеҙҙә уларҙы тәбиғәт үҙе тыуҙырыр, тигән өмөт менән йәшәп, рухи хазиналарыбыҙҙы туҙҙырып бөтә яҙҙыҡ. Әле бына һеҙҙә сәсәндәр мәктәбе эшләгәнен белдек. Был бик яҡшы. Йәштәр ысын сәсән ауыҙынан булмаһа ла, халыҡ ижадын үҙе ятлап, һөйләп, ишетеп, белеп үҫә. Үкенескә ҡаршы, беҙҙә әле ундай мәктәптәр юҡ", - тине Зоя Андреевна әсенеп.

Алтай Республикаһының атҡаҙанған артисы, йәштәрҙе өҙләүгә өйрәтеүсе Эмиль Теркишев "Алтай эпостары" тигән сығышында: "Алтай ауыҙ-тел ижады күберәк ике теманы: тәбиғәт хозурлығын һәм батырҙар данын яҡтыртырта", - тине. Үҙе үк ошо әҫәрҙәрҙе һөйләүсе лә, уларҙы фәнни нигеҙҙә өйрәнеүсе лә булараҡ, уның һәр һүҙендә халҡы ижадына булған тәрән һөйөү, хөрмәт сағылды. Бигерәк тә: "Мин әле йәш, ошо ғүмеремә ике эпосты тулыһынса башҡара алыуым менән ғорурланам. Артабан мин уларҙың барыһын да беләсәкмен", - тиеүе һоҡландырҙы.

Ҡырғыҙ Республикаһынан килеүсе профессор Гөлнара Айтпаева "Урал батыр" эпосын тәржемә иткәндәге хаталарҙың "Манас" эпосы тәржемәһендә лә ҡабатланыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Эпостарҙың һәм башҡа ауыҙ-тел ижадының интернетҡа, яҙма әҙәбиәткә сығарылыуы, бер яҡтан, яҡшы ла, уны күптәр үҙаллы уҡый, таныша ала, икенсе яҡтан, улар уны телдән ишетмәй, шуныһы насар, - тине ул. - Оҫта ауыҙынан ишетеүгә бер нәмә лә етмәй. Белмәгән кеше "үле" эпосты уҡый, ул үҙе лә уны тейешенсә ҡабул итмәй, ә аҡын ауыҙынан эпос "терелеп" сыға"..."

Рәсәй Федерацияһының халыҡ артисы, профессор Елена Сапогованың сығышы боронғо урыҫ сәсәндәре, былиналар, әкиәттәр һөйләүселәр хаҡында барҙы. Ул бала сағындағы әкиәтсе әбейҙәрҙең ни ҡәҙәр оло тәрбиәүи эш алып барғанын, бындай һөйләүселәрҙе ҡунаҡтарға ла, аулаҡҡа ла, өмәләп эш башҡарғанда ла түрҙә йөрөтөүҙәрен иҫкә төшөрҙө. Елена Андреевнаның сығышы иҫтәлектәргә генә ҡоролған кеүек булһа ла, ул эшлекле түңәрәк ҡорға ниндәйҙер йылылыҡ, йәм өҫтәп ебәрҙе.

Республикабыҙ профессорҙары Әхмәт Сөләймәнов менән Мирас Иҙелбаев ҡунаҡтарҙы "Урал батыр" эпосы һәм урта быуат эпос һөйләүселәре хаҡындағы мәғлүмәттәр менән таныштырҙы. Һәр ваҡыттағыса, уларҙың сығышы йәнле һөйләшеүгә әйләнеп китте. Дөйөм алғанда, түңәрәк ҡорҙағы һөйләшеү фән нигеҙендә лә, тәжрибә уртаҡлашыу, кәңәш ҡороу нигеҙендә лә файҙалы һәм сифатлы булды.

### Үҙебеҙҙең әңгәмәләр

Бындай сараларҙың беҙҙең өсөн иң ҡыҙыҡ өлөшө, әлбиттә, ҡунаҡтар менән айырым-айырым һөйләшеү ул. Әңгәмәсең тап күҙгә-күҙ ҡарашып аралашҡанда, һинең тап улар шөғөлләнгән менән ҡыҙыҡһынғаныңды аңғарғанда асылыусан бит. Мине был аралашыуҙарҙа ике һорау борсоно: ни өсөн беҙҙең сәсәнлек кимәле, мәҫәлән, ҡырғыҙҙар кимәлендә түгел һәм ысын сәсән булыу өсөн беҙгә нимә етмәй? Ни өсөн бындай һорауҙар тыуыуын да аңлатып китеү урынлы булыр. Алтай, ҡырғыҙ кеүек халыҡ вәкилдәренең сығышын ҡараған-тыңлағандан һуң, күптәрҙең башҡарыуы театрлаштырылған тамаша күрһәтеү, йыр йырлау йәки әртислек һәләттәре менән бүлешеү кеүек кенә ҡабул ителде. Үкенескә ҡаршы, "күптәрҙең" иҫәбенә башлыса үҙебеҙҙең башҡарыусылар инде. Был исемлектә Мәүлит Ямалетдиновты ғына айырып күрһәтеп булыр ине. Уның сығышы барыбер ҙә башҡаларҙан айырылып торҙо. Бәлки, тап Мәүлит ағайҙың башҡарыу манераһы элекке сәсәнлек мәктәбенә ишаралайҙыр әле. Һәр хәлдә, был айырым һөйләшеү темаһы булыр һымаҡ.

Иң беренсе, әлбиттә, ҡырғыҙҙарға мөрәжәғәт иттек. Сөнки уларҙың аҡындарының сығышынан тәүге көндә үк арбалғайныҡ. Үкенескә ҡаршы, Доолотбек Сыдыков кеше менән бик үк аралашып бармай булып сыҡты. Миңә хатта был бер аҙ сәйерерәк тә булып тойолдо. Беҙгә ярҙамға үрҙә телгә алынған ҡырғыҙ ғалимәһе Гөлнара Аман ҡыҙы килде. Ул Ҡырғыҙстандың "Айгине" тип аталған мәҙәни-тикшеренеү үҙәге директоры ла, "Ҡырғыҙ этнологияһы" программаһы етәксеһе лә. Ғалимәнең әйтеүенсә, үҙәктең төп эше халыҡ араһынан Доолотбек кеүек аҡындарҙы табыу һәм үҫтереү. Уның ауыҙынан ишеткәндәр беҙҙең сәсәнлек фәлсәфәһен аңларға тырышып сәбәләнгән мәлдә күҙҙәрҙе асты, тиергә мөмкин. Бығаса үҙебеҙҙең сәсәнлек бәйгеләрен ҡарап-ҡарап та, ниндәйҙер ҡәнәғәтлек тоя алмау сәбәбен ябай ғына хәҡиҡәте менән төшөндөрҙө лә ҡуйҙы ул.



*Бына ул ысын сәсән - ҡырғыҙ улы Доолотбек Сыдыков!*

- Беҙҙә сәсәнлек мәктәптә үк өйрәтелә, уҡытыусы тарафынан һеңдерелә торған нәмә түгел, - тип башланы һүҙен профессор. - Һеҙҙә, күреп торам, эпос, ҡобайыр башҡарыусылар бик тырыш, һәләтле, аҡыллы, милләте тип йән атыусы кешеләр. Балаларҙың да зирәктәре, үткерҙәре эпосты, ҡобайырҙарҙы яттан һөйләй. Күптәре әртислектәре, музыка ҡоралдарында уйнауы менән алдыра. Әлбиттә, мин быларҙы хуплайым. Улар бит зыялылар, улар мәҙәниәтегеҙҙе, рухи ҡиммәттәрегеҙҙе йәшәтеүселәр, башҡаларға уның хаҡында мәғлүмәт биреүселәр. Әммә, үкенескә ҡаршы, улар сәсән (аҡын, манассы һ.б.) түгел...

Беҙҙең аңлауыбыҙса, сәсәнлек баланы үҙе таба. Был айырым донъя - йәндәр донъяһы. Ул донъяны барыһы ла күрә, ҡабул итә алмай (мин был теманы махсус рәүештә өйрәнәм һәм шундай балаларҙы эҙләү, табыу, тикшереү менән шөғөлләнәм.) Сәсән булырға тейешле кешене бала сағында уҡ әҫәр тип әйтәйемме, йәки йәндәрме, үҙҙәре һайлай. Баланы бәләкәйҙән төрлө сюжетлы төштәр борсой. Ул шуларҙың тотҡонона әйләнә. Әлбиттә, был хәл уны ҡурҡыуға ла һала. Һәм ошо арҡала ул күп осраҡта йәмғиәткә эйәләшә алмаған, сәйер, тиҫтерҙәре тарафынан ситләтелгән бала булып үҫә. Һаташыу, төшөндә оҙайлы күренештәр күреү, уларҙың даими ҡабатланыуы, үҙе лә белмәҫтән ҡайҙалыр сығып китеп аҙашыуҙар, булмаған хәлдәр тураһында "булды" тип бәйән итеүҙәр һәм айырым ағзаларҙың ауыртыуы малайҙарҙа 12 йәштәр тирәһендә башлана. Күп осраҡта уларҙың бөйөрҙәре ауырта башлай. Бындай балалар менән психологтар эшләй һәм уларҙың төштәренән эпостарҙа һүрәтләнгәндәрҙе таный. Шундай балаларҙы беҙ (йәки атай-әсәһе) әҫәр менән таныштырабыҙ ҙа инде. Улар уны бик тиҙ ятлап ала һәм шуның менән "йәшәй" башлай. Был үҙ һауытын эҙләп тапҡан ҡапҡас кеүек була ла ҡуя. Бала (йәш кеше, ир кеше), тимәк, нисә йылдар буйы ошо әҫәрҙәге күренештәрҙе

✓ ***Бөгөнгө эстрада тибындағы сәсәнлекте һаман да ысын сәсәнлеккә тиңләштереүҙе дауам итһәк, тағы ла утыҙ йылдан беҙгә ҡырғыҙ, алтай сәсәндәре майҙанында йөҙ ҡыҙартырға тура киләсәк бит.***



# БАШҠАРЫУСЫЛАРҘЫ...

## менән атап буламы?



*Фестивалдә ҡатнашыусы ҡунаҡтар һәм үҙебеҙҙекеләр.*

төшөндә күргән, шулар менән һаташҡан, ҡайҙалыр булырға тейеш бит ул, тип эҙләгән һәм әле килеп шул донъяны асҡан...

Әлеге фестивалдә сығыш яһаған беҙҙең сәсәнебеҙ Доолотбек Сыдыков тап шундай мин һүрәтләгән кеше лә инде. Ул, күрҙегеҙ, эпосты башҡарғанда бөтөнләй онотола, трансҡа инә. Ул да, беҙҙең башҡа аҡындар ҙа йәндәр тарафынан һайланған шәхестәр, йәмғиәттең ябай кешеләре түгел. Улар артист та, музыкант та, уҡытыусы ла була алмай. Үҙегеҙ күрҙегеҙ, беҙҙең аҡын кемделер уҡытыр йәки музыка ҡоралын үҙләштерер хәлдә түгел... Ысын сәсәндәр, аҡындар - улар яҡшы мәғәнәһендәге "ауырыуҙар". Улар Йыһан менән туранан-тура аралашыуға дусар булған, был донъяла шәхси тормошон да ҡора алмаған бисаралар. Тик халыҡ уларҙы элек-электән бик яратҡан, ололаған, түр башына ултыртып, сәғәттәр, тәүлектәр буйына улар һөйләгәнде тыңлаған. Беҙҙә, Аллаға шөкөр, тап шундай аҡындар бар...

Әңгәмәбеҙ барышында "Кем ул ысын сәсән?" тигән һорауыбыҙға яуабында Зоя Стрекаловская ла ошондай уҡ фекерҙе дауам итте. "Яҡут олонхо һөйләүселәре (олохосутсылар) бик ярлы кешеләр булған, - тине ул. - Сөнки улар һунар итеп, балыҡ тотоп йәки хужалыҡ ҡороп, үҙ тамаҡтарын аҫырай алмаған. Гөлнара әйткәнсә, "шауҡымлы" кешеләр булғандар инде. Уларҙы ошо таланттары өсөн халыҡ туйҙырған, ҡараған. Олонхосутсылар ун икешәр-ун бишәр сәғәт, тәүлектәр буйы транс хәлендә эпос һөйләй алған. Һөйләп бөткәс, хәле бөтөп йығылған..."

Алтай Республикаһынан килгән Эмиль Теркишев үҙен сәсәнгә һанамауын белдерҙе. "Минән алдағы быуындарымда бер олатайым ысын сәсән булған, тик миндә уға бирелгән һәләт юҡ. Уның теленән һөйләнелгәндәр бөгөнгө быуынға ла етһен, юғалмаһын өсөн махсус рәүештә ошо шөғөлгә тотондом, - тине ул. - Мин бары тик әртисмен һәм балаларҙы сәсәнлеккә өйрәтеүсе уҡытыусымын. Сәсән исеменә, һәр хәлдә, ул исемдең ысын мәғәнәһенә, дәғүә итмәйем, сөнки уның кем булыуын аңлайым. Сәсәндәр мираҫын башҡаларға еткереүсе, батырҙар хаҡындағы эпостарыбыҙҙы башҡарыусы булыуым менән дә ғорурланам..."

Нуғай йыраусыһы Алибий Романов та сәсәнлек, эпостарҙың мәғлүмәти көсө, уларҙың тарихи генетикаһы тураһында уйлана икән: "Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Төркиә ерҙәрендә ысын манассыларҙы күргәнем булды, - тип һөйләне ул беҙгә. - Һуңғы тапҡыр Ҡаҙағстанда ҡырғыҙ малайының күҙ ҡараһы юғалған хәлдә трансҡа инеп, бер нисә интонацияла һәм бер нисә тонда туҡтамайынса ете сәғәт манас уҡығанына шаһит булдым. Был сығыш ябай кешегә хас түгел, хатта бик талантлы әртис тә эпосты былай һөйләй алмай. Был ысынлап та һайланма кешеләргә генә бирелгән мөғжизәүи һәләтме, әллә эпостың ана шул кеше йөрәге аша үтеүеме..." Шул уҡ ваҡытта Алибей эпос, ҡобайыр йәки башҡа халыҡ ижадын башҡарғанда уны йөрәге аша үткәреүен, һыҡрауын, сығыштарынан һуң бүлмәгә бикләнеп илап та алыуын, әммә баяғы үҙе һөйләгән ҡырғыҙ малайы кимәлендә башҡара алмауын, уға ундай мөһөр баҫылмауын бәйән итте.

Бына шундай һөйләшеүҙәр булды сәсәндәр бәйгеһенә йыйылған ҡунаҡтар менән беҙҙең арала.

### Уйланыуҙар

Ошондай һөйләшеүҙәрҙән һуң, күңелгә ҡуҙ төшкәндә, уйланыуҙар килә. Ә был ишеткәндәрҙән һуң уйҙарҙың сиге булманы.

Атайымдың шәжәрәһендә Ғәбит сәсән бар. Арғынбайҙың ете улы, шул ете улдың береһе Ҡаһарман, икенсе улы тармағында Ғәбит сәсән. Шунлыҡтан, әле бәләкәйерәк саҡта, туғандарҙың ололары ауыҙынан Ғәбит сәсән хаҡында мәғлүмәттәр килеп етә ине. Өләсәйемдең һеңлеһенең уның тураһында: "Ғәбит апа дәрүиш булып йөрөгән, тәүлектәр буйы урманға сығып китеп олаҡҡан, әллә нимәләр уйлап сығарып һөйләгән, уны йыш ҡына юлда тунының тиҫкәреһен әйләндереп кейеп алған хәлдә күргәндәр, сәбәпһеҙгә юлға сыҡҡан, бер йомошһоҙ алыҫ араларға барып ҡайтҡан, ауыл ситендәге ҙур ташҡа ултырып, бәүелеп-бәүелеп әллә ниндәй аңлайышһыҙ тарихтар бәйән иткән", - тип һөйләгәнен иҫләйем. Аңлауымса, ул эпосты инде ир ҡорона ингәс тапҡан йәки эпос уны тапҡан, ҡалай дөрөҫөрәк булалыр. Ул да әҫәрҙе һөйләгәндә транс хәленә ингән, тиҙәр, шул халәте менән тыңлаусыларын да әсир иткәндәр инде. Юғиһә, совет заманына аяҡ баҫҡанда, әкиәт-алдаҡтарҙы һепереп түккән йылдарҙа, кем уның был мөғжизәһен тыңлап ултырһын. Тимәк, эпостарға ниндәй дәүер тыңлаусыһына ла тәьҫир итә торған ниндәйҙер серле код һалынған. Ә ул кодты бары шул донъя менән аралаша алыусы ғына аңлай. Әгәр ул ҡырғыҙ аҡыны, йә Ғәбит сәсән кеүек ысын сәсән ауыҙынан сыҡһа, үҙ сәбенә тейә лә ҡуя инде...

Ғәбит сәсән шулай халыҡ араһында "дәрүиш" ҡушаматы менән йәшәп, ярымхыялый булып йөрөп, ғаиләһеҙ, балаларһыҙ булып үлеп китә. Шәжәрәлә уның үҙ исеменән башҡа бер эҙе лә юҡ. Ошо тәңгәлдә ҡырғыҙ ғалимәһенең әйткәне иҫкә төшә. Бәлки, уның да бөйөрҙәре ауырыу булып, ирлек функцияларын үтәтеүсе ағза эшмәкәрлегенең түбәнлеге сәбәбендә заты дауам ителмәгәндер? Юғиһә, башҡорттарҙа (мосолман халҡында) хатта иҫәрҙәргә лә ҡатын алып бирәләр, тоҡомон ҡалдырталар бит...

Яҡут, алтай һәм ҡырғыҙ ҡунаҡтарының барыһы ла һөйләшеүҙә тик ир-егет сәсәндәр хаҡында ғына һүҙ алып барҙы. Башҡорттоң ирекле ҡыҙы булараҡ, миңә был гүзәл затты бүлеп, хатта кәмһетеп ҡараған кеүек тойолдо. "Ә ни өсөн ҡатын-ҡыҙ сәсән була алмай?" тигән һорау телдән ырғыны ла сыҡты, ырғыны ла сыҡты.

Улар аңлатыуынса, ҡыҙ балаға сәсәнлек һәләте лә бирелергә мөмкин икән. Уның да төштәр күреүе, шулар менән һаташыуы бик мөмкин. Әммә... Күрем мәле етеүгә (йәғни 12-13 йәштә) ҡыҙ баланың ҡатын-ҡыҙ каналы асыла, уның организмы, аңы менән берлектә, бөтөнләй икенсе донъя өсөн эшләүгә күсә. Был механизм ҡыҙ баланы ҡатын, әсә булыуға әҙерләй башлай, ул инде ирен һәм балаларын үҙ энергетикаһы менән туҡландырыусы көс булараҡ ҡына туплана. "Бөгөн халыҡ телендә ҡатын-ҡыҙ "бирә" тигән төшөнсәне ниндәйҙер түбән мәғәнәлә ҡулланалар, ә асылда ул ысынлап үҙ тәне һәм күңел торошо аша ергә энергия, илһам, көс-ҡөҙрәт биреүсе ул. Был энергетиканы ул Күктән, Йыһандан ала. Кешелек ана шул ҡатын-ҡыҙ энергетикаһы менән туҡланып йәшәй ҙә", - тип аңлата быны ҡырғыҙ ғалимәһе Гөлнара Аман ҡыҙы.

Тимәк... Ҡатын-ҡыҙ, сәсәнлек һәләте бирелгән хәлдә лә, организмы ҡатын-ҡыҙ булып етлегеү осорон кисерә башлағас та, был көсөн юғалта. Йәғни, уның был көсө күрем ҡаны, иргә, балаларға бүленгән энергетикаһы менән сығарылып, таратылып бөтөлә. Ошо тәңгәлдә индеецтар тураһында яҙған француз тикшеренеүсе-ғалимы Пауэл Эйеерҙың яҙмаларына мөрәжәғәт иттем. Ул индеец шамандары хаҡында бына нимәләр яҙа: "Шаман ролен ир енеслеләр генә үтәй. "Ни өсөн ҡатындар шаман була алмай?" тигән һорауға улар: "Ҡатын - Күк менән Ерҙе тоташтырыусы юл, уның аша ергә көс килә. Йәндәр менән аралаша алған ҡатындың был юлы бикләнә. Ысынында, шаман ҡатындың күреме булмай, уны ир енеслеләр ҡыҙыҡһындырмай, бала тапмай икән. Йәғни, асылына тап килмәй. Шунлыҡтан, утыҙ йәштәр тирәһендә үлә лә".

Борон төрлө ил һәм диндәрҙәге "ведьма" тип яндырылған йәндәр, икенсе донъя менән аралаша алған ҡатындар ҙа ирҙәр тарафынан тап ана шул кешелекте кәрәкле энергетика менән туҡландырмауы өсөн юҡҡа сығарылған, күрәһең. Юғары аң, донъяны, кешелекте барлыҡҡа килтереүсе Көс ҡатын-ҡыҙҙы тап ошо функцияны үтәүсе итеп яралтҡан һәм был тәртипте боҙоуҙы хупламай, булып сыға.

Индеецтарҙың Пауэл Эйеерға ҡатын-ҡыҙҙың күктән энергия алып, ергә таратыусы булыуын аңлатырға тырышып төшөргән һүрәттәре конус, өсмөйөш, пирамида формаһындағы фигуралар. Йәнәһе, тар морондан көс инә лә, аҫтан итәк киңлегенән тарала. Тап ана шул аңға ярашлы ҡатын-ҡыҙ кейеме барлыҡҡа килә лә инде. Бына ни өсөн ҡатындар итәкле булырға тейеш. Итәктәрен юғалтып, улар үҙ тәғәйенләнештәренән дә тайпыла, ирҙәргә көс бирмәй һәм шуның менән ирҙәр иғтибарын яулап ала алмай башлай. Быныһы, әлбиттә, айырым һөйләшеү темаһы. Бары тик, Шүлгән һәм башҡа мәмерйәләрҙәге өҫтө тар, аҫты киңәйә барған аңлайышһыҙ һауыттарҙың да тап ана шул күктән алып ергә таратылған энергетика төшөнсәһенә ишаралауы түгелме икән, тип әйтке килгәйне.

### Йомғаҡлап...

Эпостар - ер-күк-донъя һәм дә бар тереклек барлыҡҡа килеүе хаҡындағы аң кимәлендәге, һуңынан телгә күсерелгән код һәм ул бар диндәрҙән дә алдараҡ барлыҡҡа килгән. Тимәк, беҙҙең бер ғалим: "Урал батыр", "Аҡбуҙат" эпостарында дин, Аллаһ һәм башҡа изге төшөнсәләр хаҡында һүҙ юҡ, сөнки ул әҫәрҙәр Совет власы осоронда "иләк аша үткәрелгән", - тиеүе менән хаҡлы түгел. Эпостарҙа был һүҙҙәр була ла алмаған. Сөнки эпостар кеше аңына (һайланма кешеләргә генә) һалына торған иң беренсе аң - код улар. Юғары аң (Аллаһ) тарафынан йыһанер һәм башҡа донъяның барлыҡҡа килеүе хаҡындағы тере мәғлүмәт бары тик эпостарҙа ғына һаҡлана. Шуға ла Ул был йомаҡты (кодты) һүҙ менән әйтеп аңлата алмаған "дәрүиштәргә" генә бирә. Дәрүиштәр бит камил аңлы, ғәҙәти бала булып тыуған. Артабан улар махсус рәүештә шул халәткә еткерелгән һәм шунан ғына уларға эпос менән танышыу мөмкинлеге бирелгән...

Уйланыуҙарҙы эҙмә-эҙлекле алып килгәндә, халыҡ һүҙе була алған, яуға күтәргән, аһ-зарҙы, ҡарғышты, батырлыҡты йырға һалған кешеләрҙе халыҡ "сәсән" исеме менән атаған. Улар атамаһы беҙгә лә шул сәсән һүҙенә бәйләнеп килеп еткән. Ә беҙҙең сәхнәләрҙә әртислек менән сәсәнлектең айырмаһын күрмәй киттек. Әлбиттә, халыҡ ижадын йәштәрҙең өйрәнеүе бик мәслихәт. Әммә халыҡ ижадын йәки эпостарҙы өйрәнеү мәктәбе менән сәсәнлек мәктәбе икеһе ике нәмә кеүек. Бөгөнгө эстрада тибындағы сәсәнлекте һаман да ысын сәсәнлеккә тиңләштереүҙе дауам итһәк, тағы ла утыҙ йылдан беҙгә ҡырғыҙ, алтай сәсәндәре майҙанында йөҙ ҡыҙартырға тура киләсәк бит. Ә инде ул "сәсән"дең "атҡаҙанған" булыуы икеләтә көлкө буласаҡ... Һәр хәлдә, был темаға һөйләшеүҙе дауам итеү кәрәк.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

***✓ Яҡташ икәнлегемде, өндәшмәһәгеҙ ҙә һиҙеп, белеп йөрөйһөгөҙ. Исемем дә Яна түгел, Йәнбикә, ҡыҙ фамилиям - Тимербулатова. Шул тимер менән ҡаты ҡоростан ҡойолған фамилиям рухи донъяма, ихтыяр көсөнә йоғонто яһағандыр...***




Ҡоласын ташлап, ҡаҡ һөйәккә әүерелә барған бармаҡтары менән түшәген матҡыған Яна оҙаҡ үкһене, оҙаҡ сеңләне. Мин дә уны ошо хәлдә ташлап сыға алмай ҡаушағанмын.

Бер аҙҙан ул түшәгендә тороп ултырҙы, боларған сәстәрен ипкә килтерҙе, ҡул һырты менән буҫыҡҡан йөҙөн һыпырҙы:

- Кисерегеҙ, зинһар. Теләмәгән инем. Сираттағы күңел өйәнәге.

Һүҙһеҙ генә кеҫәмдән ҡулъяулыҡ сығарып һондом.

- Ҡайһылай матур сигелгән! Бындай селтәрҙе тәүләп күреүем. - Яна әле генә булған бәргеләнеүен онотоп ҡатын-ҡыҙ ҡыҙыҡһыныуы менән ҡулындағын әйләндергеләп ҡарарға кереште. - Һөйгән ҡыҙығыҙ бүләк иттеме?

- Юҡ, яҡын ғына еңгәм.

- Ә еңгәгеҙ... йәшме?

- Ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәше булмаған кеүек, еңгәләр ҙә һис ҡасан ҡартаймайҙар.

- Ошо ерҙә һеҙ шуҡ кешегә оҡшап киттегеҙ.

- Ҡарт, үҙе килеп тороп йыуан, йәмһеҙ, тип яманлағанымды ишетеп ҡалһа, ҡайтып төшөү менән еңгәм мине тотоп алып, терелэй ашар бит. Ул ут бөрсәһеләй хәрәкәтсән, йыуаш ағайымды шығырлатып тота. Йәнә йырға оҫта, таҡмаҡ әйткәнендә теле телгә йоҡмай. - Янаны нимә менән булһа ла алдаштыра алыуыма ҡыуанып, бар булған маһирлығымды, фантазиямды эшкә ҡушып, хәбәргә күстем. - Армияға китерҙән алда ауыл халҡын клубҡа йыйып, беҙҙе сәхнә түренә мендереп ултыртып ҡуйҙылар. Ауыл Советы башлығы һәр беребеҙгә бүләк итеп сумаҙан тотторҙо, шунан яҡындар, туған-тыумасалар ҡотлай башланы. Теге еңгәм, таҡмаҡлап, ошо бүләген килтереп кеҫәмә тыҡты.

- Нимә тип таҡмаҡланы инде? - Яна мауыҡҡандан мауыға бара.

- Бында килешер микән? - Ишек яғына шиксел ҡарап алдым.

- Килешә, йә инде йырлап күрһәтегеҙ. Мәрәкә бит!

Армияға китә бирәү,
Билендә һары ҡайыш.
Үҙен-үҙе әллә кемгә,
Ҡуя бит, понимаешь!

- Понимаю! Понимаю! - Яна донъяһы теүәл кешеләй, таҡмаҡтың эстәлеген тулыһы менән аңлағандай онотолоп көлөп ебәрҙе.

- Ҡайтайым, булмаһа!

- Ҡулъяулығығыҙҙы алығыҙ! Еңгәгеҙ бүләген ят кешегә тотторғанды ишетеп ҡалһа, ни тиер?

- Әлегә ҡалып торһон. Рәссам булараҡ селтәрҙең сигелешен өйрәнегеҙ. Ысын ҡар бөртөгөләй төпсөрләп үҙенсәлекле нағышланған бит.

- Азамат... Һеҙгә бер үтенесем бар.

- Иғтибар менән тыңлайым.

- Үтәрһеңме?

- Ниндәй үтенес бит әле.

- Ишекте нығ итеп яп әле иң әүәл.

Ҡыҫылған ишекте этеп ҡуйҙым.

- Беҙҙе ишетеүсе юҡ.

- Һеҙҙең миңә йөрөйәсәгегеҙҙе белгәс, тәүҙә баш тарттым, ни өсөн икәнен әйтәйемме?

- Һонтор, килбәтһеҙ буйһынымды күргегеҙ килмәгәндер? - Шаяртып ҡотолмаҡсымын.

- Һеҙгә ямаҡай, бахыр хәлендә күренгем килмәне.

- Яңылыш уйҙаһығыҙ, Яна!

- Әҙәп һаҡлайһығыҙмы? Үҙ хәлемде үҙем беләм. Шунан Павелдың тәҡдименә ризалаштым, эстән генә, ярҙамсым килә бит, тинем.

- Ярҙам итәм дә. Бына укол ҡаҙаным, моғайын да еңел булып ҡалғандыр әле.

- Эйе, ваҡытлы еңеллек. Ә үтенескә килгәндә... Әйҙә, уны һуңғараҡҡа ҡалдырайыҡ. Бөгөн түгел... Хоҙай Тәғәлә беҙҙе бәләле мәлдә осраштырҙы. Мин сирләмәгән хәлдә беҙ бына ошолай бер-беребеҙгә яҡынлай алыр инекме икән?

- Ниңә, мин увольнениеға сыҡҡанда ҡала майҙанында осраҡлы ғына тап булышыр инек. Бәлки, филармонияла. Һеҙҙең классик музыка концертын яратҡанығыҙҙы белгәс, шунан сыҡмаҫ инем.

- Осратҡан мәлегеҙҙә мин эреләнеп һеҙҙе күрмәгәнгә һалышһам?

- Янығыҙға үҙем килер инем.

- Шунан?

- Һеҙ беҙҙең Яна Григорьевнамы, тип һораясаҡмын.

Йөҙө балҡып киткән Яна уйынды элә һалып алды:

- Юҡ, һеҙҙең Яна Григорьевна түгел, ә ҡалалағы сержант мәктәбенә шәмбе һайын киноға йөрөгән Яна. Был ниндәй әҙәпһеҙлек, сәғәттәр буйы күҙләп тә мине хәтерегеҙҙә ҡалдырмағанһығыҙ, тип битәрләйәсәкмен.

- Ғәфү үтенәм. Бынау ут ҡыҙыл раузаларҙы һеҙгә тип алғайным, тип хәйләләшкән булырмын.

- Сәскәләрҙе кемдән алдығыҙ, тип ныҡышһамсы?

- Сиғандан. Ул һеҙгә матур киләсәк юрап, сәләмәтлек теләне, тип теге ҡарсыҡтың сәләмен еткерермен.

Янаның күҙҙәре тағы йәшкәҙәне:

- Һеҙҙең менән шул тиклем дә рәхәт, күңелле, Азамат... Бала һымаҡ әүрәтәһегеҙ, ә мин ирекһеҙҙән шуға ышанам да ҡуям...

Ишек төбөндә Елизавета Петровна көтә ине. Йөҙө килгәндәгенә ҡарағанда асыла төшкән. Ул эргәмә килеп бышылданы:

- Янаның оҙаҡҡа һуҙылған депрессияһы һуңғы осорҙа бына ошолай өҙгөләнеүгә ялғана. Бер нисек тә яйын, көйөн таба алмайбыҙ. Кисә ете төн уртаһында Иван Ивановичты ярҙамға саҡырырға тура килде. Күрәм, һеҙ оҫта психолог.

- Замполитҡа, фельдшер оҙаҡ тотҡарланмай, тиҙ арала сығып китте, тип әйтерһегеҙме?

- Әйтермен.

* * *

Сираттағы процедураға барҙым. Бөгөн система ҡуя торған көн. Һәр ваҡыттағыса, ҡаршы алыусы булманы. Стерилизаторҙы, система ҡулайламаһын, башҡа кәрәк-яраҡты алып, Янаның янына үттем. Йөҙө һыҙланыуҙан ҡара көйһә лә, ул мине көсәнеп йылмайып ҡаршы алды, системаны тоташтырғас, эйәген ҡағып, янынан урын тәҡдим итте:

- Азамат, ниңә улай ситләшеп киттең әле, бөгөн беҙҙә аулаҡ, ултырғыс тартып, бына бынауында ултыр. Елизавета Петровна магазинға аҙыҡ-түлек артынан киткәйне, бер аҙ прогулкала ла йөрөп әйләнәм, ти ине, тиҙ генә ҡайтып инмәҫ әле. Аралашырға алай ҙа ул бар, ә Павел Сергеевич хәрби округта үткәрелгән кәңәшмәгә китте, иртәгә кис кенә ҡайта. Ул бигерәк бөтөрөнә, ир кешегә улай бәлйерәп төшөү килешмәй. Әлегә бармын бит әле, үлмәгәнмен... - Бына-бына атылып-сәсрәр күҙ йәштәрен күрһәтергә теләмәй, ситкә ҡараны ла, бер аҙҙан элекке торошона ҡайтҡас, күҙҙәрен ғазаплы көлдөрҙө. - Һөйләшкем, кем менән булһа ла аралашҡым килә. Инъекциянан һуң сирем ҡул менән һыпырып алғандай юғала, әйтерһең дә, һап-һаумын, сәләмәтмен, ырғып тор ҙа йүгереп сыҡ та кит инде, мамыҡтай ҡарҙа ауна, күкрәк тултырып саф һауа һула, төпһөҙ зәңгәрлеккә төбәлеп, көн сыуағына ҡыуан, ян-тирәңдәге кешеләр менән аралаш, юҡ шул, мөмкин түгел, башым әйләнә, быуындар таралып барғандай. Ә мин зарланмайым, һис ҡасан зарланмайым... - Кипкән ирендәрен ялағандай иткәс, эргәһенә тумбочка өҫтөнә ҡуйылған шешәнән гәлсәр һауытҡа минераль һыу сайпылтып йотто ла, системанан беләк тамырына йүнәлгән йомшаҡ пластик көпшәгә күҙ атты:

- Тып-тып тамған тамсылар секундлап, минутлап миңә ғүмер өҫтәйҙәр төҫлө.

- Ысынлап та шулай. Система ҡуя башлағандан бирле еңеллек тояһығыҙҙыр бит?

- Тоям, әлбиттә. Янымда һеҙ булмаһағыҙ, мин нимә генә эшләр инем икән?

- Икенсе берәү килер ине.

- Икенсе берәү тимәгеҙ, ят кеше, тиегеҙ. Ә беҙ һеҙҙең менән яттар түгел... - Ҡаштарын төйөрөп, күңел төпкөлөндәге хәтирәләрен барларға йыйынғандай, бер аҙ һүҙһеҙ ҡалды ла дауам итте. - Әле беҙҙә аулаҡ, тинем бит әле, шул арауыҡты кем дә булһа хәбәре менән тултырырға, тулыландырырға тейештер ҙә баһа! Улайһа, тыңлағыҙ.

Яҡташ икәнлегемде, өндәшмәһәгеҙ ҙә һиҙеп, белеп йөрөйһөгөҙ. Исемем дә Яна түгел, Йәнбикә, ҡыҙ фамилиям - Тимербулатова. Шул тимер менән ҡаты ҡоростан ҡойолған фамилиям рухи донъяма, ихтыяр көсөнә йоғонто яһағандыр, бәлки, йәшәүем көрсөккә килеп терәлгәндә лә бирешмәҫкә тырышам. Башҡортса аралашыуға килгәндә, бәләкәйҙән ситтә тәрбиәләнгәс, һаҡау ҡош һымаҡмын, бөтәһен дә аңлайым, төшөнәм, һүҙ запасым ярлы булғас, уның урынлы ҡулланылышын белмәгәс, һөйләшә генә алмайым. Шуға ла бит, уңайһыҙланып, бер тапҡыр ҙа һеҙгә үҙ телемдә мөрәжәғәт итмәнем. Район үҙәгендә йәшәнек, ауыл эргәһенән генә биттәрен өйкөм ҡайынлыҡтар япҡан тәпәш, ялпаҡ тауҙарҙы урталай ярып, Йүрүҙән аға ине. Йәй башынан, ҡаҙ бәпкәләре ише, яр буйындағы һай урындарҙа быстырҙап йылғанан ҡайтып инмәнек. Өшөүҙән ҡош тәне ҡалҡып, ағарынышып-күгәренешеп, асығып бөтәбеҙ. Ҡайтырға тип ауыл яғына ыңғайлайбыҙ ҙа, ярты юлдан кире боролоп, йән тәслим йылға яғына йүгерәбеҙ, йылымыс тулҡындарға сумабыҙ. Көнө буйы шулай ҡабатлана. Ҡояш байыуға яҡынлашҡас ҡына һөрәнләп килеп атайым эҙләп таба, мәгәр орошмай. Мине елкәһенә ултыртып, апайымды етәкләп ҡайтыу яғына ыңғайлайбыҙ. Ҡунаҡлаған еремдән тирә-яҡ ус төбөндәгеләй асыҡ күренә, бар тирә-яҡта минән дә бейегерәк бер кем дә юҡ! Күңелемде биләгән шатлыҡ-ҡыуаныстан шарҡылдап көләм, телем телгә йоҡмай тәтелдәп, бытылдайым.

Әсәйем башланғыс кластар уҡытыусыһы ине, өй тулы китаптар, дәреслектәр, өҫтәлдә мәктәптән тикшерергә алып ҡайтылған дәфтәрҙәр өйөмө. Кис етте иһә, өҫтәл лампаһы ҡабына. Һүренке ут яҡтыһында йоҡлап китә алмай мыжыйбыҙ, мышҡылдайбыҙ. Әсәйем үтә һылыу ҡатын ине, тик уның һөйкөмлө йөҙө түгел, сәстәремдән һыйпаған, йоҡлағанда юрғанымды төҙәтеп япҡан йомшаҡ, хәстәрлекле ҡулдары ғына иҫтә ҡалған. Тағы кис һайын йоҡларға йыйынғанда түшәктә икебеҙҙе ике яғына алып ҡосаҡлап ята ла ишетелер-ишетелмәҫ кенә итеп бишек йырын йырлай. Ошо ябай ғына көй минең өсөн иң юғары баһаланған классик әҫәрҙәрҙән ҡәҙерлерәк. Атайым да гел генә чертеждар һыҙып, һүрәт төшөрөп ултыра. Ҡулы оҫта ине уның, киндергә майлы буяу менән әсәйемдең ҙур портретын эшләп, өй түренә элеп ҡуйғайны. Шул тиклем дә оҡшатып эшләр икән кеше, хайран ҡалырлыҡ!

Беренсе класҡа уҡырға төшөргә йыйынған йылда әсәйем ҡапыл ғына сирләй, күҙ алдында майшәмдәй ирей, һүнә башланы. Яҙ аҙағында сирләй башлағайны, йәй үткәс, мәктәпкә уҡытырға ла бара алманы, мине беренсе класҡа атайым ғына илтеп ҡуйҙы. Апайым Гөлбикә минән ике йәшкә оло, ары мәктәпкә уның менән барҙым, уның менән ҡайттым. Көҙгө рашҡыла әсәйем больницаға тип киткәйне, Яңы йыл алдынан машинаға тейәп килтереп ҡалдырҙылар. Ул ҡаҡ һөйәккә ҡалғайны. Ҡурсаҡтай кәүҙәне атайым еңел генә күтәреп, төпкө яҡҡа индереп һалды. Беҙ, ике бала, өйҙә булған һыйҙы, тәм-томдо алдына өйөп ташлаған булдыҡ, шуларҙы ашаһа, әсәйебеҙ төҙәлеп, аяғын баҫып китә инде, йәнәһе лә. Ә ул ризыҡҡа ҡағылып та ҡараманы, алмаш-тилмәш башыбыҙҙан һыйпап ҡуйыу менән генә сикләнде. Фельдшер апай саҡыртҡанда инәлтеп булһа ла килеп, уколдар ҡаҙап китә ине ҡайһы саҡ. Улары ла аҙға ғына еңеллек килтерә, ҡалған ваҡыт әсәйем һыҙланыуға сыҙамай ыңғыраша, тештәрен шығырҙата, ирендәрен, уртын сәйнәй. Бигерәк тә төндәрен ҡыйын, ҡасан ғына таң ата инде, тип көтәбеҙ, ҡояш нурҙары менән өйөбөҙгә яҡтылыҡ, һиллек инеп тулыр һымаҡ. Һуңға табан әсәйем тыныслана төштө, йоҡлағандай ойоп тик ята. Ҡайһы саҡ беҙҙе танымай башлай, һаташҡандай ҙа итә. Яңы йыл кисендә, бөтә халыҡ йылына бер тапҡыр ғына килә торған мөғжизәне көтөп, шыршы байрамына әҙерләнгәндә ҡәҙерле кешебеҙ мәңгелеккә күҙҙәрен йомдо. Шуға ла Яңы йылды яратмайым мин, тыуыр йыл ниндәйҙер өшәндергес шик-шөбһә алып килер төҫлө.

Өсәүләшеп тороп ҡалдыҡ. Атайым һаман да ҡайҙалыр эшләй ине әле, тик ул, элеккеләй, ял иткәндә ҡулына бумала алып, һүрәт төшөрөп ултырыуын онотто. Ул яҙ сыҡҡас бер көндө ниндәйҙер йәш ҡатынды эйәртеп ҡайтып инде. Урта буйлы, урта йыуанлыҡта, төҫ-башҡа ла урта,

**✓ *Хәҙер беҙ "Башҡорт энциклопедияһы"ның электрон вариантын эшләйбеҙ. Ҡағыҙ энциклопедияны һәр ваҡыт күләме сикләй. Электронды - сикләмәй. Әле беҙ электрон "Башҡорт энциклопедияһы"ның руссаһына 18 мең мәҡәлә һалдыҡ.***

кешелеклек, миһырбанлыҡ, аҡыл йөһәтенән дә, һуңынан асыҡланыуынса, урта сама ине, түбәнерәк булмаһа әле. Ул кис буйы юҡ-бар лаҡылдап, тоҙһоҙ хәбәр һатып маташты. Мәғәнәһеҙ, урынһыҙ һырпаланыуға иғтибар ҙа итмәй, икебеҙ ике яҡҡа ҡарап тик ултырабыҙ. Төн уртаһы ауҙы, әммә саҡырылмай килгән ҡунағыбыҙ сығып китергә ашыҡманы. Атайым да үҙенә урын таба алмай, ишекле-түрле йөрөп үрһәләнә. Беҙгә низер әйтергә тип уҡтала ла, уфтанып, шымып ҡала. Теге һөймәлекһеҙҙең түҙеме, сыҙамы бөттө шикелле, ырғып тороп, үҙенең өйөндәгеләй ҡыланып, урын йәйергә тотоноп китте, ҙур яҫтыҡтарҙы гөпөлдәтеп ҡабартып, оло юрғанды түргә һалды, беҙгә тигән түшәк ғүмерҙә булмаганса ишек төбөнә йәйелде. Атай, әсәйебеҙҙән күрмәксе, ошоғаса икебеҙҙе ике яғына алып ятыр ине, был юлы алан-йолан ҡаранып, теләкһеҙ генә тегенең янына ятты ла, беҙҙән оялғандай, юрғаның башынан аша тартты. Гөлбикә лә йоҡламай шымтайған, мин дә рәнйеүҙән шым ғына түгелеп илайым. Ишектән, иҙәндән һалҡын килә, өшөттөрә. Ҡолаҡты томалағанда ла теге ҡатындың иркәләнеп бышылдауҙары, әрһеҙләшеп ухылдауҙары бермә-бер асыҡ ишетелә... Иртәгәһен иртәнсәк ҡатын тартынмай-нитмәй ярым-яланғас йөрөп, хужабикәләй иркен ҡыланып, теләгәнен алған, кисергән ҡәнәғәт йөҙ менән сәй ҡуйып ебәрҙе, аяғөҫтө шапылдап ашанған ыңғайы уны-быны асып тикшерә, тотҡослап ҡарай. Ғәйепле кешеләй ултырған атайым да ауырһынып ҡына телгә килде: "Ҡаршы килмәһәгеҙ, Мәмдүҙә апайығыҙ инде беҙҙә ҡалыр. Күреп тораһығыҙ, беҙгә көн итеүе еңелдән түгел, һеҙгә ҡатын-ҡыҙ тәрбиәһе кәрәк. Тулы ғаиләлә йәшәүгә ни етә! Уға бынан бүтән, әсәй, тип өндәшегеҙ..." Ризалашмаһаҡ, саҡырылмаған ҡунаҡ сығып китер инеме ни? Көтөп тор, үҙен тотошона ҡарағанда тигенгә килмәгәнгә оҡшаған. Гөлбикә ситкә ҡараны, ә мин аяҡтарым осона текәлгәнмен. "Былары ҡаршы килһә, мине һөрөп ҡыуалап сығарырғамы әллә йайың? Булыры булды бит инде, буяуы уңды!" Ҡатын иләмһеҙ иһаһайлап көлөп ебәрҙе. Башымды ҡалҡытып, түр яҡҡа ҡараным. Унда портрет юҡ ине. Асырғанып ҡысҡырып ебәрҙем: "Һүрәт ҡайҙа, ҡайҙа иттең әсәйемде!" Кемдең яманлығы икәнлеге һүҙһеҙ ҙә аңлашыла, ҡайһы арала быны эшләп өлгөргән, тиерһең. Ҡатын сығып китте лә, бер ни булмағандай, битараф ҡиәфәттә алғанын кире индереп урынына элде, үҙе аҡыл өйрәткәндәй һөйләнә өҫтәүенә: "Мәрхүмде йорттоң түренә ҡуйыу килешмәгән эш. Бәлә-ҡаза килеүе бар. Шул ырым иҫемә төшөп китте лә..." "Инде ҡағылаһы булмағыҙ, ул минең әсәйем! Мин уны бер кемгә лә бирмәйем!" тинем кире ҡаҡҡыһыҙ тонда. "Кәрәге бар ине, ен һуҡҡан бисураның!" Был да шайма-шай сәрелдәп әрепләшә. Атайымдың йөҙө ҡапыл үҙгәреп китте: "Ни һөйләйһең һин, Мәмдүҙә, ул бит балаларҙың әсәһе, минең ҡатыным Рыҫбикә..." Үгәй әсәй тырҫ та мы-рҫ баҫып, осаһын уйнаҡлатып, түрбаш яғына сығып китте лә һауыт-һабаны сағыу шауҙырлатырға тотондо. Шулай итеп, атайым әйтмешләй, тулы ғаиләлә йәшәүебеҙ тәмһеҙләшеүҙән башланды...

**(Дауамы бар).**

ИЖАДХАНА

**"Башҡорт энциклопедияһы" ғилми-нәшриәт комплексының генераль директоры, философия фәндәре кандидаты Уйылдан СӘЙЕТОВ менән әңгәмәбеҙ уның 65 йәшлек юбилейы алдынан булды. Ул - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының Фән һәм техника өлкәһендә дәүләт премияһы лауреаты, "Почет билдәһе" ордены кавалеры, СССР-ҙың матбуғат отличнигы. Беҙ энциклопедия тип аталған оло мәғлүмәт китабын ижад итеүселәр эшенең ҡайһы бер нескәлектәре һәм Уйылдан Ғилман улының ғүмер мәлдәре тураһында һөйләштек.**

# ЭШЛӘГӘН ЭШТӘРЕҢ...

## энциклопедияға инерлек булһын

**➔ Рус телендә төҙөлгән һәм донъя күргән "Башкирская энциклопедия" ете томлығының тулыландырылған һәм байытылған башҡортсаға тәржемәһенең 4-се томы ошо көндәрҙә донъя күрҙе. Тәүге һорауыбыҙ күп томлыҡта сағылдырылған шәхестәр тураһында. Был мәғлүмәт тупланмаһына бары тик Башҡортостанда тыуып, ошонда йәшәгән, хеҙмәт иткән фиҙаҡәрҙәр генә индерелдеме?**

- "Башҡорт энциклопедияһы"ның концепцияһын уйлаған сағыбыҙҙа, һүҙлеген төҙөгәндә коллегалар менән шундай уртаҡ фекергә килгәйнек: беҙ Башҡортостанды, башҡорт халҡын, уның тарихын, бөгөнгөһөн Рәсәй, төбәктәр, сит илдәр менән бәйләнештә күрһәтергә тейешбеҙ. Мәҫәлән, 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан әллә күпме башҡорт геройҙарын индерҙек китапҡа. Унан һуң, беҙҙең республиканың сит илдәр менән иҡтисад, мәҙәниәт, фән өлкәләрендә бәйләнештәре бар. Уларҙы ла күҙ уңында тоттоҡ. Әммә китапҡа бөтәһе лә ингән тип әйтә алмайбыҙ. Сөнки энциклопедия һәр ваҡыт күләме менән сикләнгән була. Ете томлыҡ өҫтөндә эш барышында, нисек кенә сәйер тойолмаһын, иң тәүҙә күләмен билдәләп алаһың. Унан ҡала - мәғлүмәтте нисек һайлау һәм нисек һыйҙырыу тураһында уйлана башлайһың. Һайлап алыр өсөн формаль критерийҙар уйлап сығараһың. Энциклопедияға индерә торған кешеләрҙе "һауанан" алып булмай бит. Мәҫәлән, берәй башҡорт кешеһе Рәсәйҙән, йәиһә СССР-ҙың берәй өлкәһендә дәүләт премияһы алған икән, ти, әгәр ул премия беҙҙе ҡыҙыҡһындырған критерийҙарға тап килһә, уны энциклопедияға индермәй хәлебеҙ юҡ. Йәки, тағы бер миҫал. Кеше республиканан ситтә донъяға килеп, Башҡортостанда эшләп, беҙҙең критерийҙарға тап килгән дәүләт наградалары ала икән, уны ла энциклопедияға индерәбеҙ. Шуға ла "Башҡорт энциклопедияһы"на бары тик башҡорт милләтле кешеләр тураһында ғына яҙыла икән тип уйларға ярамай. Тағы бер мөһим әйберҙе әйтеп үтергә кәрәк. Беҙҙең критерийҙарға тулыһынса тап килеп тә, энциклопедия төҙөүселәргә билдәһеҙ ҡалған кешеләр ҙә була, шунлыҡтан, беҙҙең күп томлыҡта башлыса киң билдәлелек яулаған кешеләр тураһындағы мәҡәләләр урын ала.

Хәҙер беҙ "Башҡорт энциклопедияһы"ның электрон вариантын эшләйбеҙ. Ҡағыҙ энциклопедияны һәр ваҡыт күләме сикләй. Электронды - сикләмәй. Әле беҙ электрон "Башҡорт энциклопедияһы"ның руссаһына 18 мең мәҡәлә һалдыҡ. Башҡортсаһына ла, тулыландырып, шул кимәлдә һаласаҡбыҙ. Электрон энциклопедияны хәҙер актуалләштереү юлына күстек. Энциклопедияға



индерелгән геройыбыҙ, мәҫәлән, берәй премия алған икән, шуны теркәп ҡуябыҙ. Беҙгә бындай яңылыҡтарҙы, гәҙиттә, авторҙар үҙҙәре хәбәр итә. Үҙебеҙ ҙә ҡарап барабыҙ.

Энциклопедияға дөрөҫ булмаған мәғлүмәт инмәһен, тип тырышып йөрөгән көнөбөҙ.

**➔ Һеҙҙең эшегеҙҙең ауырлығын үҙегеҙ генә беләһегеҙҙер: кешеләр менән эшләйһегеҙ. "Ниңә мине энциклопедияға индермәнегеҙ?" тигән дәғүәләр күпме, күп булһа, уларға ниндәй яуап биреп ҡотолаһығыҙ?**

- Ундай дәғүәләр бар: "Ниңә мине индермәнегеҙ? Ни эшләп фотографиямды ҡуймаһылар?" - тип әйтеүселәр ҙә осрай. Һаман да шул формаль принциптар ҡотҡарып килә, шулай булырға тейеш тә. Унан һуң, ул формаль принциптарҙы мин уйлап сығармағанмын. Берәй ҡарар ҡабул иткәндә мин үҙебеҙҙең хеҙмәткәрҙәрҙең генә түгел, ғалимдарҙың фекерен дә белешәм. Редколлегия ағзалары һәр яңы мәҡәләне өйрәнә. Улар үҙ тәкдимдәрен яҙып бирә. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, ул тәкдимдәрҙе ҡабул итәбеҙ, йәки итмәйбеҙ. Һуңғыһы осрағында сәбәбен аңлатабыҙ. Баҫмаға әҙерләнгән мәҡәләнең яҙмышын иң аҙаҡҡы ҡултамға - генераль директорҙың ҡултамғаһы хәл итә.

**➔ Яҡшы етәксе үҙ ҡанаты аҫтындағы хеҙмәткәрҙәр менән яҡшы мөнәсәбәт ҡорһа ғына, эш алға баралыр, тип уйлайым. Идара итеү серҙәрегеҙ менән дә уртаҡлашһағыҙсы. Үҙегеҙҙә кешеләр менән дөрөҫ мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын нисек тәрбиәләнегеҙ?**

- Ауыр һорау. Быны мин үҙем дә аңламайым. Кешеләр менән аралашыу стилемде ғүмер буйы барлыҡҡа килтергәнмендер, күрәһең. Ҡайһы бер етәкселәрҙең һәр тишеккә тығылып, насарлыҡ ҡына эҙләүенә аптырайым. Быны менән, беренсенән, хеҙмәткәрҙәренең, икенсенән, үҙенең һаулығын бөтөрә улар, өсөнсөнән, конструктив эшләй алмайҙар. Мин ҡайһы бер ваҡ етешһеҙлектәргә, әгәр улар эшкә зыян итмәй икән, "күҙ йомам". Етәксе стратегия, эштең яҙмышы тураһында уйланырға, дәүер масштабынан сығып фекер йөрөтөргә тейеш. Мин бүлмәмдән сығып барғанда хеҙмәткәремдең эшкә һуңлап килеүен күрһәм дә, өндәшмәйем. "Етди сәбәбе барҙыр, йә берәйһен иҫкәрткәндер", - тим. Кабинеттар буйлап йөрөгәндә коллегаларҙың ҡәйефен белергә тырышам. "Инспектор тикшереүе" үткәрмәйем һәр хәлдә. Кешегә ышанырға кәрәк. Минең өсөн иң мөһиме - эштең һөҙөмтәһе: сифатлы һәм тейешле ваҡытта башҡарылыуы. Хеҙмәткәрҙәрҙе эшкә алыу мәсьәләһенә лә үҙенсәлекле ҡараштамын. Бүтән ерҙә эшләп, тәжрибә туплаған хеҙмәткәргә ҡарағанда, ҡулына яңы ғына диплом алған йәш белгесте эшкә алыуға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Тәжрибәле кеше беҙҙең талаптарға оҙаҡ яраҡлашһа, тәжрибәһеҙҙәр тиҙерәк өйрәнергә тырыша. Тәүге эш урыны булғанға күрә, беҙҙәге ауыр эште "эш шулай була икән", тип кенә ҡабул итә. Уның ҡарауы, төрлө сәбәптәр менән (ғаилә хәле, эште алып бара алмау һ.б.) беҙҙән киткән йәш белгестәр башҡа ерҙә бик яҡшы эшләп алып китә.

**➔ Үтән ғүмер юлығыҙға йомғаҡ яһағанда уның ҡайһы осорон иң сағыуы, иң уңышлыһы тип әйтер инегеҙ?**

- Баймаҡ ауыл хужалығы техникумын тамамлағас,18 йәшлек сағымда, ауылда иҫәп-хисап буйынса бригадир ярҙамсыһы булып эшләнем. Ауылда ике түрә: береһе - бригадир, икенсеһе - мин инем. Яҙҙан көҙгә саҡлы эшләнем шунда. Хисапсы ер үлсәй, кешегә наряд яҙа һәм башҡа эштәр менән була. Шул йылдарым бик сағыу булып иҫтә ҡалған.

Комсомолда 16 йыл да 16 көн эшләнем - был осор иһә тағы ла матурыраҡ хәтирәләргә бай. Ул осорҙоң дүрт йылында Мәскәүҙә Комсомолдың юғары мәктәбендә уҡыным. Унда ла төркөмдөң комсомол сәркәтибе булдым. "Ленинсы" гәзитендә мөхәррир булып эшләгән йылдар ҙа ошо 16 йыл да 16 көн эсенә инә. Ике йыл мәҙәниәт министры булып эшләгән осор матурлыҡ донъяһында йәшәгәндә күргән сағыу бер төш һымаҡ иҫтә ҡалды. Сәнғәт әһелдәре йәшәгән һәм улар тарафынан "Сәйетов йорто" тип йөрөтөлгән Өфө ҡалаһындағы күп ҡатлы бер бина ғына ла һәр ваҡыт ғорурлыҡ хисе уята. Ҡалғаны - ошо урында, энциклопедияла эшләү дәүере. Бында мин 22,5 йыл эшләгәнмен булып сыға. Шуның 21,5 йылы - етәксе вазифаһында. Был йылдар, әлбиттә, иң емешле ғүмер осором. Бына беҙҙең емештәр - кәштәбеҙ тулы китаптар. Элек китаптарҙы Мәскәүҙән яҙҙырып, һатып алып уҡый торғайныҡ. 1988-1991 йылдарҙа Мәскәүҙә Йәмғиәт фәндәре академияһында уҡыным, мәҙәниәт темаһы буйынса кандидатлыҡ диссертациямды яҡланым. Академияның китап магазины була торғайны, бөтөн яңы китаптар шунда килә ине. Үҙгәртеп ҡороу, асыҡлыҡ, демократия, тип, нимә генә яҙманылар - бөтөнөһөн дә тиерлек уҡып өлгөрөргә кәрәк булды. Хәҙер китап уҡып ултырырға артыҡ ваҡыт юҡ, сөнки үҙебеҙ сығарған һәр китапты уҡырға тура килә...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Башҡорт энциклопедияһы"ның төп ойоштороусыһы, барлыҡҡа килтереүсеһе менән әңгәмәләшкәндә үҙемә шундай һығымта ла яһаным: был тормошта йәшәгәндә, эшләгәндә "Башҡорт энциклопедияһы"на инерлек фиҙаҡәрлек, әүҙемлек, тырышлыҡ күрһәтергә кәрәк. Уҡыусыларыбыҙға ла шундай ынтылыш теләйбеҙ.**

***Илгиз ИШБУЛАТОВ* әңгәмәләште.**

✓ *Йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠОЯШ...

## йәшәү сығанағы

■ Асыҡҡан ваҡытта мөһим ҡарарҙар ҡабул итмәгеҙ, тип кәңәш итә белгестәр. Макс Планка институты ғалимдары фекеренсә, асығыу тойғоһо кешене уйланылмаған ҡабалан аҙымдарға этәреүе ихтимал. Бәктиһән, ашҡаҙан буш ваҡытта ҡарар ҡабул итеүгә баш мейеһенең бөтөнләй икенсе өлөшө яуап бирә икән. Ғалимдар емеш-еләк себендә тәжрибә үткәреп ҡараған һәм уның ас ваҡытта хәүефкә барыу механизмы нисек эшләүен асыҡлаған. Ваҡ себендәр инстинктив рәүештә углекислы газдан ҡурҡа, әммә асыҡҡан мәлдәрендә улар газға ҡарамайынса аҙыҡҡа яҡынлаша. Ғалимдар фекеренсә, был нервы системаһының ике өлөшөнөң компромисы һөҙөмтәһе, бындай компромисҡа кешенең нервы системаһы ла һәләтле.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урынды биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештең күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

■ Йель университеты (АҠШ) ғалимдары асыҡлауынса, медитация психик ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән шизофрения һәм аутизмды профилактикалау өсөн иң яҡшы сара булып тора. Невролог Джадсон Брюэр медитация ваҡытында баш мейеһе ҡабығы әүҙемлеген тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән. Оҙайлы ваҡыт медитация менән шөғөлләнеүселәр сит йоғонтоға бирелеп бармай, улар үҙҙәренең хәлен дөрөҫ баһалай ала. Шизофрения һәм аутизм менән яфаланыусы пациенттарға үҙҙәре тураһындағы уйҙар тынғы бирмәһә, медитация бындай уйҙарҙы ситкә ҡыуып, күберәк әлеге ваҡытта тирә-яҡта барған ваҡиғаларға йүнәлтергә мөмкинлек бирә.

■ Бөйөк Британия ғалимдары ҡояштың ультрафиолет нурҙарының тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған. Ҡояшлы көндә асыҡ һауала ҡыҫҡа ваҡытта ғына булыу ҙа артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә икән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар махсус солярийҙа 20 көн буйына "ҡояш ванналары" ала. Әммә уларҙың яртыһы ультрафиолет нурҙар аҫтында ҡыҙына, ә ҡалған кешеләрҙе был нурҙарҙан үҙенсәлекле битлек һаҡлай. Эксперименттың һөҙөмтәләрен тикшереп ҡарағас, шул асыҡлана: тәүге төркөмдәге кешеләрҙең ҡан тамырҙарындағы баҫым башҡаларҙыҡына ҡарағанда түбәнерәк була. Табиптар раҫлауынса, ультрафиолет нурҙар тәьҫирендә тире күҙәнәктәре азот молекулаларын синтезлаусы ферменттарҙы артығыраҡ эшләп сығара. Был матдә ҡанда күтәрелгәс, ҡан тамырҙары киңәйә һәм ҡан баҫымы түбәнәйә. Юғары ҡан баҫымы инсульт һәм инфарктҡа килтереүсе төп сәбәп булыуын иҫәпкә алғанда, "ҡояш ванна"лары кешенең ғүмерен оҙайта.

■ Майами университеты (АҠШ) хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар хәбәрҙән кеше артыҡ ауырлыҡ йыя икән. Бәктиһән, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән борсолоу тойғолары кисерә. Шул рәүешле стресс ҡорбанына әүерелгән кеше юғары калориялы продукттарҙы күберәк ҡуллана башлай. Бындай төркөмгә ҡараусылар насар яңылыҡтарға иғтибар итмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән.

БЕҘҘЕҢ ӘҢГӘМӘ

# ҺӨНӘРИ ХӘҮЕФТӘН ДӘ ИҪКӘРТӘБЕҘ



**Социаль страховка бөгөн дәүләттең социаль сәйәсәтен тормошҡа ашырыу сараларының береһе булып тора. Рәсәй Федерацияһы Социаль страховка фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса төбәк бүлексәһе тарафынан ул ниндәй йүнәлештәр буйынса үтәлә һәм ниндәй эштәрҙә сағыла икән? Тәү сиратта ошо һорауға яуап табыу маҡсатынан дәүләт учреждениеһы идараһыһы Марат ЛАТИПОВҡа мөрәжәғәт иттек.**

- Әлеге ваҡытта төбәк бүлексәһе бер нисә йүнәлеш буйынса эшләй: ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ һәм әсәлек менән бәйле мотлаҡ социаль страховкалау, - тип башланы һүҙен Марат Мөьмин улы. - Был төр страховкалау буйынса эшкә рәсми урынлашыусы һәм страховкаланыусы булып иҫәпләнгән граждандарға ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ буйынса түләүҙәр - больничныйҙар, йөклөлөк һәм бала табыу менән бәйле пособие - декрет аҡсалары, йөклөлөктөң иртә срогында ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһына иҫәпкә торған өсөн, бала тапҡандан һуң бер тапҡыр бирелә торған һәм баланы йәш ярымғаса ҡарау өсөн пособиелар түләнә. Ерләү өсөн тәғәйенләнгән түләүҙәр ҙә ошо иҫәптән башҡарыла.

Былтыр был төр страховкалау буйынса төбәк бүлексәһе сығымдары 11 миллиард һумдан ашыу тәшкил итте. Уларҙың ҙур өлөшөн - 6 миллиард һумдан ашыуын, әсәлек һәм балалыҡка бәйле түләүҙәр алып тора. 4,3 миллиард һумдан ашыу сумма ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ (больничный) өсөн түләүҙәргә йүнәлтелде. Быйылғы йылдың беренсе яртыһында ошо уҡ сығымдарҙың күләме 7 миллиард һумдан ашыу тәшкил итте.

Профессиональ хәүефтән страховкалау Фондтың тағы бер мөһим функцияһы булып тора һәм ул эшләүсе граждандарҙы дәүләт яҡлауының төп формаларының береһе. 2015 йыл йомғаҡтары буйынса производствола бәхетһеҙлек осраҡтары һәм һөнәри сирҙәр буйынса мотлаҡ социаль страховка сығымдары 1 миллиард 100 миллион һум булһа, быйылғы яртыйылда 500 миллион һум самаһын тәшкил итте. Социаль страховка фонды производствола зыян күреүселәргә ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ буйынса, һауыҡҡанға тиклем йәки эшкә яраҡһыҙлыҡ билдәләнгәнсе, уртаса эш хаҡының 100 проценты күләмендә пособие түләй. Зыян күреүселәр, теге йәки был кимәлдә хеҙмәт һәләтен юғалтыусылар, зыян дәрәжәһенән сығып, бер тапҡыр бирелә торған страховка түләүе менән тәьмин ителә. Һәр зыян күреүсе өсөн, күрһәтмәләр булғанда, медицина-социаль экспертиза учреждениелары тарафынан Реабилитация программаһы эшләнә, уға медицина, социаль һәм профессиональ реабилитация буйынса кәңәштәр инә.

Ошо программаға ярашлы, производствола зыян күреүселәрҙе Фонд шифахана-курорт, реабилитация үҙәктәренә путевкалар менән тәьмин итә, дарыуҙарға тотонолған сығым хаҡын ҡайтара. Шулай уҡ аяҡ һәм ҡул протезларын, аяҡ кейемдәрен һәм ортездарҙы эшләү, ремонтлау, күҙ, ҡолаҡ протездарын эшләү буйынса сығымдарҙы ҡаплай. Хәрәкәт мөмкинлектәре сикләнгән категория өсөн махсус транспорт саралары - ҡул менән идара ителеүсе автомобилдәр менән тәьмин итеү ҙә ҡаралған. Бындай автомобилдәр 7 йыл һайын алыштырыла.

➔ **Эш урынында бәхетһеҙлек осраҡтарын, һөнәр буйынса сирҙәрҙе иҫкәртеү эшмәкәрлеге Һеҙҙең учреждение тарафынан да алып барыламы?**

- Әлбиттә, Социаль страховка фонды страховкалаусы ролен башҡарып ҡына ҡалмай, иҫкәртеү сараларына финанс яҡтан ярҙам да итә. Был предприятиеларҙың хеҙмәтте һаҡлау буйынса сараларҙы тормошҡа ашырыуҙа иктисади ҡыҙыҡһындырыу механизмы булып та тора, сөнки программа шарттары буйынса Фонд предприятиеларға күсерелгән страховка иғанәләренең 20 процентҡа тиклем өлөшөн производствола бәхетһеҙлек осраҡтарын һәм һөнәри хәүефте түбәнәйтеү буйынса сараларға файҙаланырға мөмкинлек бирә. Быйыл ошо маҡсатта предприятиеларға бүленгән аҡса 250 миллион һум самаһы тәшкил итәсәк.

➔ **Инвалидтар, йәғни льготалы категория граждандарын хеҙмәтләндереү нисек тормошҡа ашырыла?**

- Был категория тураһында хәстәрлек күреү ҙә эшмәкәрлегебеҙҙең айырылғыһыҙ өлөшө булып тора. Төбәк бүлексәһе техник реабилитация саралары менән, шул иҫәптән протез-ортопедия ҡорамалдарын ремонтлауҙы ла индереп, тәьмин итеү буйынса федераль вәкәләттәрҙе тормошҡа ашырыу бурысын 2015 йылдың башынан үҙе башланы. 2014-2015 йылдар өсөн инвалидтарҙың ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн өҫтәмә финанслау мәсьәләһенең ыңғай хәл ителеүе Фондҡа былтыр льготалы категория граждандарын реабилитациялауҙың техник саралары һәм протез-ортопедия ҡорамалдары менән 97 процентҡа тәьмин итеү мөмкинлеген бирҙе.

Бынан тыш, льготалы категория граждандарын шифахана-курорттарға путевкалар менән тәьмин итеү һәм уларға ҡала-ара транспортында дауаланыу урынына бушлай барып ҡайтыуҙы ойоштороу ҙа беҙҙең ҡарамаҡта. Бының өсөн быйыл федераль бюджеттан 94 миллион һум күләмендә ассигнование бирелде. Үкенескә күрә, был сумма ихтыяжды бары тик 27 процентҡа ғына ҡәнәғәтләндерә. Путевкаларҙы бүлеү ҡәтғи рәүештә, инвалидтың ауырыу профилен иҫәпкә алып, ғариза биреү көнөнән сығып, сират буйынса тормошҡа ашырыла. Былтыр йыл дауамында льготалы категория граждандарына һәм уларҙы оҙатып барыусыларға 4728 путевка бүленде, шул иҫәптән инвалид балаларға һәм уларҙы оҙатып йөрөүсе ата-әсәләргә - 932. Быйылға 4267 путевка бүленеүе ҡаралған.

➔ **2006 йылдан "Һаулыҡ" өҫтөнлөклө милли проекты тормошҡа ашырыла. Социаль страховка фонды уны тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашамы?**

- Был проект сиктәрендә Фонд тиҫтә йыл инде "Бала табыу сертификаты" программаһын тормошҡа ашыра. Программаның маҡсаты - ҡатын-ҡыҙҙарҙы йөклөлөк, бала табыу һәм сабыйҙың поликлиника күҙәтеүе үтеүе осоронда сифатлы һәм бушлай медицина ярҙамы менән тәьмин итеү. Был программа буйынса һаулыҡ һаҡлау учреждениелары алған аҡсалар ҡорамалдар, медикаменттар, кәрәкле башҡа әйберҙәр алыуға, шулай уҡ медицина хеҙмәткәрҙәренә өҫтәмә түләүҙәр өсөн тотонола. Былтыр 91 медицина учреждениеһы менән килешеү төҙөлөп, уларға 590 миллион һум аҡса бүленде, быйылғы йылға 568 млн һум бүлеү ҡаралған.

➔ **Мотлаҡ социаль страховкаһы иреклеһенән нимә менән айырыла?**

- Тәү сиратта, был айырма уларҙың атамаһында уҡ күренә - береһе мотлаҡ, икенсеһе - ирекле һәм кеше уны ирекле хәл итә. Эшкә рәсми урынлаштыусы автоматик рәүештә социаль страховканың мотлаҡ ике төрө: ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ һәм әсә булыу сәбәпле; производстволағы бәхетһеҙлек осрағы һәм һөнәри ауырыуҙар буйынса страховкаланған тип иҫәпләнә

Эшкә кеше ялламаусылар, шул иҫәптән, шәхси эшҡыуарҙар ҡануният буйынса Социаль страховка фондында теркәлеп, "үҙе өсөн" страховка иғанәләре түләргә бурыслы түгел. Был осраҡта улар эшләмәүсе граждандарға тиңләштерелә һәм әсәлеккә бәйле түләүҙәрҙе халыҡты социаль яҡлау органдарынан ала. Әммә, Социаль страховка фонды менән мотлаҡ социаль страховка буйынса ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ һәм бала табыуға бәйле ирекле хоҡуҡи мөнәсәбәт булдырып, улар эшләп йөрөүсе граждандар кеүек үк өҫтәмә пособиелар алыу хоҡуғына эйә була. Был осраҡта пособие күләме Федераль закон билдәләгән минималь эш хаҡы күләменән сығып иҫәпләнә. Ләкин был категорияға инеүселәргә закон производстволағы бәхетһеҙлек осрағынан һәм һөнәри ауырыуҙарҙан страховкалау ҡаралмаған.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

ТОРМОШ - ҠУЛАСА

**Магазиндан сығып ҡына бара инем, ишек төбөндә бер таныш йөҙҙө сырамытып туктап ҡалдым. Кем әле был... "Сәләм!" - уныһы ҡул биреп тороп күреште. Артынса сәсен бейек итеп өйөп ҡуйған ҡатыны тыҡ-тыҡ баҫып, хушбуйының татлы еҫтәрен аңҡытып үтеп китте. Һуң, был бит... Мин туҡталышҡа ары атланым, сөнки ҡараны ла ҡатты был иремә, тип туҙыныр ине бисәгенәһе, күр ҙә тор. Азат бит был. Альбинаның элекке егете.**

# ҠАТЫН-ҠЫҘ ТОРМОШОНАН...

## бер күренеш



Альбина менән беҙ бер ятаҡ бүлмәһен биләнек. Зәһәр һылыу булды ул, артынан бер көтөү егет йөрөгән булды, ә бүлмәләшем әллә ҡуктән, әллә ерҙән егет күҙләне. Кем генә ярар ине икән уға, бынау Азат һынлы Азатты ла тиңһенмәгәс.

Үҙем автобуста талғын ғына сайҡалып ойоп киттем. Һуң, нисек ярата ине уны Азат! Һоҡланғыс итеп күңелен яуларға тырышты был буйға артыҡ оҙон булмаған, тәҫ-башҡа ла артыҡ күҙгә бәрелмәгән егет. Альбина уны ишектән ҡыуһа, тәҙрәнән инә, тәҙрәнән ҡыуһа, ишеккә үрелә, ғибрәт инде. Ул тәҙрә төбөндә күпме ҡупшы рауза сәскәләре аунаны. Азат бүләк итә, Альбина тәҙрәнән генә елгәрә.

- Азат оҡшамаймы, оҡшамаһа, иплән кенә һөйләш, уйынан дүндер, - тим мин уға сәй артында сөкөрләшкән арала.

- Эш бит оҡшау-оҡшамауҙа түгел, белдеш, - тип ихахайлай миңә сибәр Альбина. - Беләм: арыу егет, уҡымышлы, эшкә шәп, әммә кеҫәһе йоҡа. Йәнә холҡо йомшаҡ, мин улай артымдан өлтөрәп йөрөгәндәрҙе эшкә һанамайым ул...

Ысынлап та шулай булды шул. Уның өсөн арыу егет - ул ҡиммәтле бүләкле егет, кәбәндәй машиналы егет, алтын балдаҡлы егет, тәтәй егет... Бай, мәгәр тәтәй бушҡыуыҡ егеттәре нишләптер бер нисә осрашыуҙан яҙғы епшек ҡар ише, юҡ була торҙо. Азаттың ныҡ зытына тейҙеме, ҡатыраҡ бәреллеме, бер ваҡыт егет зым-зыя юҡ булды. Күренмәҫ, килмәҫ булды. Альбина тантана итте, йәнәһе, еңде Азатты, юлынан ырғытты сәүек ише аяҡ араһында уралған егет ишаратын. Ә ул, ана бит, юғалмаған, кейеме лә "да-

стуйын" ғына, ҡатыны ла, Альбина кеүек үк зәһәр һылыу булмаһа ла, тәҫ-башҡа төшөп ҡалғандарҙан түгел. Етмәһә, эсе лә кәпәйеп киткән, бала көтәләрҙер инде.

Уйлана барып, туҡталышымды үтеп китә яҙғанмын. Маршруткянан һикереп төшкән ыңғайы эргәнән елдереп үтеп киткән ҡара быялалы бейек, затлы машинаға күҙ һалдым. Альбина ла елдерә шикелле ошондай сыңғыһау, зиннәтле машинала. Үҙем күрҙем, быltырҙары. "Һаумы-шәпме", тип һөйләшеп торғанда, яңылыҡтарың юҡмы, тигәс,

ирендәрен маһайыулы бөрөштөрөп, "фатир алдым", тигәйне. Үҙе генә алмағандыр ҙа, шыттыра, ярҙам иткәндәрҙер. Быныһы инде фараз, сөнки улай-былайы, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ тураһында, барыбер ишетелеп тора. Ҡатын-ҡыҙ донъяһы ләститкә тулған, әйтәгүр. Шул аҙаҡҡы күргәнемдә Альбинаның һылыу йөҙөндә күренер-күренмәҫ һырҙарҙы абайлағайным - ул да ҡартая, күпме генә һыланып-һыйпанмаһын, барыбер тәбиғәт үҙенекен итә икән ул. Кеше бер тапҡыр ғына сәскә ата, бер генә тапҡыр ысын мөхәббәте осрай - ҡайһы саҡ абайлап та өлгөрөп булмай, тиҙәр, ә ул инде күптән, ел осорған шар кеүек, ситкә тартылған.

Бер уйлап ҡараһаң, Азатҡа яҙған булһа, бәхетле булыр инеме икән Альбина? Булмаҫ ине, тип уйлап ҡуям, сөнки ул бөтөнләй икенсе нәмәләр тураһында хыялланды: ҡиммәтле машина, ҡупшы кейем, һуш китерлек йортйыһаз, ҡиммәтле биҙәнеү әйберҙәре. Азат та бәхетле була алмаҫ ине, тим. Бәхетле итә алмаҫ ине Альбинаны. Ә былай - Азат та ҡәнәғәт, Альбинаның да күңеле туҡ.

Фатирымдың ишек төбөнә етеп, һаҡ ҡына туҡылдатам. Беләм, балам йоҡлай, йоҡоһо бүленмәһен, ишек асыусы аяҡ осlап ҡына килеңә ысҡындырһын да мине индерһен. Һәр кемдең үҙ бәхет үлсәме: кемдер өсөн байлыҡ - зиннәтле үә зауыҡлы йыһаз, кемдер өсөн мышнап йоҡлаған балалы гәҙәти, әммә бөтөн донъя. Тыныс булһын донъялар...

**АЙГӘЛӘМ.**

МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ



# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?

### Өйгә кем хужа?

Был хәлде миңә әсәйем мәрхүмә һөйләгәйне. Минең олатайымдың атаһы Әҙеһәм тигән кеше бик бай булған. Уның урман тулы солоғо, баҡсала 300 баш умартаһы, көтөү-көтөү малы, ике бисәһе булған. Ҡатындары, кис еттеме, тышҡа сығырға ҡурҡа торған булғандар. Өй эргәһендә келәт булған. Төндәрен келәт эсендә сулпы сыңы, гөбө шапырлауы, май таҫҡылдаған тауыш ишетелә икән. Келәттең эйәһе барлығын барыһы ла белгән. Шуларҙың тауышынан ҡурҡа икән Әҙеһәмдең бисәләре лә һәм иренән был келәтте һатыуын һорайҙар икән.

Ошо уҡ ауылда ярлы ғына йәшәүсе Әйүп тигән кеше ошо келәтте өй итеп һатып ала. Әҙеһәм кисен тәһәрәт алырға тип тышҡа сыҡһа, келәт урынында көлтә кеүек ут ҡалҡып, Әйүп һатып алған йортҡа инеп юғала.

Ошонан башлап Әйүп күтәрелә башлай: малы ишәйә, ҡорто үрсей, нимәгә тотонһа, шул ҡулынан килә. Ҡайҙа барһа ла юлы уңа, нимә эшләһә лә, ыңғай килеп сығып ҡына тора.

Хәҙер инде бик хәлле кеше булып китә Әйүп. Әҙеһәмдең эштәре, киреһенсә, хөртәйә башлай. Йә ҡортон урлайҙар, йә күсе китә, йә айыу баҫа, йә малы батып үлә, йә ҡаянан оса. Шулай ҡазалана торгас, тамам бөлгөнлөккә төшә Әҙеһәм. Аҙаҡ эштең ниҙә булғанын уға ҡарттар аңлата. Тик һуң була, Әҙеһәм ярлы-ябаға рәтендә тороп ҡала.

Күрәһең, келәттең эйәһе хужалыҡ ҡотон да тотоп торғандыр. Тимәк, ҡот келәтенә эйәреп, яңы хужаға киткән.

**Рауил АСИҒОЛОВ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Икенсе аҙым - бәйләнеш булдырығыҙ һәм тыңлағыҙ

Был - психологик бүленеш стадияһы. Бөйөк аҡыл эйәләре, философтар, теологтар, күҙ быуыусылар һәм ғалимдарҙың ҡарашы, фекерҙәре айырылһа ла, улар барыһы ла Йыһанда берҙәм Ижади интеллект булыуын таный. Был интеллект йәки Аң - барлыҡ фекерҙәрҙең сығанағы.

Һеҙҙең интуицияғыҙ һәм эске күрһәтмәләрегеҙ Юғары аңдан төпкә аң аша килә. Шуны иҫегеҙҙән сығармағыҙ - төпкө аң ике яҡтан да асыҡ. Бер яҡтан уға Юғары аңдан ижади идеялар килһә, икенсе яҡтан ул аңығыҙҙан инструкциялар ала. Мәғлүм булыуынса, аң беҙҙе бик йыш ысынбарлыҡты яңылыш ҡабул иттереп, артабан яңылыш ғәмәлдәр ҡылдырып, хаталандыра. Асылығыҙҙа ятҡан Ижади Интеллектығыҙ менән бәйләнеш булдырыу өсөн аңығыҙҙы тынысландырырға кәрәк. Әйтерһең дә, һеҙ үҙегеҙ өсөн эшләй башлауын көткән ҡеүәтле электр динамо-машинаһы булған ҙур Электр станцияһына эйә һәм уны контроллəйһегеҙ. Был көскә аңығыҙға инергә рөхсәт итеү менән, тормошоғоҙ иҫ киткес төйоғлар менән тулыр. Бының нисек эшләүен аңларға тырышырға кәрәкмәй. Бары тик был көстөң барлығын һәм уның барлыҡ ауырлыҡтарҙы һәм ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығырға ярҙам итеп, юл күрһәтеп торғанын белеүегеҙ ҙә етә. Бер нисә минут шул хаҡта уйланығыҙ: ҡояшты ла, болоттарҙы ла, планетаны һәм диңгеҙҙәрҙе лә хәрәкәткә килтергән Көс һеҙҙә лә йәшәй. Уның камил икәнлеген онотмағыҙ. Аңығыҙға уның эсенә инеп сумырға рөхсәт итегеҙ. Уға һеҙҙең асылығыҙға инеп, аңығыҙҙы асыу мөмкинлеген бирегеҙ. Ошо сикһеҙ камил көс менән бер бөтөн икәнлегегеҙҙе аңлағыҙ.

Әгәр ниндәйҙер проблеманы йәки мәсьәләне хәл итергә кәрәк икән, уны ҡыҫҡа ғына итеп тәҙегеҙ. Сөнки һеҙ бөтөн нәмәне белгән Интеллект менән эш итәһегеҙ һәм уға барыһын да тәсфирләп аңлатып тороуҙың кәрәге юҡ. Был, киреһенсә, һеҙҙең файҙаға ғына. Уйығыҙҙы йыһанға ебәрегеҙ. Аңығыҙ радар кеүек эшләһен һәм уның йоғонтоһон тойоғоҙ. Алған барлыҡ күрһәтмәләрҙе һәм һабаҡты ҡабул итергә әҙер, асыҡ булығыҙ.

Үҙегеҙҙе иғтибар менән тыңларға өйрәтегеҙ. Әйтеп кителгәнсә, ҡайһы бер ваҡыт, әгәр проблемалар һәм ихтыяждар тураһында уйлайһығыҙ икән, медитацияға инеү ауыр. Ошо өс аҙымдан торған медитацияны ҡулланғандан торған медитацияны үҙләштергәндә, барлыҡ ваҡ деталдәрҙе иғтибарҙан ситтә ҡалдырaһығыҙ, артабан инде уларҙан арынаһығыҙ һәм үҙегеҙҙе тыңлайһығыҙ. Медитация - аңдың буш хәбәр һөйләүен тыңлау урынына эске тауышығыҙҙы тыңлау ваҡыты ул.

Тәжрибә туплағас, үҙегеҙҙе тыңлауығыҙҙы аңларһығыҙ. Нәсихәттәр интуиция аша киләсәк. Ҡеүәтле этәргес алып, һеҙ эстән нимәлер эшләргә көс аласаҡһығыҙ. Был - һеҙҙең йүнәлешегеҙ. Уға ышанып, уның артынан барығыҙ. Ул бер ваҡытта ла яңылышмай, сөнки төпкө аңығыҙ Юғары аң ярҙамында барлыҡ нәмәне белгән Интеллект менән бәйләнгән.

Оҡшамаған, һеҙҙең фекерегеҙгә тап килмәгән өсөн генә идеяларҙан йәки ынтылыштарҙан баш тартмағыҙ. Аңлы сиселеш йәки аҡыллы аң эҙләүҙән алыҫ торогоҙ. Алынған нәсихәттәргә эйәрегеҙ. Ҡайҙалыр барырға йәки нимәлер эшләргә ҡушалар икән - барығыҙ һәм эшләгеҙ. Ҡалғаны тураһында төпкө аң хәстәрләйәсәк. Ул һеҙгә файҙалы кешеләр менән осрашырға, кәрәкле хәл-шарттарҙы ҡулланырға ярҙам итәсәк.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



### 7 НОЯБРЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Парад 1941 года на Красной площади" (12+).
10.10 "Жить здорово!" (12+).
11.05 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Таинственная страсть". 9-я и 10-я серии. Драматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
02.40, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Родительский день". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Гражданин никто". 9-11 серии. Детективный сериал (12+).
00.05 "Специальный корреспондент" (12+).
01.05 "Сваты". Сериал (12+).
03.15 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Робинзон Крузо". Сериал (16+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж".**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 01.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.15 "Бай" (12+).**
**19.45 "Сәнгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Малый бизнес" (12+).**
**22.00 "Спортбар" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.) (12+).**
**23.15 "Гори, гори, моя звезда". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.) (12+).**
**02.30 З.Атнабаева. "Прерванная свадьба" (12+).**

### 8 НОЯБРЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.20 "Про любовь" (12+).
13.25, 14.15, 15.15, 01.30 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Таинственная страсть". 11-я и 12-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Крутой маршрут Василия Аксенова" (12+).
02.20, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Реликт". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Гражданин никто". 12-14 серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Команда" с Рамзаном Кадыровым" (12+).
01.10 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
03.20 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Робинзон Крузо". Сериал (16+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Малый бизнес" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күнелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (12+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Лада" (Тольятти).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Орел девятого легиона". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.30 Р.Солнцев. "Наш одуванчик" (12+).**

### 9 НОЯБРЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Таинственная страсть". 13-я, заключительная, серия (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Марлен Дитрих и Грета Гарбо. Ангел и божество" (16+).
02.15, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.05 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Панацея". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут" (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Гражданин никто". 15-я и 16-я серии (12+).
23.05 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
03.20 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Следопыт" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Это мы!" (12+).**
**18.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәнгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**21.00 "Власть отвечает".**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Девятки". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Бәхетнамә" (6+).**
**02.15 Т.Ганиева. "Тамарис" (12+).**

### 10 НОЯБРЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15, 01.20 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Юбилейный вечер Александра Зацепина".
21.00 "Время".
21.30 Футбол. Товарищеский матч. Сборная России - сборная Катара.
23.35 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "На ночь глядя" (16+).
02.10, 03.05 "Агент национальной безопасности". Сериал (16+).
03.00 Новости.
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.40 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Извозчик". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Поединок" (12+).
23.00 Концерт, посвященный Дню сотрудника органов внутренних дел Российской Федерации. Прямая трансляция из Государственного Кремлевского Дворца.
03.55 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Современник" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай бакса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Малый бизнес" (12+).**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Кодекс чести". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 "Бәхетнамә".**
**02.30 И.Юмагулов. "Нәркәс" (12+).**

### 11 НОЯБРЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Про любовь" (16+).
13.20, 14.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
14.00 Новости.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым.
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон. Музыкальный конкурс (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 "Вуди Аллен". Док. фильм (12+).
02.25 "Тора! Тора! Тора!" Худ. фильм (12+).
05.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55, 01.25 "Сваты". Комедийный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Злая любовь". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-ПФО".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Юморина" (12+).
23.15 "Мороз по коже". Мелодрама (12+).
03.35 "Дар". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Неповторимый Эдди". Сериал (16+).**
**11.00 "Это мы!" (6+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Здоровое решение" (12+).**
**12.30 "Аксакал" (12+).**
**13.15 "Күнелем моңдары" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце".**
**16.45 "Власть отвечает" (12+).**
**17.15, 20.45 "Полезные новости" (12+).**
**17.45 "Замандаш".**
**18.00 "Йома".**
**19.00 Алтын тирма".**
**19.45 "Сәнгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (6+).**
**21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Башкорт йыры" (12+).**
**23.30 "Миф". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Р.Киньзябаев. "Одолжи мне жеребца" (12+).**

### 12 НОЯБРЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.35, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.35 "Улица полна неожиданностей". Худ. фильм.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.40 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Маргарита Терехова. Одна в Зазеркалье" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.20 "На 10 лет моложе" (16+).
14.10 "Голос". Специальный выпуск (12+).
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Ледниковый период". Новый сезон.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
22.40 "МаксимМаксим" (16+).
23.50 "Подмосковные вечера" (16+).
00.45 "Миллион способов потерять голову". Комедия (18+).
02.55 "Добро пожаловать в Муспорт". Худ. фильм (16+).
05.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.05 "Время радости". Худ. фильм (12+).
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Семейный альбом" (12+).
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Аншлаг и Компания!" (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Деревенская история". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Субботний вечер".
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Разбитые сердца". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
01.00 "Паутинка бабьего лета". Мелодрама (12+).
03.00 "Марш Турецкого-3". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00, 12.30, 19.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Леонардо-2".**
**09.30 "Вьется над крышей дымок". Док. фильм (6+).**
**10.00 "Здоровое решение" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**13.00 "Бай бакса" (12+).**
**13.30 "Үткән гүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань).**
**19.30 "Замандаш" (12+).**
**19.45 "Сәнгелдәк" (0+).**
**20.00 "Колесо времени" (6+).**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башкорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Soundtrack-концерт" в исполнении Национального симфонического оркестра Республики Башкортостан.**
**01.15 "Пуленепробиваемый". Худ. фильм (12+).**

### 13 НОЯБРЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.50, 06.10 "Принц Персии: Пески времени". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
08.10 "Смешарики. ПИН-код".
08.20 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки".
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Открытие Китая".
12.40 "Теория заговора" (16+).
13.40 "ДОстояние РЕспублики: Алла Пугачева".
16.30 "Лучше всех".
17.50 "Точь-в-точь". Новый" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Клуб веселых и находчивых". Высшая лига. Второй полуфинал (16+).
00.40 "Человек с железными кулаками". Боевик (18+).
02.30 "Марли и я: Щенячьи годы". Комедия (16+).
04.00 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1
05.00 "Возвращение "Святого Луки". Худ. фильм.
07.00 "Мультутро "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Цена любви". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Синяя птица". Всероссийский открытый конкурс юных талантов.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Дежурный по стране".
01.00 "Вдовий пароход". Драма (12+).
03.00 "Без следа". Детективный сериал (12+).
04.05 "Смехопанорама".

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Приключения Папируса".**
**08.30 "Мечты" (6+).**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Фанташ".**
**11.30 "Байтус" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (12+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башкорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (6+).**
**15.30 "Автограф" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**17.15 "Мир театра" (12+).**
**18.15 "Стеклянный пассажир". Худ. фильм (12+).**
**19.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.30 "Это мы!" (6+).**
**20.00 "Байык-2016" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.00 "Попутчик". Худ. фильм (16+).**

**✓ Матчтың өс осоронда ла юлаевсылар ҡунаҡтар ҡапҡаһы алдында ҡойон уйнатты. Һөҙөмтәлә беренсе осорҙа - 2, икенсеlә - 3 һәм өсөнсөлә тағы ла бер гол индерҙе. Дөйөм уйын һөҙөмтәһе юлаевсылар файҙаһына - 6:0.**



СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

# КӨТӨП АЛЫНҒАН ТАМАШАЛАР



**Өфөлә башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары ҡатнашлығында "Башҡорт йыры" телевизион конкурсының гала-концерты үтә. Быйыл ул 2-3 декабргә тәғәйенләнгән. Уны Башҡортостан юлдаш каналы Яңы йыл төнөндә күрһәтәсәк.**

Ойошторорусылар билдәләүенсә, юбилей программаһына һайлап алыу һәм беренсе өс турҙы үтеүселәр ҡатнаша. Беренсе турҙа бәйгеселәр - эстрада, икенсе турҙа - башҡорт халыҡ йыры, өсөнсөһөндә ретро йыр башҡарҙы. 70 ҡатнашыусы араһынан 10 иң яҡшы йырсы билдәләнгән. "Башҡорт йыры"ның йомғаҡлау концертында йылдың иң яҡшы йыры ла билдәләнәсәк. "Башҡорт йыры" - республикала көтөп алынған тамашаларҙың береһе. Ул 2010 йылдан үтә. Башҡортостан юлдаш каналының был проекты республиканың мәҙәни тормошонда үҙ урынын тапты, унда республиканан ситтә йәшәүсе таланттар ҙа ҡатнаша.

Ә "Байыҡ-2016" бәйгеһе үҙенең еңеүселәрен 12 декабрҙә иғлан итәсәк. Ҙур бейеү байрамы "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үтәсәк. Концертта, һәр ваҡыттағыса, республиканың иң яҡшы бейеүселәре сығыш яһаясаҡ. Программала "Байыҡ-2016" республика телевизион конкурсы финалистары, "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамбле, Стәрлетамаҡ дәүләт филармонияһының бейеү театры, Учалы филармонияһының "Уралтау" бейеү ансамбле, шулай уҡ Төньяҡ Осетия - Алания, Хакасия, Абхазия, Чечнянан, Санкт-Петербург ҡалаһынан ҡунаҡтар ҡатнашасаҡ.

# ЕҢЕҮҘӘР ТЕЛӘЙБЕҘ!

**Мәскәүҙә "Miss Asia. Russia" Бөтә Рәсәй милләт-ара гүзәллек фестиваленең һайлап алыу туры уҙҙы. Бәйге йомғаҡтары буйынса ике башҡорт һылыуҡайы Илнара Нияҙғолова һәм Эльмира Вәлиева 13 финалсы иҫәбенә инде.**



Илнара Нияҙғолова - Мәскәүҙәге "Йәсмин" һылыуҡай студияһы тәрбиәләнеүсеһе, "Мәскәү һылыуҡайы-2016" III башҡорт һылыуҡайҙары конкурсы еңеүсеһе һәм "Һылыуҡай-2016" республика матурлыҡ бәйгеһендә икенсе урынға лайыҡ булыусы. Илнара Ейәнсура районында тыуып үҫкән, әле И.М.Сеченов исемендәге Беренсе Мәскәү дәүләт медицина университетында белем ала. Эльвира Вәлиева - профессиональ рәссам, фотограф, модель, сәнғәт уҡытыусыһы, Мәскәүҙәге "Йәсмин" һылыуҡай студияһы вәкиле, Магнитогорскиҙа тыуған, Мәскәүҙә эшләй.

- Һайлап алыу турында ҡатнашыусыларҙың барыһы ла сибәр ине. Әммә беҙ уларҙың шәхси сифаттарына, һәләттәренә һәм үҙ мәҙәниәтен белеүҙәренә лә иғтибар иттек. Башҡорт ҡыҙҙары араһында һайлап алыу айырыуса ҡатмарлы булды - береһенән-береһе матурҙар. Илнара тыйнаҡлығы менән әсир итһә, Эльвира көслө характерлы булыуы менән хәтерҙә ҡалды. Икеһе лә үҙҙәрен бик ышаныслы тотто, - тип һөйләне "Мисс Азия. Рәсәй" конкурсы директоры һәм жюри ағзаһы Елена Мардаева.

Фестиваль-конкурс шарттары буйынса, ҡатнашыусылар конкурс һынауҙарында үҙҙәрен күрһәтергә тейеш: милли кейемдә сығыш яһау, милли аш-һыу менән таныштырыу, спорт ярыштарында, интеллектуаль конкурста, Мода аҙналығында ҡатнашыу. Ҡыҙҙарҙың фестивалдең реклама кампанияларында, хәйриә сараларында ҡатнашыуы ҡаралған. Интернет-тауыш биреү йомғаҡтары буйынса фестивалдең сайтында "Тамашасылар һөйөүе призы" номинацияһында бер еңеүсе билдәләнә. "Miss Asia. Russia" бөтә Рәсәй милләт-ара гүзәллек фестиваленең финалы 10 декабрҙә Мәскәүҙә "Вегас Сити Холл" концерт залында уҙа.

# "ТАМЫР"ҘАРҘЫҢ ЛАЙЫҠЛЫ БҮЛӘГЕ



**"Тамыр" телеканалы юлдаш, кабель һәм интернет телевидениеһы өлкәһендә "Алтын нур" милли премияһы лауреаты исеменә лайыҡ булды. Премия Мәскәүҙәге "Геликон-Опера" театрында тапшырылды.**

"Балалар телеканалы" исеменә "Тлум HD", "Ginger HD" һәм "Тамыр" телеканалдары дәғүә итте. Һөҙөмтәлә беҙҙең телеканал еңеүсе тип танылды. "1990 йылдарҙа үҙәк каналдарҙа балалар өсөн тапшырыуҙар юҡҡа сыҡҡас, Башҡортостанда "Тамыр" барлыҡҡа килде, -тине легендар диктор, Рәсәйҙең халыҡ артисы Ангелина Вовк, статуэтканы тапшырып. - Төбәктәр ауырлыҡтарҙы йырып сығырға көс тапты һәм балалар өсөн һәйбәт тапшырыуҙар төшөрә башланы. Баһалама ағзалары "Тамыр" телеканалының үҙенә генә хас йөкмәткегә эйә булыуына иғтибар итте".

- Был - беҙҙең телеканалға бик юғары баһа, - тип һөйләне "Тамыр" телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина. - Төбәк телевидениеһын ойоштороу бер ҡасан да еңелдән булманы. Күрсәк башланғас, хәл тағы ла ҡатмарлашты. Әммә беҙ: "Балалар тормошта ла, телевизорҙа ла күрсөктө һиҙергә тейеш түгел; бала саҡ бәхетле булырға тейеш; беҙ, өлкәндәр, барыһын да эшләй алабыҙ", - тигән һүҙҙәрҙе көн һайын доға урынына ҡабатлайбыҙ...

"Алтын нур" - тематик каналдар араһындағы конкурс. Уның маҡсаты - тематик программалар һәм каналдар булдырыу өлкәһендә сифат стандарттарын, телеканалдарҙы билдәләү, шулай уҡ индустрияны артабан үҫтереүгә булышлыҡ итеү. Милли премияның жюри ағзалары - илебеҙ журналистикаһы оҫталары һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре. Быйыл премия Рәсәйҙә даими телетапшырыуҙар төшөрә башлауҙың 85 йыллығына арналған.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

П. Ойунский исемендәге Саха академия театры гастролдәре **5 ноябрь "Тиит"** (У. Шекспир), **6 ноябрь "Хунские повести. Граница"** (Н. Лугинов)

**7 ноябрь "Уятырға ашыҡтым ҡояшты"** Шағир Риф Тойғондоң тыуыуына 70 йыл. Инеү бушлай.

**8 ноябрь "Зөбәржәт ҡала тылсымсыһы"** (А. Волков), әкиәт. Башлана 11.00

**8 ноябрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл

**9 ноябрь "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт

**10 ноябрь "Антигона"** (Ж. Ануй), драма

**11 ноябрь** Олег Хановтың юбилей кисәһе

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**5 ноябрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00

**8 ноябрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия

**10 ноябрь "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**14 ноябрь** Орган залында халыҡ-ара һәм республика конкурстары лауреаты **Марсель Ҡотоев "Башҡортомдоң үлмәҫ моңо"** тип аталған концертҡа саҡыра. Концертта Азамат Тимеров, Рөстәм Шаһыбалов, Тимур Рамаҙанов, Дамир Тайыпов, Эльвира Хәйретдинова, Өфө дәүләт сәнғәт институтының ҡурайсылар ансамбле ҡатнаша.

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**10 ноябрь "25 йыл бергә"** Башҡорт драма театрының театрлаштырылған тамашаһы

ХОККЕЙ

# ӘЛЕГӘ ДҮРТЕНСЕЛӘБЕҘ...

**Ағымдағы йылдың октябрь уйындарын юлаевсылар Өфөлә тамамланы. Новокузнецкиҙың "Металлург"ы һәм Новосибирскиҙың "Себер"е менән уҙған матчтарҙа "Салауат Юлаев" еңеү яуланы.**

"Металлург" егеттәрен хужалар уйын башында ҡаты ҡыҫымға алып, беренсе осорҙо үҙ файҙаһына тамамланы. Ләкин икенсе осорҙа Кирилл Капризовтың штрафсылар эскәмйәһенә әләгеүе булды, ҡунаҡтар уйын иҫәбен тигеҙләп, ә юлаевсыларҙың икенсе тапҡыр әҙселектә ҡалыуҙарынан файҙаланып, алға уҡ сығып китте. Шулай ҙа "Салауат Юлаев" осорҙо тигеҙ иҫәп менән ябыуға өлгәште. Өсөнсө осорҙа уйын ҡомары артты ғына. Ике команда ла еңеүгә ынтылды һәм берәр гол индереүгә өлгәште. Матч иҫәбе хужалар файҙаһына - 4:3.

30 октябрҙәге "Салауат Юлаев" менән "Себер"ҙең осрашыуы ике команданың да көйәрмәндәре хәтерендә оҙаҡ һаҡланасаҡ әле - тәүгеләрен ҡыуандырып, икенселәренең йәнен үртәп. Матчтың өс осоронда ла юлаевсылар ҡунаҡтар ҡапҡаһы алдында ҡойон уйнатты. Һөҙөмтәлә беренсе осорҙа - 2, икенселә - 3 һәм өсөнсөлә тағы ла бер гол индерҙе. Ә ҡунаҡтар был осрашыуҙан бөтөнләй мәрәйһеҙ тороп ҡалды. Дөйөм уйын һөҙөмтәһе юлаевсылар файҙаһына - 6:0. Чемпионат алдынан ялға туҡтар алдынан "Салауат Юлаев" ышаныслы еңеү яуланы.

Әлеге көндә "Йәшел машина" КХЛ турнир таблицаһының "Көнсығыш" конференцияһында 44 мәрәй менән 4-се урында. Киләһе уйын шулай уҡ Өфөлә Тольяттиҙың "Лада"һы менән уҙасаҡ.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

Өфө ҡалаһы Революцион урамы, 55 адресы буйынса урынлашҡан **"Башҡорт энциклопедияһы"** ғилми-нәшриәт комплексының махсуслаштырылған һатыу нөктәһенән нәшриәт тарафынан баҫтырылған китаптарҙы - рус һәм башҡорт телендә **"Башкорт энциклопедияһы", "Салауат Юлаев"** энциклопедияһы, **"Башҡортостан халҡы", "Башкиры: этническая история и традиционная культура", "Русско-башкирский словарь", "Башкирский язык для малышей"**, шулай уҡ башҡа һүҙлектәр, монографиялар, район энциклопедияларын, башҡорт телен өйрәнеү буйынса пособиелар һатып ала алһығыҙ. "Башҡорт энциклопедияһы" нәшер иткән баҫмалар менән ентеклерәк рәсми сайтта: **www.bashenc.ru** һәм **www.bash-academkniga.ru** танышырға була.

**Тулыраҡ мәғлүмәт: 250-03-84.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Ноябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (7) дүшәмбе | 7:03 | 8:33 | 13:30 | 15:55 | 17:25 | 18:55 |
| 8 (8) шишәмбе | 7:05 | 8:35 | 13:30 | 15:53 | 17:23 | 18:53 |
| 9 (9) шаршамбы | 7:07 | 8:37 | 13:30 | 15:51 | 17:21 | 18:51 |
| 10 (10) кесе йома | 7:09 | 8:39 | 13:30 | 15:49 | 17:19 | 18:49 |
| 11 (11) йома | 7:11 | 8:41 | 13:30 | 15:48 | 17:18 | 18:48 |
| 12 (12) шәмбе | 7:13 | 8:43 | 13:30 | 15:46 | 17:16 | 18:46 |
| 13 (13) йәкшәмбе | 7:15 | 8:45 | 13:30 | 15:44 | 17:14 | 18:44 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МИЛЛИ ФИЛЬМДА...

## халыҡтың күңеле сағылһын

**Өфөлә өсөнсө тапҡыр "Көмөш Аҡбуҙат" Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале үтте. Өс көн барған фестивалдә Монголия, Иран, Ҡаҙағстан, Афғанстан, Бангладеш, Ҡырғыҙстан, Сирия һәм Рәсәй төбәктәренән 9 - документаль, 8 - тулы метрлы һәм 7 художестволы фильм ҡатнашты.**



Бөгөн кино килем алыу сараһы булараҡ ҡабул ителгән заманда йәшәһәк тә, күптәр өсөн ул - кешеләрҙең аңын һәм тормошон үҙгәртә алыу һәләтенә эйә сәнғәт төрө. Бигерәк тә милли киноның ошондай юғары сәнғәт тип аталырға тулы хоҡуғы бар - фестивалдә ҡатнашыусы фильмдарҙың хатта бер нисәһен генә ҡарағандан һуң да ошондай фекергә киләһең. Баҡтиһәң, бөгөнгө йәмғиәттә лә өлгө алырлыҡ кешеләр, идеалдар, әхлаҡи ҡиммәттәр бар, бары тик уларҙы күрә белергә генә кәрәк. Шуға ла баһалама ағзалары ла, саҡырылған абруйлы ҡунаҡтар ҙа был фестивалде һаҡларға, уны артабан да үҫтерергә кәрәк, тигән фекерҙе бер тауыштан ҡабатланы.

Милли киноның тағы бер үҙенсәлеге шунда - ул теге йәки был халыҡтың бөгөнгө хәлен дә аңғарта. "Төрлө кешеләр, төрлөсә йәшәү рәүеше тураһындағы фильмдар ҡайһы бер илдәрҙә, төбәктәрҙә көн күреүсе халыҡтарҙың бәлә-хәсрәте тураһында ла һөйләй. Фестиваль программаһының минең өсөн иң төп мөрәжәғәте ошо. Илдең гражданины булараҡ, был кешеләр алдында яуаплылыҡ тоям, был бик мөмкин булмаһа ла, уларға ярҙам иткем дә килә. Һәр кем был донъяла етешһеҙлектә, һуғыш уты аҫтында түгел, ә кешесә, матур итеп, тыныслыҡта йәшәргә лайыҡлы. Уларҙың яҙмышына битараф булырға ярамай, сөнки был ҡайғылар киләсәктә ҙур трагедияларға, милләттәр араһындағы низағтарға алып килеүе ихтимал", - тине баһалама рәйесе, кино сәнғәте белгесе, кинокритик Иван Форгач та.

Өсөнсө фестивалдең программаһында тәүге ике фестиваль менән сағыштырғанда киң масштаблы, костюмлы тарихи фильмдар әҙ булһа ла, милли рух тигән төшөнсәгә ҙур әһәмиәт һәм мәғәнә һалып эшләнгән фильмдар күп ине. Уларҙың береһенә - ҡаҙаҡ режиссеры Досхан Жолжаксыновтың "Ҡонанбай" фильмына Әмир Абдразаҡов исемендәге "Милли рух өсөн" призы тапшырылды. Быйыл шулай уҡ әсә темаһына ҡағылышлы фильмдар бер нисә булды. "Тимәк, әсә йөрәге бөтөн халыҡтарҙа ла бер тиң тибә. Был киноларҙы ҡарайһың да, унда үҙеңдең әсәйеңде, халҡыңдың әсәләре яҙмышын күрәһең, хатта тәржемә лә кәрәкмәй - кино сәнғәтенең әһәмиәте лә, бөйөклөгө лә шунда", - тигәйне режиссер Вилүрә Иҫәндәүләтова. Шуға ла тамашасы һөйөүе Садам Вахидиҙың "Мать Мария" (Афғанстан) киноһына тапшырылыуы бер кемгә лә яңылыҡ булманы шикелле. Ошо уҡ фильм "Ҡыҫҡа метрлы фильмда иң яҡшы оператор эше" призы менән дә билдәләнде. Эрдэнэцэцэг Базаррагаанның "Мать" (Монголия) фильмының төп героиняһы ла баһалама ағзаларының махсус призына лайыҡ булды. Ысынлап та, күберәк әсә һәм бала, ата һәм ул мөнәсәбәте, тыуған ергә мөхәббәт, тамырҙарыңа ихтирам темалары, балалар донъяһы менән бәйле картиналар өҫтөнлөк итте был фестивалдә, шуға ла ул күпкә ихласыраҡ, йылыраҡ тойолдо. Гран-приҙы "История Ждалала" (Бангладеш) тулы метрлы картинаһы алды. Был фильм - бер баланың еңел булмаған яҙмышы хаҡында. "Иң мәрхәмәтле фильм", тинеләр уның хаҡында баһалама ағзалары.

Режиссер Мехди Джафариҙың "Белуга" фильмы тамашасыны Иран менән таныштырҙы. Ябай халыҡтың балыҡсылыҡ менән шөғөлләнеүен һүрәтләгән картина глобаль экологик проблемалар ҙа күтәрҙе. Фильм "Тулы метрлы фильмда иң яҡшы сценарий өсөн" призын алды. Ғөмүмән, ниндәйҙер номинацияла приз алыусы фильмдар бик лайыҡлы һайланғайны. Мәҫәлән, "Документаль фильмда иң яҡшы оператор эше өсөн" номинацияһына лайыҡ булыусы Михаил Барыгиндың "24 снега" фильмында ат көтөүсе - тәбиғәт балаһы, шуның арҡаһында ул ғаиләһе менән аралашыуҙан мәхрүм. Йәғни, кино - ике юл сатында торған герой тураһында. Әйткәндәй, был фильмдың сығымдарын тулыһынса эшҡыуар ҡаплаған. Ҡырғыҙстандан килгән режиссер Аманбек Ажамат та үҙҙәрендә киноның башлыса коммерция фильмдары булыуын әйткәйне. Дәүләт йылына тулы метрлы 2-3 фильм төшөрөүгә генә булышлыҡ итә, ҡалғаны - тап меценаттар тырышлығы менән эшләнә. Иң мөһиме, бөгөн ҡырғыҙ тамашаһыһы ҡырғыҙ фильмдарына өҫтөнлөк бирә һәм коммерция фильмдары үҙҙәрен тулыһынса аҡлай. "Беҙ бары тик тамашасыларҙың күңеленә юл, тәү сиратта, уларға оҡшаған темалар таба алдыҡ", - ти йәш режиссер. Аманбек Ажаматтың "Физрук, золото и река" фильмы "Документаль фильмда иң яҡшы режиссер эше өсөн" призына лайыҡ булды.

Шулай уҡ Юрий Фетинг "Небесный верблюд" тулы метрлы фильмы өсөн "Иң яҡшы режиссер эше" номинацияһына, ҡыҫҡа метрлы фильмда ошо уҡ номинация Татарстандан Салауат Юзеевҡа тапшырылды. Башҡорт киноһын төшөрөүселәр ҙә баһалама ағзаларының иғтибарынан ситтә ҡалманы. Режиссер Айнур Асҡаровтың ҡыҫҡа метрлы "Пилорама" фильмы өсөн сценарий яҙыусы Дамир Йосопов үҙ номинацияһында приз һәм ошо уҡ фильмдың операторы Тимур Ғәниев Ғилван Әмиров исемендәге махсус призға лайыҡ тип табылды. Радик Килмәмәтовтың "Күңел йыры" "Документаль фильмда иң яҡшы герой" призы менән бүләкләнде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тимәк, "Көмөш Аҡбуҙат" фестивале менән бергә үҙебеҙҙә башҡорт киноһы ла үҫешә. Милли үҙаңды үҫтереү маҡсатына ҡайһылыр төбәктәрҙә милли әҙәбиәт, ҡайһылыр төбәктәрҙә милли кино хеҙмәт итә. Бәлки, киләсәктә ошо бөйөк миссияны үҙенә башҡорт фильмы ла алыр? Башҡорт киноһы бармы һуң ул, милли кино ниндәй булырға тейеш, тигәндәргә иһә, бында барыһы ла ябай, тип яуапларға булыр ине. Режиссер, оператор, сценарист, йәмәғәт эшмәкәре, Тажик ССР-ының халыҡ артисы Давлат Худоназаров Өфөлә студенттар менән осрашыуын телгә алып шулай тигәйне: "Студенттарҙан: "Башҡорттарҙың утҡа, һауаға, ергә, һыуға, икмәккә мөнәсәбәте ниндәй?" - тип һораным һәм был һорау, үкенескә күрә, яуапһыҙ ҡалды. Ә быларҙы бит белергә кәрәк, тап ошолар бөтөн нәмәнең нигеҙен тәшкил итә лә инде. Миҫал өсөн үҙемдең бынан 35 йыл элек Багдадта кино төшөрөүемде һөйләнем, кадрҙағы кеше икмәкте ергә ташлағас, аптырауҙан минең ҡулымдан камера төшөп китә яҙҙы. Ә уларҙың мәҙәниәтенән, донъяға ҡарашынан сығып ҡараһаң, был ғәҙәти хәл. Бына нимәһе менән башҡорт йәки башҡа милләттәр башҡаларҙан айырылып тора. Милли фильм ул - этнографик фильм түгел, унда иң тәүҙә халыҡтың күңеле сағылырға тейеш".**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БУШЛЫҠТЫ...

## асыу менән тултырма

Маҡтансыҡ әҙен маҡтап ҡыуаныр, бәхетһеҙ әҙен алдап йыуаныр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йәштәрҙе ҡарттарға ярҙам итергә ҡушалар, ә мин киреһенсә эшләр һәм ҡарттарҙы йәштәргә ярҙамға ҡушыр инем.

**(Бер аҡһаҡал аҡылы).**

Һиңә ярҙам итә торған һүҙҙе һин үҙ-үҙеңә әйтә алмайһың.

**(Эфиоп мәҡәле).**

Хеҙмәткәрҙе идеялар генераторына әйләндереүҙең иң яҡшы ысулы - уға иң юғары яуаплылыҡ йөкмәтеү.

**(Д. Огилви).**

Беҙҙең заманда кемгәлер ҡарата "Ул йәшәй белә" тип әйтәләр икән, тимәк, был кеше намыҫлылыҡ менән айырылып тормай, тигәнде аңлата.

**(С. Галифакс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ике әхирәт кафеға сәй эсергә инә һәм береһе икенсеһенә шулай тип зарлана башлай: "Әсәйем туҡтауһыҙ телефондан шылтырата һәм эргәһенә килеүемде үтенә. Ҡайһы саҡта барам мин уның эргәһенә, ләкин ихлас һөйләшеү килеп сыҡмай. Уның минең тормошом, эшем, аралашҡан кешеләрем менән ҡыҙыҡһыныуы, үҙ-үҙен тотошо - береһе лә оҡшамай миңә, ҡыҙа башлайым, тупаҫ һүҙ ысҡындырам, әрләшеп китәбеҙ... Нисә барһаң да бер үк хәл ҡабатлана. Ваҡытым да юҡ минең уның эргәһенә барырға..." "Беләһеңме, ә мин әсәйем эргәһенә бик йыш барам, - ти икенсе әхирәт.- Эсем бошһа ла, ниндәйҙер проблема килеп тыуһа ла, кәңәшләшергә кәрәк булғанда ла мин уның эргәһенә ашығам..." "Ысынлапмы? Ҡара әле, һин минән яҡшыраҡ булып сыҡтың түгелме?"- ти тәүге әхирәт. "Юҡ, мин дә һинең кеүекмен, - ти икенсе әхирәт күңелһеҙләнеп.- Мин бит әсәйем эргәһенә зыяратҡа йөрөйөм. Ул әхирәткә күсте. Тере сағында мин дә һинең кеүек инем, уның менән осрашыуҙарҙан ҡаса инем. Хәҙер бына ул саҡтарҙы бик тә һағынам. Әсәйем миңә бик тә кәрәк хәҙер, ләкин һуң шул инде. Шуның өсөн, тиҙерәк аҡылыңа кил һәм әсәйең янына ашыҡ, әхирәт. Ҡәҙерлә уны. Уның мыжыҡлыҡтарын түгел, ә лайыҡлы яҡтарын ғына күрергә тырыш. Әсәйеңдең һинең өсөн иң ҡәҙерле кеше икәнен аңлар өсөн уның зыяратҡа күсеүен көтмә. Бына хәҙер мин әсәйем өсөн бер ни ҙә эшләй алмайым. Бынан минең күңелем тағы ла нығыраҡ яралана. Ул яра ғүмерҙә лә уңалмаҫ кеүек..." Әхирәтенең был һабағы башынан сыҡмай ҡатындың. Ул эшкә барғас, секретарына телефондан бирәү менән дә тоташтырмаҫҡа, әсәһенең шылтыратыуына ғына яуап бирергә ҡуша. Бөгөнгө көндө тик әсәһенә бағышларға ҡарар итә ул..."**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 3 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4900
Заказ - 2043/10